✓ *Яҙмыш үҙенә буйһондормаҫ элек уны бала кеүек ҡулынан тотоп йөрөтөргә һәм үҙ иркеңә буйһондорорға кәрәк; ә инде яҙмыш һине үҙенә буйһондороп өлгөргән икән, уны яратыу фарыз.*

*(Ф. Ницше).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№7 (529)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Учалы балалары ла...**

сит ил балалары менән уйнаясаҡ



4

**Баҙар иҡтисадының...**

буласаҡ капитандары тәрбиәләнә бында



5-6

**Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы -**

үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алыу юлы түгелме?



8-9

**Тапҡыр яуап**



11

14 **ТВ-программа**

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү һәм йәшәтеү өсөн һәр беребеҙ нимәләр эшләргә тейеш, тип уйлайһығыҙ?

***Миңһылыу УСМАНОВА, филология фәндәре докторы, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры:*** Иң тәүҙә, ата-әсә булараҡ, һәр беребеҙ үҙ балабыҙҙы, унан ҡала балаларыбыҙҙың балаларын башҡортса һөйләшергә, уҡырға, яҙырға, бейергә, йырларға өйрәтергә тейешбеҙ. Шул саҡта ғына ул кеше, телебеҙҙе һаҡларға, үҫтерергә тейешбеҙ, тип хәбәр һөйләй ала. Мәктәп уҡытыр, тәрбиәләр әле, тип мәктәптән көтөп кенә ултырыу кәрәкмәй, ғаиләлә эш алып барырға кәрәк, сөнки туған телде һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә ғаилә институты иң төп ролде башҡара. Борон башҡорт ғаиләләрендә баланы 5 йәшкә тиклем нигеҙҙә әсәй тәрбиәләгән, атайҙар эшләгән, унан һуң, күҙ теймәһен, тип, улар сабыйға әллә ни яҡынламаған. Ошо йәһәттән мин, ҡыҙҙарыбыҙҙы яҡшы, хәстәрлекле әсәйҙәр итеп тәрбиәләүгә лә бөтә көстө һалайыҡ, тимәксемен. Әсә теле моңон сабый күңеленә һеңдереүҙе бала тыумаҫ борон уҡ башларға кәрәк: матур һүҙҙәр әйтеп, уны иркәләргә, униң менән һөйләшергә, йырҙарыбыҙҙы көйләргә... Бала тыуғас, уны дөрөҫ итеп һөйләшергә өйрәтергә, әкиәттәр уҡырға, йомаҡтар ҡойорға, телмәрендә мөмкин тиклем мәҡәл, әйтемдәр менән байытырға тырышырға кәрәк. Бөгөн беҙгә шулай ҙа балаларҙы туған тел һәм мәҙәниәтебеҙ ҡиммәттәренә йәлеп итеүҙә ғаилә ролен көсәйтеү буйынса саралар программаһын эшләү тураһында уйланырға кәрәк ине. Беҙ балалар үҫтергәндә Өфөлә башҡорт мәктәптәре юҡ ине әле, шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡыҙыбыҙ Зөһрә лә, улыбыҙ Иршат та, үҙебеҙгә эйәреп, саф башҡортса һөйләшеп үҫтеләр, башҡорт халыҡ әкиәттәрен ятҡа беләләр ине. 5-6 класҡа етә беҙ уларҙы әлеге 1-се Башҡорт республика интернат-мәктәбенә бирҙек. Үҙем бөтә ғүмеремде әсә теле уҡытыусылары әҙерләп сығарыу эшенә бағышланым. Илленән ашыу китабым: туған тел буйынса уҡыу әсбаптары, монографиялар баҫылып сыҡты, ваҡытлы матбуғат биттәрендә, радио, телевидение тапшырыуҙарында телмәр культураһы, стилистика мәсьәләләренә ҡағылышлы йыш сығыш яһайым - телмәребеҙ дөрөҫ, матур, төҙөк булһын, тип тырышам.

***Радик ӨМӨТКУЖИН, "Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы", Әбйәлил районы Хәлил урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытып та, туған телде һаҡлауға өлөш индермәйем, тиһәм, оят булыр. Ғөмүмән, башҡорт телен уҡытыусыларҙы мин милли тел һағында торған йөк аттарына оҡшатам. Үндан да, һулдан да, тел бөтә, телде һаҡлайыҡ, тип, йә булмаһа, башҡа ниндәйҙер лозунгылар ҡысҡырмаһындар, беҙ шым ғына үҙ эшебеҙҙе атҡарыу менән мәшғүлбеҙ. Ни тиһәң дә, йөк аттары күндәм булыуға ҡарағанда, ныҡышмал һәм сыҙамлы була. Туған телгә һөйөү тәрбиәләү беҙҙең ашаған икмәгебеҙ генә түгел, төп бурысыбыҙ ҙа. Бәлки, үҙебеҙ һайлаған яҙмышыбыҙҙыр ҙа...

Феликс Финкбайнер исемле немец үҫмере, миллион ағас ултыртам, тип танылыу яуланы. Һис шикһеҙ, шәп шөғөл! Әммә ағас ултыртыу - башланғыс, ағасты үҫтереү - өлөшкә төшкән яуаплы эш. Беҙ, башҡорт теле уҡытыусылары, ғаиләлә шытым биргән үҫентеләрҙең тамырҙары нығынһын өсөн тырышабыҙ. Конституциябыҙға Республика Президенты башҡорт телен белергә тейеш, тип аҡҡа ҡара менән яҙылған икән, ил башлығының үрнәге башҡа граждандарға ла ҡағыла, тип ҡабул итәбеҙ. Сөнки беҙ законды үтәүселәр, беҙ мисәүҙең уртаһына егелгәнбеҙ. Беҙ - йөк аттары.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ МЕНӘН ДӘ...

## ҡурай аша аралашырға ине

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

**Роберт ЮЛДАШЕВ, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, "Ҡурайсы" төркөмө етәксеһе:** 27-31 ғинуарҙа "Русский" ярымутрауында урынлашҡан Владивосток ҡалаһында донъяның 27 дәүләтен берләштергән Азия-Тымыҡ океан парламент форумының 21-се сессияһы булып үтте. Форум эшенә РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы һәм Азия-Тымыҡ океан парламент форумы рәйесе Валентина Матвиенко етәкселек итте. Сараның йомғаҡлау өлөшөндә ҡатнашыусылар иғтибарына Рәсәй музыканттары тарафынан әҙерләнгән концерт күрһәтелде һәм беҙгә лә был концертта сығыш яһау бәхете тәтене.

**(Дауамы 11-се биттә).**



Роберт Юлдашев Валентина Матвиенко менән.

✓ Беҙҙең ғаиләлә атайым менән әсәйем дә, апайҙарым да башҡорт телен бик яҡшы белә торғайны. Теләстә туғандарыма барғанда ла (улар ҙа рус милләтле) үҙ-ара башҡортса һөйләшеп алып китә торғайныҡ.



БАШ ЙОРТТА...



# АСАРБАҠТАР... банкоматтарға ояланы

**Заман алға барған һайын, граждандарҙың тормошон еңеләйтеү өсөн нимә генә уйлап тапмайҙар. Юҡҡа ғына, ялҡаулыҡ тормошто алға алып бара, тимәгәндәрҙер. Уйлап ҡараһаң, ысынлап та шулай бит: кер йыуам, тип аптырайһы түгел - "килен" тип аталған кер йыуыу машинаһы үтекләп кенә сығармай инде. Шулай уҡ һауыт-һаба йыуыу машиналары ла бар, иҙәнде йыуыусы саң һурҙырғыстар ҙа шәп. Хатта элек эш хаҡын ҡағыҙға ҡул ҡуйып, рәхәтләнеп, ҙур ҡәнәғәтлек менән һанап алһаҡ, хәҙер был мәшәҡәттәрҙән ҡотолдоҡ - туранан-тура карточкаға ғына күсерәләр. Ҡул ҡуйып та, аҡса һанап та ваҡыт үткәреп тә тормайһың. Ул ғына ла түгел, ул аҡсаларҙы һаҡлауы ла, кәрәк ваҡытта тиҙ генә алыуы ла еңел - баш ҡалала аҡса биреүсе терминалдар һәр туҡталыш һайын тиерлек урынлаштырылған.**

Әммә уларҙың ҡайһы берҙәренә инеп аҡса алып сығыу Үҙәк каналдарҙың береһенән күрһәтелгән "Форд-боярд" уйынынан бер ҙә кәм түгел. Сәбәбе ябай: урамдарҙағы банкоматтар урынлаштырылған урындарға һуңғы ваҡытта противогаз кеймәйенсә инеү мөмкин түгел - төн сыҡҡансы улар асарбаҡтарҙың "ҡунаҡханаһы" ролен үтәй. Ә инде ҡайҙа асарбаҡтар - унда бәҙрәф тә бер урында. Шуға ла был "ҡунаҡхана"ның тирә-яғы ла ҡарағыһыҙға һәм тын алғыһыҙға әйләнә. Йәйгеһен, йылы көндәрҙә асарбаҡтарға йоҡлар урын бар - парктар, балалар майҙансыҡтарына ята ла йоҡлай, тора ла, шунда уҡ физиологик ихтыяжын башҡара. Тап шул аталған урындарҙа халыҡ ял итә, балалар уйнай...

Бөгөн баш ҡалала, рәсми һандар буйынса, өс меңдән ашыу асарбаҡ иҫәпләнә (ә рәсми булмағандарын һанай башлаһаҡ). Уларҙың ни бары йөҙләбе генә ваҡытлыса булыу урындарында йоҡлап сығыуға иҫәп тота ала. Унда ла улар бер айҙан артыҡ йәшәй алмай. Был үҙәккә эләгеүҙең дә үҙенең схемаһы - бюрократик кәртәләре бар: тейешле анализдар тапшырмайынса унда инеү мөмкин түгел. Ә анализдар тапшырыу өсөн документтарың булырға тейеш. Документтарҙы тергеҙеү йәки алыу өсөн аҡса кәрәк һ.б. Шуға һуңғы көндәре еткәнсе, медицина хеҙмәте лә ала алмайынса йөрөй инде был асарбаҡтар йылы "мөйөш" эҙләп.

Ә шул уҡ ваҡытта Өфөлә хайуандарҙы яҡлау буйынса "Изгелек" мәрхәмәтлек фонды яңы приют төҙөй. Бының өсөн Иҡтисади үҫеш министрлығы 1 миллион субсидия бүлгән. Ул төҙөлөп бөтһә, унда 200 хайуанды урынлаштырыу мөмкин буласаҡ. Ирекһеҙҙән, бөгөн кешенең баһаһы хайуан ҡәҙәре лә түгел, тигән һығымтаға киләһең.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү һәм йәшәтеү өсөн һәр беребеҙ нимәләр эшләргә тейеш, тип уйлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы"Көнгәк"гәзитенең баш мөхәррире:*** Тәү сиратта, һәр кем үҙ туған теленә битараф булмаҫҡа тейеш, тип иҫәпләйем, сөнки бөтә бәлә башында ғәмһеҙлек, битарафлыҡ тора. Миҫалға бөгөнгө атай-әсәйҙәрҙе алайыҡ. Улар сабыйҙары телен милләтебеҙгә ят булған "мама", "папа" һүҙҙәре менән асыу өсөн бөтә көсөн һала, әйтерһең дә, шунан ғына балалары ҙур милләт вәкиле булып китә! Күптәре, минең балам ғына әсә телен белмәүҙән башҡорт теленә ни зыян, тип, үҙ-үҙенә аҡланыу эҙләй. Тамсынан күл йыйыла, тигән әйтемде белмәйҙәр, күрәһең, йә иһә белмәмешкә һалышалар. Тимәк, был һорауҙар иң тәүҙә атай-әсәйҙең әсә теленә булған ҡарашына йүнәлтелә, сөнки баландын теле нисек асылғаны уларҙан ғына тора. Башҡортса һөйләшеү генә түгел, хатта үҙ телен аңламаған милләттәштәребеҙ быуыны үҫте. Мин ундайҙарҙы йәлләйем, сөнки атай-әсәһе иҫән-һау булған етем балалар кеүек күрәм.

Бына, ҡарағыҙ әле: меңәрләгән йыл атай-олатай йыйған, булдырған ғөрөф-ғәҙәттәрҙән, мәҙәни ҡомартҡыларҙан, йолаларҙан, туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек һәм башҡа халҡыбыҙ ынйыларын аңламаған, күңел түренә һалмаған, ҡанына һеңдермәгән быуын үҫә. Әҙәм балаһы фани донъяға нәҫелен дауам итергә, рухи байлыҡты, телен киләсәк быуынға тапшырыу бурысы менән килә. Ә ул матди байлыҡ артынан ҡыуалай, төп маҡсатынан тайпыла, тимәк, тәбиғәт алдындағы бурысын үтәмәй.

Башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү бурысы бөгөн шулай уҡ башҡорт теле уҡытыусыларына ла йөкмәтелгән. Бындай бурыс педагогтар араһынан, тәү сиратта, уларға ғына бирелгән. Уны рәхмәтле итеп ҡабул итергә һәм урынына еткереп башҡарырға кәрәк, сөнки милләттең булыу-булмауы, тел сафлығы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең, традицияларҙың аныҡ үтәлеше нәҡ уларҙың бурысы.

Гәзиттәрҙә, радио һәм телевидениела эшләүсе журналистарҙың был мәсьәләләргә булған ҡарашына ла телдең киләсәге ныҡ бәйле. Беҙ юғары технологиялар заманында йәшәйбеҙ, тип һөйләргә яратабыҙ. Халыҡтың матбуғатҡа ышанысы ҙур, шуға күрә гәзит биттәрендәге, радио-телевидениелағы һәр һүҙ, һәр һөйләм ҙур көскә эйә. Уларҙы уҡыусыңа, тамашасыңа еткерер алдынан ете ҡат үлсәргә кәрәк. Матбуғат биттәрендә предприятие, ойошма, власть етәкселәренә лә һүҙ бирелергә тейеш. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҙур вазифа биләгән милләттәшебеҙ туған теле тураһындағы фекерен әйтергә ҡурҡа. Власть баҫҡысынан өҫкә күтәрелгән һайын, уны милләт мәсьәләләре аҙыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Бына шундай етәкселәрҙән торған дәүләт аҙ һанлы халыҡтар теле, тарихы, мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынмай. Үҙен кеше иткән, ҙур донъяға сығарған туған теленә мәңге бурыслы дәүләт хеҙмәткәре, тел өсөн дәүләт тә яуаплы, тигәнгә аптырап ҡарай, йәнәһе, мин ҙур проблемалар хәл итәм, ә һин ваҡ мәсьәлә менән башты ҡатыраһың.

Бөгөн, минеңсә, башҡорт телен һаҡлауҙы, үҫтереүҙе тик йәмәғәт ойошмалары һәм ҡайһы бер матбуғат баҫмалары ғына урынына еткереп үтәй, ә һанап киткән башҡа кешеләр ошоно аңлаһа, күтәрелгән һорау урынһыҙ булыр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



# ТЕЛҺЕҘ ҠАЛЫП... рухыбыҙ һынмаһын

**Республика буйынса мәктәптәр һаны кәмеүе, замана теле менән әйткәндә, оптималләштереү кисереүе, күптәрҙе оло борсоуға һалды. Эйе, бер яҡтан, ике-өс бала өсөн (шундай синыфтар ҙа бар ине) ун уҡытыусы тотоу мәғәнәһеҙлек кеүек булһа, икенсе яҡтан, эшһеҙ ҡалған кешеләр ҙә йәл. Шулай ҙа был проблема тағы ла мөһимерәк мәсьәләне көнүҙәккә әүерелдерҙе. Ул - башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренең кәмеүе. Ҡайһы бер кешеләрҙең, әсә телен уҡытыуҙың бөтөнләй кәрәге юҡ, тигән фекерҙе күтәреп сығыуы айырыуса борсоуға һалды. Ни өсөндөр әҙәм балаһы телен юғалтһа, үҙен дә юғалтасағын аңлап бөтмәй. Ошо хаҡта башҡалар ни уйлай икән?**

**Сергей ПЕШКОВСКИЙ, эшҡыуар:** Бала сағым Баймаҡ ҡалаһында үтте. Бер урам малайҙарҙың йәйгеһен Таналыҡ йылғаһында һыу инеүе, ҡышҡыһын ҡарҙан ҡәлғәләр төҙөүе әле лә күҙ алдымда. Беҙҙең ғаиләлә атайым менән әсәйем дә, апайҙарым да башҡорт телен бик яҡшы белә торғайны. Темәстә туғандарыма барғанда ла (улар ҙа рус милләтле) үҙ-ара башҡортса һөйләшеп алып китә торғайныҡ. Һап-һары, зәңгәр күҙле егеттәрҙең башҡортса белеүен башына ла килтермәгән башҡорт ҡыҙҙарының беҙҙең хаҡтағы уй-фекерҙәрен дә еңел белә торғайныҡ. Улар беҙҙе баштан-аяҡ тикшереп сыҡҡас, башҡортса һүҙ ҡушабыҙ. Эй, тегеләр китә торғайны оялып! Ҡыҙыҡ саҡтар булды инде. Атай-әсәйемде юғалтып, йәшләй генә сит яҡтарға сығып китергә тура килһә лә, башҡорт телен онотманым. Быны маҡтанғандан түгел, ә аптырағандан әйтәм. Нимәгә аптырайыммы? Аҙ ғына ситтә йәшәп алған башҡортттарҙың да үҙ теленән ваз кисеүенә. Ни өсөндөр, улар тыуған еренән айырылыу менән туған теленән дә баш тартҡан кеүек ҡылана.

Минең тормош юлдашым - башҡорт ҡыҙы. Беҙҙең ғаиләлә бер ҡасан да дин, тел арҡаһында бер-береңде аңламау кеүек күренештәр булғаны юҡ. Балалар ике телде лә бик яҡшы белә, өйҙә русса ла, башҡортса ла һөйләшәбеҙ. Ә бит уларҙың мәктәптә, урамда аралашыуы русса ғына. Башҡортостанда йәшәмәһәләр ҙә, әсәләренең туған телен яҡшы белеүе тәрбиәнән киләлер тип уйлайым. Әҙәм балаһы ни тиклем күп тел белә, шул тиклем ул рухи, мәҙәни яҡтан нығыраҡ үҫешә бит. Шуға күрә балаларына туған телде уҡытыуҙы кәрәк түгел тип тапҡан ата-әсәләр аптырата. Минең ҡатынымдың: "Һин минең телемде шулай яҡшы белмәһәң, беҙҙең ғаиләне ҡороуы бик ауыр булыр ине", - тигән һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар бит.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илшат Тажетдинов етәкселегендәге рәсми делегация эш сәфәре менән Америка Ҡушма Штаттарына юлланды. Сәфәр программаһы эшҡыуарҙарҙы һәм инвестицион структуралар вәкилдәрен сәнәғәт, ауыл хужалығы, юл һәм транспорт инфраструктураһы, ҡунаҡханалар бизнесы, торлаҡ төҙөлөшө өлкәләрендә берлектәге проекттарҙа ҡатнашыуға йәлеп итеүгә йүнәлтелгән, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтенән.

✓Былтыр Башҡортостан Республикаһы ҡоролоҡтан зыян күргән ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәренә ярҙам итеү өсөн субсидия биреүгә федераль бюджеттан 495 миллион һум күләмендә аҡса алған илдең 20 төбәге иҫәбенә инде. Ҡоролоҡ һөҙөмтәһендә республиканың агросәнәғәт комплексы ҙур зыян күрҙе, зыяндың дөйөм суммаһы 5,5 миллиард һум күләмендә билдәләнде. Аномаль эҫе һауа торошо арҡаһында сәсеүлектәрҙең биштән бер өлөшө һәләк булды. Айырыуса ауыр хәл республиканың төньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш төбәктәрендә, шулай уҡ Ишембай, Ғафури һәм Ҡариҙел райондарында күҙәтелде.

✓2012 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан уҡытыусыларға хеҙмәт хаҡын арттырыу буйынса Рәсәйҙә икенсе урын биләй. Дөйөм алғанда, ил буйынса 2012 йылдың декабрендә дөйөм белем биреү учреждениелары уҡытыусыларының уртаса хеҙмәт хаҡы 31,2 мең һум тәшкил иткән. Был 2012 йылдың ғинуары өсөн түләнгән эш хаҡынан (16,4 мең һум) ике тапҡырға күберәк һәм 2012 йылдың ноябре өсөн түләнгән уртаса эш хаҡынан (24,5 мең һум) 27 процентҡа юғарыраҡ.

✓Башҡортостан Республикаһында 2011-2012 йылдарға иҫәпләнгән һаулыҡ һаҡлау системаһын яңыртыу программаһы тормошҡа ашырыла башлағандан алып Өфөнөң һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереүгә 2,8 миллиард һум аҡса тотонолған. Медицина учреждениеларының матди-техник базаһын нығытыуға 700 миллион һум аҡса бүленгән. Баш ҡала дауаханалары һәм поликлиникалары өсөн 1627 берәмек медицина ҡорамалы һатып алынған. Программа сиктәрендә шулай уҡ яңы махсуслашҡан үҙәктәр асылған. Яҡын арала 3-сө һәм 13-сө дауаханаларҙың травматология үҙәктәре, 13-сө дауахананың ҡан тамырҙары бүлеге эшләй башлаясаҡ.

СӘЙӘСӘТ ШАҢДАУҘАРЫ

**Оборона министры Анатолий Сердюковтың отставкаға китеүе коррупцияға ҡаршы көрәш тип аталған "быуаны" йырып ебәрҙе. Унда йылдар буйына тупланып килгән сүп-сар яҙғы ташҡын һымаҡ телевизор экрандарына, матбуғат биттәренә эркелде. Көн дә теге йәки был төбәктә берәй чиновникты, врачты, уҡытыусыны коррупцияла ғәйепләп, эш асып ҡына торалар. Бөтә хоҡуҡ һаҡлау органдары тик ришүәтселәр менән генә шөғөлләнә кеүек. Бына хәҙер фән өлкәһендәге коррупция Рәсәй премьер-министры Дмитрий Медведевты махсус мөрәжәғәт менән сығыш яһарға мәжбүр итте.**

# БАҘАРМЫ, ӘЛЛӘ МАҘАРМЫ?

Мәскәү дәүләт педагогия университетының диссертация советы аша үткән 25 диссертацияны тикшереп, уларҙың күпселегенең фикция һәм плагиат икәнен асыҡлағас, тәфтишселәр Юғары аттестация комиссияһы (ВАК) етәксеһе Феликс Шамхаловты уғрылыҡта ғәйепләп, уға ҡаршы енәйәт эше асты. Бының менән, ҡасан юғары чиновниктарҙың коррупцияһын фашларҙар инде, тип хыялланған ябай кешегә лә уйланырға яңы йүнәлеш асылды: коррупция менән чиновниктар ғына түгел, бөтә Рәсәй халҡы бәйләнгән. Чиновниктар, врачтар, уҡытыусылар ғына алмай ришүәт, уны күптәр ала һәм күптәр бирә. Йәш кенә ЮХХДИ хеҙмәткәренең бер нисә ҡатлы коттеджы, йәки бюджет өлкәһендә "осон-осҡа ялғап" эшләүсенең затлы сит ил машинаһы ниндәй аҡсаға килгәне, тома наҙан "ғалимдың" диссертацияһы нисек яҡланғаны тураһында бөтәбеҙ ҙә белеп торабыҙ. Интернет селтәрендә реферат, докторлыҡ диссертацияларының күпме торғанын, теге йәки был конкурстағы урын алыу өсөн кемгә күпме түләргә икәнен дә беләбеҙ.

Кавказ республикаларының береһендә ялған юрист дипломы менән 15 йыл судья булып эшләгән берәүҙе кем был урынға үткәргән һуң? Беҙҙең ҡайһы бер район хакимиәттәрендә ошондай ялған дипломдар менән урынлашҡан хеҙмәткәрҙәрҙе кем эшкә алды икән? Студенттар, мәҫәлән, сессия башланыр алдынан уҡ имтихан биреү өсөн аҡса йыя башлай. Бер һүҙ менән әйткәндә, коррупция бөтә йәмғиәтте баҫып алды. Шуға ла бер кем дә үҙенә ҡаршы енәйәт эше асыуҙан азат түгелдер. Хатта дөрөҫ тәрбиә алып эшләй башлаған йәш белгес тә тиҙ арала коллегалары, таныш-тоноштары йоғонтоһонда ошо бысраҡ эш менән шөғөлләнә башларға мәжбүр була. Бында "Балыҡ башынан серей" тигән әйтем дә әллә ни дөрөҫкә сыҡмай. Бөгөнгө көндә коррупциянан азат бер генә өлкәне лә табып булмай, тиһәң дә хаталанмаҫһың. Шуныһы ҡурҡыныс, был хәлдән сығыу юлы юҡ кеүек...

Ялған дипломға, ялған диссертацияға әйә шарлатандар буш урында барлыҡҡа килмәгәндәр бит. Уларға фәнни етәкселәре, рәсми оппоненттары "йомоҡ ҡуҙҙәре" менән булышлыҡ иткән. Рәсәй шарттарында баҙарҙағы "алмашыу"ҙың "алдашыу"ға әүерелеүенең сәбәбен аңлатыуы еңелдән түгел. Нисек инде, бер нисә йыл элек совет тәрбиәһендә үҫкән халыҡ бер-береһен алдап, аҡса һуғыуҙы үҙ итте? "Алдаҡһыҙ донъя файҙаһыҙ" принцибы еңеп сыкты. Йөҙ дуҫ урынына йөҙ һумды өҫтөнөрәк ҡуйғандар күбәйҙе.

Әйе, алдаҡтың масштабы ҙур ҡолас йәйҙе. Хатта етештереүселәр тарафынан уйлап табылған алдаҡты рәсмиләштереүҙәр ҙә аҙым һайын: мәҫәлән, техник регламентҡа ысын һөт урынына "һөт эсемлеге", һут урынына химия ҡушылған икенсе эсемлекте яҙып, һатып була. Күп тауарҙар, шул иҫәптән, балалар уйынсыҡтары ла бер көнлөк ҡулланыу өсөн генә сығарыла. XIX быуатта бөйөк химик Лавуазье шәкәрҙең биш төрлө ялған төрөн таба алһа, бөгөн уларҙың иҫәбенә сығырлыҡ та түгел. Киләсәктә хеҙмәт кенәгәһен бөтөрөү ҙә ошо алдаҡты үҫтереү сараһы булып тора түгелме: унһыҙ пенсия стажын иҫбатлауы бик ауырға төшәсәк бит. Ул ғына ла түгел, был алдашыу кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙә лә баҫып бара. Ялған дуҫтар, ялған мөхәббәт гәзәти күренешкә әйләнде. Филипп Киркоровтың һәм Максим Галкиндың сиратлап Алла Пугачеваға ғашиҡ булып, өйләнеүҙәре, йәш модельерҙарҙың аҡсаһы өсөн ҡартларға кейәүгә сығыуы бер кемде лә аптыратмай хәҙер. Балаларын ошо юҫыҡта тәрбиәләгән ата-әсәләр ҙә етерлек.

Ул ғына ла түгел, хәҙер балаларҙы әсәйһеҙ таба башланылар. Түл ҡуҙәнәген бер ҡатын һата, икенсеһе инкубатор булып яллана, ә өсөнсөһө имеҙеп үҫтерә. Ә тыуыу тураһындағы таныҡлыҡта "Әсәһе кем?" тигән урында - бушлыҡ. Бала әсәһе ярҙамында түгел, ялланған ҡатындар ярҙамында донъяға килә. Иң ҡәҙерле кешеһе - әсәһе - юҡ булып тыуа. Үгәй ҡалған баланы бөтәбеҙ ҙә йәлләйбеҙ, ә был баланы? Уның психикаһы нисек буласағын күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Әсәйҙең энергетикаһын, йылыһын тоймай үҫкән бала ниндәй ғәҙәт-ҡылыҡтар һалыныр? Кешеме булырмы ул, әллә монстрмы? Йәмғиәт фәхишәләрҙе, уларға йөрөгән ир-атты яратып етмәй. Ә аҡса өсөн буласаҡ балаһының күҙәнәген һатҡан ҡатын-ҡыҙға, уны һатып алған ир-атҡа ниндәй мөнәсәбәт булырға тейеш?

Байлыҡҡа иҫәп тотолған никах, бай ирҙән бала табыу күп ҡатын-ҡыҙҙар өсөн кәсепкә әйләнде. Ындай кәләштәргә өйләнеү ҡурҡынысы күп егеттәрҙе һағайта, улар буйҙаҡ булып ҡалыуҙы хуп күрә. Көслө зат та ҡатын-ҡыҙҙарҙан ҡалышмай: айырылғас, ялған справка менән 500 һумлыҡ алимент түләү, ҡатыны балаһы менән фатирҙан ҡыуып сығарыу улар өсөн дә оят, яҙыҡ эш тип һаналмай. Бында шәхси милекте, байлыҡты һаҡлау ғаилә, никах, бала тигән төшөнсәләрҙән дә өҫтөнөрәк тора. Суд та хосуси милекте яҡлауҙы ғаиләнән өҫтөнөрәк ҡуя. Сирек быуат эсендә баҙар иҡтисады йәмғиәтебеҙҙең терәге - ғаиләне - емереп ташлау сигенә еткерҙе. Аптырарһың да шул. Ғөмүмән, баҙар иҡтисадына бағланған өмөттәр буш булып сыҡты, ә күп осраҡта - минус билдәһе менән бойомға ашты. Рәсәй шарттарында ул нишләптер тик маҙарға ғына әйләнә бара.

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

---

Мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре мотлаҡ уҡытылырға тейеш, тигән фекерҙәмен. Сөнки һәр илдең үҙ теле, үҙ дине, үҙ йолалары. "Башҡортостанда башҡорт теле уҡытылырға тейешме?" тигән һорау мәғәнәһеҙ генә түгел, ә ҡурҡыныс булып яңғырай. Һәр милләт, һәр тел ихтирамға һәм иғтибарға лайыҡ.

Журналистарҙың бер ҡылығын да аңлап етмәйем, шул турала ла әйтеп үтәйем. Ни өсөндөр Рәсәйҙең генә түгел, ә Башҡортостан тележурналистары ла "Башкирия" тип һөйләй. Ошондай тәү ҡарашҡа ябай ғына күренештән үҙең генә түгел, ә һинең халҡың, республикаң тураһында фекер йөрөтәләр бит. Минең ҡатыным тележурналистар ауыҙынан "Башкирия" тигән һүҙҙе ишетһә, телевизорҙы һүндереп ҡуя хатта. Һәм мин уны аңлайым. Ҡатыныма үҙ халҡы һәм теле өсөн борсолоу хас. Был үҙен кеше тип һанаған һәр кемгә хас булырға тейеш. Шуға күрә журналистарҙы әҙерләгәндә етәкселек ошо мәсьәләне лә урап үтмәҫкә тейештәр, тип уйлайым. Минең милләттәштәрем Үҙәк канал аша "Башҡортостан" тип һөйләгәндә, башҡорттарҙың үҙ республикаһы атамаһын ғорурлыҡ менән яңғырата алмауы аяныслы. Тәү ҡарашҡа ябай ғына бер күренеш. Әммә ошондай ябайлыҡтар олораҡ проблемаларға килтерә лә шул. Мәктәптәрҙә башҡорт теле ҡыҫҡартыла башлаған икән, тимәк, был милләт кешеләрендә милли рух һәм ғорурлыҡ юғала башлаған. Үҙенүҙе ихтирам иткән кеше генә йәмғиәттә үҙ урынын табыуын онотмағыҙ. Ә үҙ телен белмәгән кеше һәр саҡ йәлләү, хатта кәмһетелеүгә генә лайыҡ буласаҡ.

**Гөлгенә БАЙРАҠАЕВА, Сибай ҡалаһы, хужабикә:** Бала саҡтан Гуля булып үҫтем. Урамда башҡортса һөйләшеүҙән ояла торғайным. Ҡайҙан килде икән был хис минә, белмәйем. Хәҙер инде иллене үткәс, туған телемдә һөйләшеп туя алмайым, башҡортса спектаклдәр ҡарап, йырҙар тыңлап, илайым. Балаларымды тәрбиәләү республикабыҙҙың үҙаллылыҡ яулаған йылдарына тап килеүенә ҡыуанып бөтә алмайым. Сөнки үҙ телен белеп үҫтеләр. Ейәндәрем дә башҡортса матур итеп һөйләшә, исемдәре лә бик матур: Искәндәр, Батырхан, Нурсолтан. Хәҙер үҙемдең гөл кеүек исемемдән баш тартып, эт кеүек ҡушамат алып йөрөүемә әрнейем. Ә бит беҙҙең заманда ла, ҡырын ҡараштарға иғтибар бирмәй, матур итеп үҙ телеңдә һөйләшеп йөрөгән милләттәштәрем булды. Һуңлап булһа ла улар менән һоҡланыуымды һәм ғорурланыуымды белдергем килә.

Мәғариф министрлығына мөрәжәғәт итеп, шуны әйткем килә: быуаттар буйы көрәштәр аша үҙ ерен һәм телен һаҡлап килгән батыр башҡортомдоң тамырына балта сапмағыҙ. Кеше үҙ илендә лә рәхәтләнеп, ауыҙ тултырып үҙ телендә һөйләшә алмай икән, нимәгә уға тыуған ер? Хәҙерге балаларҙы былай ҙа сит ил мультфильмдары тәрбиәләй. Шуға күрә улар сит телде башҡорт теленә ҡарағанда тиҙерәк өйрәнә. Рәсәй элек-электән үҙенең күп милләтле халҡы менән көслө булған. Ә шул халыҡтарҙың телен тартып алып, рухын һындыр әле - электән беҙҙең ерҙәргә теш ҡайраған илдәргә етә ҡаласаҡ. Ә рухһыҙ кешегә барыбер буласаҡ - уға Ватан да, тыуған ер ҙә кәрәкмәй. Бына нимәгә килтереүе ихтимал туған телде тыйыу! Шуға күрә ил етәкселәре, министрҙар уйлап эш итһен ине. Мәктәптәрҙә оптималләштереү үткәрергә кәрәк икән, мөғайын, уны башҡорт теле һәм әҙәбиәте иҫәбенә башҡарырға, тигән бойороҡ бирмәгәндәрҙер.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Телһеҙ кеше - рухһыҙ кеше. Уға милләте генә түгел, ә Тыуған иле лә кәрәкмәй. Бар Ер шарында болғаныш барғанда, көсһөҙләнеп ҡалған илгә иң тәүҙә ябырыласаҡтар. Һуғыш асмаһалар ҙа, "мейе һөжүме" тағы ла ҡурҡынысыраҡ бит. Ә рухы һынған, телһеҙ ҡалған халыҡтарға барыбер буласаҡ. Шуға күрә, уйланырға урын бар, милләттәштәр.**

**Гүзәл ИСӘНГИЛДИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Йәш ғалимдар Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте гранттары менән наградланды. Бөгөнгә көндә Башҡортостанда өс меңдән ашыу кеше фән өлкәһендә мәшғүл, уларҙың 250-һе - йәш ғалимдар. БР Хөкүмәте гранттарына йәмғеһе 30 кеше лайыҡ булды.

✓ Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, Өфөлә 2012 йылда 16314 сабый тыуған, 12499 кеше үлгән. Халыҡтың тәбиғи артыуы 3815 кеше тәшкил иткән. Сәнәғәт етештереүе индексы дөйөм алғанда 103,6 процент тәшкил иткән. Баш ҡала предприятиеларының ваклап һатыу сауҙа әйләнеше 367 миллиард һум тәшкил икән. Өфөләләрҙең аҡсалата килеме лә арткан. Ҡаланың ҙур һәм урта предприятиелары һәм ойошмалары хеҙмәткәрҙәренең уртаса айлыҡ эш хаҡы 27,5 мең һум тәшкил иткән.

✓ Башҡортостан менән Татарстан тыуым кимәле буйынса Волга буйы федераль округында дүртенсе урында тора: 2012 йылда ике республикала бер мең кешегә 14,5 яңы тыуған сабый тура килгән, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Үлем кимәле буйынса Башҡортостан өсөнсө урында килә: бер мең кешегә 13,1. Дөйөм алғанда илдә былтыр үлемдең тыуымдан 0,1 процентҡа күберәк булыуы теркәлгән. Волга буйы федераль округында халыҡтың тәбиғи артыуы ете төбәктә күҙәтелгән.

✓ "Бала табыу сертификаты" тормошҡа ашырыла башлағандан алып Башҡортостанда тыуым 42 мең сабыйҙан (2006 йыл) 57 меңгә тиклем (2012 йыл) арткан. Былтыр "Бала табыу сертификаты" программаһына Рәсәй Социаль страховка фондының Башҡортостан төбәк бүлексәһе тарафынан йәмғеһе 600 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән. Средстволар 94 медицина ойошмаһына йүнәлтелгән. Бала табыу сертификаттары менән 56 меңдән ашыу ҡатын файҙаланған.

✓ 2013 йылда Өфөнөң электр транспортын яңыртыу дауам итәсәк. Быйыл бөтә кимәлдәге бюджеттар иҫәбенә 100-әр трамвай һәм троллейбус, шулай уҡ 20 электробус һатып алыу планлаштырыла. 2012 йылда дүрт заманса трамвай һәм биш троллейбус һатып алынған. Элекке транспорт менән сағыштырғанда, яңылары электр энергияһын 40 процентҡа әҙерәк ҡуллана. Был йүнәлештәге эш Өфөлә артабан да дауам иттереләсәк.

**"Башинформ"дан.**

***✓ Барҙың ҡәҙерен белеү тигән ябай ғына ҡағиҙәне һаман да үҙләштерә алмайбыҙ: ошо тиклем сығымдар һалынған ремонттан һуң баш ҡала йорттарында махсус рәүештә дөйөм йорт милкенә зыян килтереүҙең 74 осрағы асыҡланған.***



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ТАҘАРТҠАН ЕРҘӘ ТҮГЕЛ...

## быcратмаған ерҙә таҙа!

**Баш ҡала округы хакимиәтендә үткән сираттағы матбуғат конференцияһынан һуң был һүҙҙәрҙе: "Тәртип талап иткәнгә тиклем, башта уны үҙеңдә булдырырға кәрәк", - тип дауам итке килә. Сөнки нисек кенә гәйепте ситтән эҙләргә тырышһаҡ та, унын, тәү сиратта, үҙебеҙҙә булыуын ҡайһы ваҡытта онотабыҙ, ғәҙеллекте ситтән даулайбыҙ, шикелле. Ни өсөндөр һәр ваҡытта ла ситтән кемдер гәйепле, бары тик үҙебеҙ түгел. Шағир әйтмешләй, аҡыллылар арта барған һайын, мөхәббәттең баһаһы кәмегән кеүек, белемлеләр артҡан һайын, кешелек мәҙәниәте кәмей бара, ахыры. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Владимир Дмитрюк килтергән миҫалдар ҙа ошоно раҫланы.**

Мәҫәлән, былтыр федераль, республика бюджеты һәм милекселәрҙең аҡсаһы иҫәбенә торлаҡ хужалығында 1,2 миллиард һумлыҡ эштәр башҡарылған (анығлап әйткәндә, ҡаланың берҙәм капиталь ремонт фонды аҡсаһы иҫәбенә 334 йортта инженер ҡоралдары алмаштырылған, 185-се Федераль Законға ярашлы, адреслы программа буйынса 49 торлаҡ йорт комплекслы ремонтланған). Шулай уҡ лифттарҙы алмаштырыу һәм модернизациялау адреслы программаһы буйынса күп фатирлы йорттарҙа 64 лифт алмаштырылған. Әммә барҙың ҡәҙерен белеү тигән ябай ғына ҡағиҙәне һаман да үҙләштерә алмайбыҙ: ошо тиклем сығымдар һалынған ремонттан һуң баш ҡала йорттарында махсус рәүештә дөйөм йорт милкенә зыян килтереүҙең 74 осрағы асыҡланған.

Ә бит шунда йәшәүсе милекселәр стеналарҙағы, фасадтарҙағы яҙыуҙарҙы һәм һүрәттәрҙе, лифттарҙағы "шедеврҙар"ҙы, подъездарҙағы яҡтыртыу приборҙарының йолҡоп алыныуын күн һайын күреп йөрөй. Хәҙер күпселек йорттарҙа подъездарға еңел генә үтеп булмай, уларға домофондар ҡуйылған. Тимәк, подъездарҙы бергәү ҙә ситтән килеп бысратып, зыян эшләп йөрөмәй. Улар - ошо йорттарҙа йәшәүсе граждандарҙың һөйөклө, ғәзиз балалары, ейәндәре. Асыҡлай башлағанда, бергәү ҙә үҙенең балаһын гәйепләмәйәсәк, дөрөҫлөктө эҙләмәйәсәк, ул ғына ла түгел, балаһын аҡтан-аҡ, пактан-пак итеп, башҡаларҙы гәйепләп ҡуясаҡ. Беҙҙең тәрбиә системаһы шуға ҡоролған. Ә уйлап ҡараһаң, яңы ғына капиталь ремонт үткән йорттарҙағы ошо зыянды һандарға әйләндергәндә, ул миллион һум самаһы тәшкил итә...

Бында бюджет аҡсаһы ғына түгел, милекселәрҙең дә аҡсаһы ингән икән, тимәк, балаларыбыҙ үҙебеҙҙең кесәне "йоҡарта" түгелме? Сөнки ремонттан һуң дөйөм милек ни тиклем оҙағыраҡ матур килеш тора - шул тиклем сығымдар ҙа ҡыҫҡара. Юҡҡа ғына таҙартҡан урында түгел, быcратмаған урында таҙа, тимәйҙәр. Быны өсөн, әлбиттә, мәҙәни кимәлеңдең юғары булыуы мөһим. Ә һуңғы ваҡытта был төшөнсә бөтөнләй юғала башланы...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*СОБХАНАЛЛА!*

**Өфөбөҙ VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарын ҡаршыларға әҙерләнә икәнен беләһегеҙ. Был ярыштарҙа Башҡортостан спортсылары иң ҙур команданы тәшкил итәсәк, тип тә хәбәр иткәйнек. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Учалы ҡалаһы балаларҙы саңғы спортына йәлеп итеүгә 35 йыл ғүмерен бағышлаған тренер Рәүил ЙӘЗӘРӘЕВ. Ул был уйындарға 7 йәш саңғысыны әҙерләй. Халыҡ-ара ярыштарға әҙерлек тураһында башланған әңгәмәбеҙ, ғөмүмән, Башҡортостанда балалар спортының бөгөнгө хәленә барып ялғанды, тағы ла бер-нисә ҡыҙыҡлы теманы ла үҙ эсенә алды. Әйҙәгеҙ, педагогтың үҙен тыңлайыҡ.**

# УЧАЛЫ БАЛАЛАРЫ ЛА...

## сит ил балалары менән уйнаясаҡ



- Күнекмәләрҙең самаһын һәм тәртибен дөрөҫ ойоштороғанда саңғыла йөрөү һәр кемгә ыңғай тәьҫир итә. Ләкин, 12 йәшкә тиклемге балаларға саманан тыш көсөргәнеш бирергә ярамай - әле тулыһынса көс инеп өлгөрмәгән баланың йөрәк йәки үпкә сирено дусар булыуы бар. Минең саңғы түңәрәгемә йөрөүсе башланғыс синыф уҡыусылары, ғәҙәттә, тәрлө уйындар уйнай, тауҙан шыуа, йәғни еңел күнегеүҙәр менән генә шөғөлләнә. Махсус арауыҡтарға 12-13 йәштәре тулғас, ҡыҙҙәләре бер аҙ нығынғас ҡына йүгертә башлайым. Яҡшы тренер үҙенең тәрбиәләнеүсеһенең үҫешенә булышлыҡ итергә, шул уҡ ваҡытта түҙемле лә булырға тейеш. Мин, мәҫәлән, бер ваҡытта ла һуш китерлек һөҙөмтә талап итмәйем балаларҙан. Хәлдәренән килгәнсе шөғөлләнһәләр, яйлап һөҙөмтәләрен яҡшырта барһалар, минә шул еткән. Дилбегәне бик уҡ йомшартып та ебәрергә ярамай, әлбиттә. Ни тиһәң дә, бала һәр саҡ уйынға ынтыла, тренеры йомшаҡлыҡ күрһәттеме - контроль тигәнде юғалта башлай ул. Балалар араһында тәрлө холоҡлолар осрай, әлбиттә. Уның ҡарауы, балаларҙың спорт менән шөғөлләнеүе уларҙа теүәллекте, маҡсатҡа ынтылыусанлыҡты арттыра.

Өфөлә үтәсәк Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарында йәш регламенты буйынса беҙ әле ҡараған йәштәге балалар, йәғни 12-13 йәшлектәр ҡатнашыуын иҫәпкә алғанда, уйындарҙы бер байрам һымаҡ ҡабул итергә кәрәктер, тип уйлайым. Үҙем дә балаларҙың тәрлө илдәрҙән килгән тиҫтерҙәре менән уйнап, аралашыуын теләйем. Был теләк алға әйҙәгәс, уйындарҙа ҡатнашыу өсөн кәрәк булған тауҙай документтарҙы, формаль кәртәләрҙе үтеүе еңелерәк булғандыр. Әйтелгәнгә өҫтәп, шуны ла билдәләге килә: Уйындарҙа ҡатнашыу өсөн Учалы ҡала хакимиәте яңы саңғылар, ата-әсәләр олимпия чемпиондарыныҡынан бер ҙә кәм булмаған сағыу костюмдар, башлыҡтар, күнегеү өсөн костюмдар һ.б. һатып алып бирмәгән булһа, беҙ, тренерҙәр, үҙебеҙҙең көс менән генә был эште йырып сыға ла алмаҫ инек.

Форсаттан файҙаланып, киң йәмәғәтселек иғтибарын тағы бер мәсьәләгә йүнәлтке килә. Бөгөнгө көндә спорт ҡорамалдары һатып алыу ҡыйбатҡа төшкәнгәме, спортты үҫтереүгә дәүләт ярҙамының аҙыраҡ булыуы арҡаһындамы, донъяны компьютерҙар баҫып барғангамы, йә башҡа сәбәптәнме - ата-әсәләр балаларын спорт түңәрәктәренә һирәк йөрөтә башланы. Спорт менән шөғөлләнеүҙе пропагандалап, үҙебеҙгә мәктәптәргә йөрөргә тура килә. Был эш юғарыраҡ даирәләрҙән дә алып барылһа, яҡшыраҡ булыр ине. Һуңғы йылдарҙа беренсе класҡа килеүселәр араһында артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы балалар күбәйҙе. Үҫкәс, ул балалар нindәй булыр? Мине шул һорау борсой. Балаларҙы ошо проблеманан арындырырға, барыһын да саңғыға баҫтырырға ине. Беҙҙең быуын яҡшы хәтерләйҙер: 1970-1980 йылдарҙа илебеҙҙә спорт бик ҙур аҙымдар менән алға китте. Спорттың иң үҫешкән осоро шул ваҡытҡа тура килде. Туҡһанынсы йылдарҙа торғонлоҡ башланғас, спорт бөтөнләй туҡтап ҡалды. Яңы меңйыллыҡҡа аяҡ баҫҡас ҡына бер аҙ йән керҙе был өлкәгә. Шулай ҙа әле һаман мандып етә алмайбыҙ шикелле. Бәлки, ошондай ярыштарҙы телевизорҙан күрһәтеп, спортты әүҙем пропагандалап хәлде ыңғай яҡҡа үҙгәртеп булыр?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ етәкләгән командала буласаҡ донъя чемпиондары булырҙай балалар ҙа барҙыр, тип ышанабыҙ. Бәлки, улар араһынан бергәү булһа ла саңғы спортын ғүмерлек юлдашы итеп һайлар. Әммә ошо ете баланың барыһы ла бала сағындағы был шөғөлөн ғүмерлек хобби итеп алыр, моғайын. Сөнки бер тапкыр күктәрҙә осоп ҡараған ыласын ерҙән йөрөмәй.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы иң яҡшы ғилми хеҙмәткә конкурс иғлан итте. Бәйгелә республиканың урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарында белем алған студенттар һәм аспиранттар ҡатнаша ала. Конкурс эштәре 2013 йылдың 15 октябренә тиклем ҡабул ителә.

✓Былтыр өфөләләргә дөйөм йорттағы йылылыҡ энергияһын яңынан иҫәпләп сығарып, 297 миллион һум аҡсаны кире ҡайтарҙылар. Был күп фатирлы йорттарҙы һәм социаль өлкә объекттарын энергоресурстар иҫәпләү приборҙары менән йыһазландырыу һәм уларҙың күрһәткестәре нигеҙендә мөмкин булды.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин торлакты түләүһеҙ хосусилаштырыу ваҡытын оҙайтыу тураһындағы мәсьәләне күтәреү кәрәклеген билдәләне. Белеүегеҙсә, фатирҙарҙы дәүләт һәм муниципаль торлаҡ фондынан граждандарҙың хосуси милкенә күсереү быйыл 1 мартта тамамлана ине.

✓Республика ҡала һәм районарында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса йәш сәсәндәр конкурсының беренсе этабына әҙерлек бара. Сара февралдә старт алды. Быйыл бәйге 15-се тапҡыр үткәрелә. Уны ойоштороусылар булып Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм Башҡортостандың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты менән берлектә БР Мәғариф министрлығы сығыш яһай. Беренсе этап ағымдағы йылдың 20 майына тиклем дауам итә. Район (ҡала) этабында еңеү яулаған йәш сәсәндәр июнда үтәсәк республика конкурсында ҡатнаша.

✓Өфөлә 12-15 мартта XXIII "Агрокомплекс" халыҡ-ара махсус күргәҙмәһе үтә. Йыл һайын был сарала Рәсәйҙең тәрлө төбәктәренән, шулай уҡ яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән 200-гә яҡын компания ҡатнаша. "Агрокомплекс" алдынғы технологияларҙы, ғилми эшләнмәләрҙе, алдынғы хужалыҡ итеү алымдарын Рәсәй баҙарына сығарыуға йүнәлтелгән.

✓"Салауат Юлаев" Түбәнге Кама командаһы "Нефтехимик" менән осрашыуҙа ышаныслы еңеүгә өлгәште. Тәүге осор командаларға мәрәй килтермәне. Икенсе осорҙоң тәүге минуттарында юлаевсылар Игорь Мирнов һәм Антон Слыпешев ҡужалар ҡапҡаһына бер-бер артлы ике мәрәй оҙатты. "Нефтехимик"тар иһә Өфө ҡунаҡтарына бер генә шайба менән яуап бирә алды. Шулай итеп, иҫәп 1:2.

*ЙӘШТӘР ҠОРО*

**Рәсәйҙә барған иҡтисади йүнәлештәге үҙгәрештәр йәш кешенән дә иҡтисади яҡтан белемле булыуҙы талап итә. Элегерәк, мәҫәлән, мәктәп уҡыусылары иҡтисади проблемаларҙан ситтә торһа, бөгөн улар аңына ихтыяж һәм уларҙы тормошҡа ашырыуҙа сама белеү, маҡсаттарыңды аңлы рәүештә һайлау, аҡсаның тәғәйенләнешен һәм уны эшләү юлдарын төшөнөү, ғаилә һәм мәктәп бюджетының нимәнән торорға тейешлеге кеүек төшөнсәләр һеңдерелә. Республика иҡтисад лицей-интернаты уҡыусылары Илида ТАЛИПОВА, Гөлшат ШӘРИФУЛЛИНА, Әлфиә СӘЙФУЛЛИНА, Айрат ШАФИҠОВ менән әңгәмәбеҙ ошондай белгестәр әҙерләүсе уҡыу йортонոң үҙе һәм, әлбиттә, иҡтисад тураһында.**

# БАҘАР ИҠТИСАДЫНЫҢ...

## булаcаҡ капитандары тәрбиәләнә бында

**➔ Бөгөн йәмғиәттә иҡтисад өлкәһенә бәйле һөнәр һайлаған, иҡтисади белеме булған кеше яҡшыраҡ йәшәй, тигән фекер нығынған. Шул уҡ ваҡытта, хеҙмәт баҙарында иҡтисадсылар күп талап ителмәй, тигән мәғлүмәт тә бар. Һеҙ ниндәй маҡсат менән был уҡыу йортон һайланығыҙ?**

**Әлфиә:** Бөгөн йәмғиәттәге һәр эш барыбер ҙә иҡтисадҡа бәйле, тимәк, кеше иҡтисади яҡтан белемле булырға ынтылырға тейеш, шунһыҙ йәшәүе күпкә ауырға төшәсәк. Республика иҡтисад лицей-интернаты хыялдарыма өлгәшеү өсөн бер баҫҡыс булып тора. Икенсенән, иҡтисад дәүләттең мөһим структураһы булараҡ, илде тик белемле иҡтисадсылар ғына күтәрә аласаҡ. Киләсәктә ғүмеремде иҡтисадсы һөнәре менән бәйләргә уйлаһам да, иң тәүҙә техник вузға барырға уйлайым, сөнки башта информатика, физика өлкәһен һәйбәтләп өйрәнергә теләйем.

**Илида:** Бөгөн Рәсәй донъя иҡтисадына яңы аяҡ ҡына баҫа әле. Тимәк, хәҙер илгә иҡтисадсылар күберәк кәрәк буласаҡ, эш урындары ла күбәйәсәк. Башҡортостаным да был үҙгәрештәрҙән ситтә ҡалмаясаҡ. Һәр хәлдә, иҡтисад йүнәлешендә белем алыу бөгөн бик актуаль, тип уйлайым.

**Айрат:** Бөгөн иҡтисадсы һөнәре һәр ойошмала талап ителә, шуға эш табыуы ауыр булмаясаҡ, бары тик үҙеңде төрлө яҡлап үҫтерергә һәм яҡшы белгес булырға кәрәк. Иҡтисад ул үҙеңдең шәхси тормошоңда ла кәрәк, тип уйлайым. Аҡса етмәй, тип зарланған күп кенә ғаиләләрҙең төп бәләһе - аҡсаны дөрөҫ сарыф итмәүҙә бит, ә иҡтисад фәне быларҙың барыһына ла өйрәтә.

**Гөлшат:** Беҙҙең лицейҙан иҡтисадсылар ғына түгел, табиптар ҙа, уҡытыусылар ҙа, инженерҙар ҙа сыға. Йәғни, лицейҙың төп маҡсаты иҡтисадсылар әҙерләү генә түгел. Математика-физика профиле лә бик көслө. Информатика, башҡорт, рус телдәре буйынса яҡшы белем бирелә.

Төрлө уҡыу йорттарында белем алып йөрөгән сығарылыш уҡыусыларына ҡарайһың да, үҙеңде сикләргә ярамағанлығын күрәһең.

**➔ Иҡтисади белем алған кеше нисек аҡса эшләргә, нисек етеш йәшәргә, тигән ҡағиҙәләрҙе лә өйрәнә бит инде. Һеҙҙе лә был белемдең ошо яғы ҡыҙыҡһындырамы?**

**Айрат:** Беҙҙең халҡыбыҙҙа артыҡ байлыҡҡа ынтылыу юҡ. Шундай шәп кешеләр бар, әлбиттә, улар күп аҡса эшләй, әммә уларҙа күңел тыныслығы юҡ. Байлығымды урлап ҡуймаһындар, тип булһа ла борсолоп йөрөй ундайҙар. Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын, тип бушҡа әйтмәйҙәрҙер инде. Урта хәлле булһаң, шул иң яҡшыһы.

**Әлфиә:** Беҙҙе уратып алған бөтөн матди һәм рухи ҡиммәттәр күп кешеләрҙең хеҙмәте ярҙамында барлыҡҡа килтерелгән, бының өсөн күп көс һалынған һәм был әйберҙәр кешегә яҡшылыҡ, файҙа килтерергә тейеш. Бала бәләкәйҙән ошоно аңларға, һаҡсыл булырға, башҡаларҙың хеҙмәтен ихтирам итергә бурыслы.

**Гөлшат:** Ысынлап та, байлыҡ аҡса менән генә үлсәнмәй. Ғаиләңә етеш тормош тәьмин итә алһаң, шул да етә, бөтәһенә лә мотлаҡ бизнес менән шөғөлләнергә түгел дә инде. Кешене аҡса табырға өйрәтеп, бәлки, булалыр, әммә бының өсөн уның үҙенең маҡсаты булырға тейеш.

**Илида:** Иҡтисади белем тормошта күп нәмәне аңларға ярҙам итә, мәҫәлән, шул уҡ сәйәсәтте лә.

**➔ Бөгөнгө замандың социаль-иҡтисади хәле балаларҙың әхлаҡи, рухи үсешенә бөтөнләй урын ҡалдырмай кеүек. Бала саҡтан уҡ бизнес менән шөғөлләнеү, күп аҡса табыу, иректе булыу теләге менән генә янған, үҙен генә ҡайғыртҡан кешеләр күбәйеү һөҙөмтәһендә йәмғиәтебеҙ рухи торғонлоҡҡа килеп терәлмәҫме икән?**

**Илида:** Бар йәштәр ҙә ундай түгел, Аллаға шөкөр. Иҡтисад лицейы тигәс тә, беҙ гел генә иҡтисад фәнен уҡып ултырмайбыҙ. Шәхсән миңә был лицейға уҡырға килгәс, күп юлдар асылды. Халҡымдың, республикамдың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнергә бәләкәйҙән хыяллана инем, быны тормошҡа ашырыу өсөн мөмкинлектәрем күбәйҙе. Уҡытыусылар, тәрбиәселәр беҙҙе һәр яҡлап тәрбиәләй. Әйткәндәй, Өфөгә килеп уҡый башлағас, рухым күтәрелде, тип иҫәпләйем. Башҡорт театрҙарына, концерттарға йөрөү шул тиклем ҡанатландыра, күңелде байыта. Лицейҙың "Йәшлек" бейеү ансамблендә бейейбеҙ, конкурстарҙа ҡатнашабыҙ, үҙебеҙ хәйриә концерттары ла ойошторабыҙ.

(Дауамы 6-сы биттә).



*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ҮҘ-ҮҘЕМӘ БИРЕЛГӘН ҺОРАУҘАР

-Ә ни өсөн Рәсәй шул тиклем дәрәжәлә артта ҡалған?

-Ул артта ҡалмаған, ул бик көслө ил...

- Ул нимәһе менән көслө?

-Ул үҙенең мөмкинлектәре һәм бер ваҡытта ла бер нимәгә лә бирешмәҫ халҡы менән ҡеүәтле.

-Улай булғас, ниңә ул мөмкинлектәр бай һәм етеш йәшәү өсөн файҙаланылмай?

- Файҙаланылмаясаҡ та. Рәсәйҙең менталитеты икенсе. Ул һәр ваҡыт шулай йәшәйәсәк, бик үк алға ла китмәйәсәк, бөлөп тә төшмәйәсәк.

- Ә шулай ҙа Рәсәйгә икенсе төрлө, мөмкинлектәренә ярашлы йәшәү өсөн ни эшләргә кәрәк?

- Рәсәйҙә бик матур закондар, указдар, ҡарарҙар ҡабул ителә, әммә улар ғәмәлгә ашырылмай, уларҙың ғәмәлгә ашырылыуы контролдә тотолмай. Улар үтәлмәгән өсөн бәрәү ҙә яуапҡа тарттырылмай, хөкөм ителмәй.

Бына, мәҫәлән, Хоҙай Тәғәлә Ҡөрьән-Кәрим аша кешегә йәшәү ҡанундары төшөргән. Кем уны үтәмәй, ул, әлбиттә, бер көн килеп үҙ язаһын ала. Шуны аңлағандар, ысынлап та, Хоҙай язаһынан ҡурҡа һәм Ул төшөргәндәрҙе үтәргә тырыша. Ә Рәсәйҙә етәкселәр ҡабул иткән ҡарарҙарҙы, закон сығарыусылар сығарған закон, указдарҙы үтәмәгән өсөн бер яза ла юҡ. Шуға улар үтәлмәй ҙә... Был хәлдә үҙгәртеү өсөн, моғайын, яңынан тыуыу, яңы менталитетҡа эйә булыу кәрәктер Рәсәй кешеһенә. Белмәйем...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Радикулит яфалаһа

❖ Бер йомортҡа ағын һәм 1 ҡалаҡ скипидарҙы ярты литрлы банкаға һалып болғатырға. Шуға таҙа сепрәкте манып, әҙ генә һығып, билгә бәйләп, полиэтилен менән ябып, өҫтөнән йылы шарф бәйләп ҡуйырға. Түҙә алғансы тоторға һәм аҙаҡтан билде йылы һыу менән йыуырға, киптерергә һәм йылы шарф йәки шәл менән бәйләргә. Был дауаны төнгөлөккә эшләү уңайлы.

### Киҙеү

**Әле киҙеү таралған мәл. Нимә эшләргә һуң?**

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы 1 баш һуғанды ярты литр һөттә 5 минут самаһы бешерергә, ярты сәғәт төнәтергә. Шуның яртыһын иртәнсәк, яртыһын кис эсергә.

❖ Әгәр тамаҡ ауыртып, танау тонһа, юл япрағын һуған йәки һарымһаҡ менән бергә ҡайнатып, 6-7 минут быуын һуларға.

❖ Көнөнә бер нисә тапҡыр кесерткән һәм һыу ҡушылған прополис төнәтмәһен ҡуланырға була.

❖ Бер бүлем һарымһаҡты 2 ҡалаҡ ҡайнар һыуҙа 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Шул шыйыҡсаны танау тишегенә тамыҙырға.

❖ Әгәр өйҙә бер ниндәй ҙә үлән булмаһа, 2 таблетка валидолды ингаляция яһай торған ҡайнар һыуға һалып, һыуыҡ тейеүҙән дауаланырға була.

### Дегәнәк бик файҙалы

❖ Тимерәү (экзема тиҙәр) һәм бешкән урынға уның майын яһап һөртөү яҡшы. 1 ҡалаҡ ваҡланған дегәнәк тамырын 1 стакан ҡайнар һыуҙа, һыулы һауытҡа ултыртып, ҡуйырғансы ҡайнатырға. Шунан һуң 1 өлөш ҡатнашмаға 4 өлөш һары май ҡушырға һәм әҙер майҙы быяла һауытҡа һалып, һыуыҡ урында һаҡларға.

❖ Дегәнәк тамыры төнәтмәһе биткә бетсәләр сыҡҡанда һөртөү, ауыҙ эсе боҙолғанда сайҡатыу өсөн файҙалы.

❖ Ярты стакан араҡыға 1 ҡалаҡ ваҡланған дегәнәк тамырын һалып, 1 аҙна төнәтергә. Шуның менән тән тиреһен иртә һәм кис ай буйына таҙартырға (һыу урынына).

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Егерме бишенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Ҡунаҡсыллыҡ йолалары. Диндәр һәм дини йолалар ингәнгә тиклем үк һәр халыҡтың үҙенең традицияһы булған. Бөгөн иһә дини йолалар һәм электән килгәндәре бер-берегенә тулыландыра, байыта. Шуға ла һәр халыҡ дини йолаларға бәйләп, үҙ йолаһын өйрәнергә тейеш. Ҡунаҡсыллыҡҡа килгәндә иһә, ул - башҡорт халҡының төп милли сифаттарының береһе. Ул хаҡта төрлө риүәйәттәр ҙә сығарылған. Башҡорт өлөшөнә бер байрам да ҡалмаған, һинең байрамың - ҡунаҡ килгән көн булһын, тип әйткән Аллаһы Тәғәлә, тип һөйләгән риүәйәт тә бар. Ысынлап та, ҡунаҡ килер булһа, өй-йортто йыйыштырып, матур кейемдәр кейеп ҡаршылау, тәм-том бешереп әҙерләнеү һәм башҡа күренештәр ысын байрам төҫө ала. Башҡорт халҡ мәҡәлдәре аша ҡунаҡ булыу, ҡунаҡ һыйлау тәртибен дә белергә мөмкин: Аштың бәрәкәте ҡунаҡ менән. Ҡунаҡ килде - өй шатлыҡ менән тулды. Бәхетлелең ҡунағы бергә. Башҡа мәҡәлдәрҙе үҙегеҙ дауам итегеҙ.

## Егерме бишенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Дин һәм әхлаҡ. Кешелек донъяһы бар булғандан алып камиллашыуға табан ынтылған һәм ынтыла. Әммә ни өсөн һун яуызлыҡ бар, ни өсөн насар холоҡло кешеләр була? Ни өсөн хатта урамдарҙа яҙып элеп ҡуйылған ҡағиҙәләргә лә буйһонмайбыҙ? Әйтәйек, урамға бысраҡ ташлама. Тәмәке тартма - ул үлемендә яҡынайта. Наркотик - ул ғазаплы үлем. Кеҫә телефоны уйындары - бармаҡ биҙҙәренә зыян. Һәм башҡа шундай тыйыуҙар, аңлатыуҙар бихисап. Әммә кешеләр хатта уҙҙәренә зыян булырлыҡ тыйыуҙарға ла ҡолаҡ һалмай. "Урал батыр" эпосында Урал батыр яуызлыҡ билдәһе булған Шүлгәнде үлтермәй. Тимәк, кешелек донъяһында үҙ теләге менән яман юлға баҫыусылар, тура юлдан тайпылыусылар, тәүҙән үк еңел юл һайлаусылар һәм шуға күнегеп китеү арҡаһында юлдан тайпылыусылар, аҙаҡ үкенеп-ялбарып та яҡшы юлға сыға алмай мәташыусылар бар. Уларҙы яңынан үҙгәртеүе ҡыйын. Донъя диндәре лә кешеләрҙе тура юлдан барырға, ҡыйыҡ яҡҡа тайпылмаҫҡа өйрәтә. Төрлө риүәйәттәр аша ла, бәйғәмбәрҙәр өлгөһөндә лә, һәр төрлө ҡанундар аша ла яҡшылыҡҡа өндәй, кеше булып йәшәүҙең баһаһын аңлатырға тырыша.

## Егерме бишенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Әҙәплелек өлгөләре. Үрҙәге мәҡәләләрҙә әйтеп үтеүебеҙсә, һәр халыҡ үҙ йолалары, тәртибе, тәрбиә ҡанундары аша әҙәп ҡағиҙәләре өйрәтергә тырышҡан. Айырым мәктәптәр, махсус ҡағиҙәләр булдырған. Шәхси өлгө - иң ышаныслы тәрбиәсе. Шәхси өлгөнөң баһаһы төшһә, абруй юғала. Әйтеп киткәйнек, Ғайса бәйғәмбәр, Мөхәммәт бәйғәмбәр, Будда - улар үҙҙәре оло өлгө. Ә башҡорттоң Урал батыры: "Халҡым, һеҙгә шуны әйтәм, уландарым, һеҙгә әйтәм", - тип, халыҡҡа мөрәжәғәт иткән саҡта, бер юлы уландарына ла өндәшә. Аҡыл - ул иң элек үҙ аҡылыңды үҙең тотоу. Балаңа тәмәке тартыуҙың зыянын һөйләгән саҡта, ауыҙыңдан борҡолдап тәмәке төтөнө еҫе сығып торһа, балаң ни әйтер? Башҡаларға туған тел ҡәҙере тураһында һөйләгәндә, үҙ балаң менән сит-ят телдә аралашһаң, башҡалар ни әйтер?

Уҡыусы әҙәптең тышҡы әҙәпкә һәм эске әҙәпкә бүленеүен дә белһен. Тышҡы әҙәпте ҡағиҙәләр, ҡанундар, талаптар, тыйыуҙар һәм үҙ өлгөң аша тәрбиәләп була. Эске әҙәп һинең тыуғандан уҡ ҡаныңа һалынған ғәҙәттәреңдән хасил була. Тышҡы әҙәплек кейенә белеү, кеше араһында үҙеңде тотоу, һөйләшеү-аралашыу һәм башҡа шундай ҡағиҙәләрҙе белеү.

Эске әҙәп күҙгә ташланып бармай, әммә Кеше булып йәшәү өсөн иң мөһим шарттарҙың береһе.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

ЙӘШТӘР ҠОРО

# БАҘАР ИҠТИСАДЫНЫҢ...

## буласаҡ капитандары тәрбиәләнә бында

(Башы 5-се биттә).

**Әлфиә:** Төрлө саралар тәрбиә маҡсатынан ғына түгел, ә рухты үҫтереүгә лә йүнәлтелә. Башҡорт телен тәрәнерәк өйрәнәбеҙ. Башҡорт теле дәрестәре һаны ҡыҫҡарғайны, уның беҙҙең өсөн ни тиклем ҡәҙерле булғанын, тәүге тормош һабаҡтарын башҡорт теле, әҙәбиәте аша алабыҙ икәнен аңланыҡ. Хәҙер күмәкләп башҡорт теле түңәрәгенә йөрөйбөҙ.

**Айрат:** "Илһам" түңәрәгендә ғилми эштәр яҙабыҙ, ижад менән шөғөлләнәбеҙ. Ғөмүмән, лицейҙа үҙенсәлекле генә башҡорт мөхите бар, тип әйтер инем. Кисәләр, билдәле шәхестәребеҙ менән осрашыуҙар үткәрәбеҙ, яҙыусылар ижадын өйрәнәбеҙ. Февраль, ғәҙәттәгесә, Рәми Ғарипов шиғриәтенә бағышлана, әлеге мәлдә викторина һорауҙарына яуап бирергә әҙерләнәбеҙ. Егеттәр өсөн спорт йүнәлешендәге түңәрәктәр ҙә байтаҡ ҡына, теләһәң, милли көрәш, ушу, дзю-до менән шөғөлләнергә була.

**Гөлшат:** Үҙеңде үҫтереү, камиллаштырыу, оло тормошҡа әҙерләү өсөн башҡа түңәрәктәр ҙә бар. Мәҫәлән, ЮНЕСКО клубын айырып әйтергә булыр ине. Йыл һайын башҡа уҡыу йорттары уҡыусылары менән Екатеринбургҡа стажировкаға барабыҙ, әле Бүрәт республикаһына этнофестивалгә йыйынабыҙ. Ғөмүмән, беҙҙең лицейҙа ла, Өфөләге башҡа башҡорт гимназия, лицейҙарында ла рухи көрсөк янамайҙыр балаларға, тип ышанам.

**➔ Бөтәгеҙ ҙә лицейға ауылдан килгәнһегеҙ, үҙегеҙҙең ауылығыҙҙың бөгөнгө иҡтисади торошон аңлата алаһығыҙмы? Ауылдарҙы нисек күтәрергә мөмкин булыр ине?**

**Айрат:** Мин Дыуан районының Дыуан-Мәсетле ауылынан. Ауылымдың хәлен күрә-белә йөрөйөм һәм шундай һығымтаға киләм: ауылдағы халыҡ күмәкләшеп эшләп өйрәнгән, шуға ла элекке кеүек күмәк хужалыҡтар ойоштороу яҡшы булыр ине. Быны иҡтисад, ауыл хужалағы белгестәре лә таный. Бәләкәй булһам да, атайымдың колхозда эшләгән осорон хәтерләйем, ул саҡта кешеләр күңеллерәк йәшәй кеүек ине. Сөнки атабабалар ғүмере буйына ер эшкәртеү, мал үрсетеү менән шөғөлләнгән һәм был эштәр менән булышыу башҡортҡа артыҡ байлыҡ килтермәһә лә, оло ҡәнәғәтлек килтерә. Бөгөн малсылыҡ фермаһының емерелеп, хужаһыҙ ултырыуына ҡарап йән әрней. Ауыл советы, мәктәп, дауахананан тыш, эшләр урын да юҡ. Кешеләр ҡала тирәһенә китә башланы, бушап ҡалған өйҙәр күбәйә. Урам буйында эшһеҙ йөрөгән 40-50 йәшлек ағайҙар ҙа етерлек, ғаиләләре Свердловск өлкәһенә сығып эшләп ҡайта. Быны ана шул фермаларҙы йә башҡа күмәк хужалыҡты тергеҙеп кенә туҡтатып булалыр. Ә шулай ҙа бер ниндәй көрсөккә ҡарамай, фермер булып эшләп йөрөүселәр ҙә эшһеҙлектән аптырағандарға өлгөләр, тим. Улар бит кредитҡа булһа ла йылҡы, һыйыр, кәзә алып аҫырайҙар, һалымынан да ҡурҡып тормайҙар.

**Әлфиә:** Бөгөн ауыл халҡы мал тотоп, ит, һөт етештереп йәшәй икән, тимәк, ауыл ерҙәрендә ошондай ризыҡтарҙы эшкәртеүсе, төрөүсе, һатыусы бәләкәй предприятиелар асыу бик ҡулай булыр ине, кеше эшһеҙ ятмаҫ ине. Мин Хәйбулла районының Һаҡмар Назарғол ауылынан, беҙҙә 500-ләп умарта тотоп, хужалыҡында мал үрсетеүселәр бар. Шуны ла әйтергә теләйем: хәҙерге көндә студент булған дуҫтарымдың күбеһе, уҡып бөткәс, ауылға ҡайтырға теләй, сөнки унда үҙеңдең бизнесыңды асып ебәреү өсөн бөтөн мөмкинлектәр бар. Мәҫәлән, иген баҫыуҙарын тергеҙеү, мал тотоу, туризм буйынса эшләү мөмкин булыр ине. Әлегә ауылыбыҙҙың туризмдағы өлөшө йәй көнө йылға буйлап ағып төшөүселәргә һөт, ҡаймаҡ һатыуға ғына ҡайтып ҡала, ҡыҙғаныҫҡа күрә. Мин дә бик теләп ауылға ҡайтыр инем, уны беҙ күтәрмәһәк, киләсәктә ауылдарҙың юҡҡа сығыуы ихтимал.

**Гөлшат:** Бөгөн ауыл яҙмыш ҡосағына ташланған, кем нисек йәшәй ала, шулай йәшәй кеүек тойола миңә. Шулай ҙа, насар йәшәйҙәр, тип әйтмәҫ инем, һәр икенсе йортҡа һыу ингән, газ үткәрелгән. Ирҙәр, әлбиттә, күберәк ситкә китеп эшләй. Тағы бер ҡыҙыҡ күренешкә иғтибар итмәйенсә булмай. Халыҡ шәхси эшҡыуарҙарға яллanып эшләп бармай, ундайҙарҙы әллә ни ихтирам да итмәй, нишләп мин уны байытып йөрөйөм, тип кенә ебәрә. Мәҫәлән, минең ауылымда һөтсөләк фермаһын тергеҙеп эшләп йөрөгән эшҡыуарҙың һыйырҙары, ҡарарға кеше булмағанлыҡтан, ҡырылып бөтөп бара. Уға эшкә ялланмайҙар, сөнки ул ваҡытында эш хаҡы түләй алмай, түләр ине, ауыл хужалығы тиҙ генә килем килтерә торған тармаҡ түгел. Ә бит кешегә бөгөн, хәҙер кәрәк.

**Илида:** Нисек кенә булмаһын, беҙ бөтәбеҙ ҙә ҡалала йәшәй алмайбыҙ. Ә иҡтисади яҡтан ҡараһаң, ҡалаға дәүләт тарафынан иғтибар күберәк икәнен һиҙәһең. Шуға ла ауылдың киләсәге өсөн ауыл кешеһе яуаплы булып сыға. Минең тыуған ягым Әлшәйҙә лә кешеләр шәхси хужалығы менән көн күрә, олораҡ инәйҙәр балаҫ һуға. Башҡорт халҡы тырыш та ул, тик беренсе тапҡырҙан ниәтенә өлгәшә алмаһа, өмөтөн юғалтып, башлаған эшенә ҡул һелтәй ҙә ҡуя. Баҙар иҡтисады заманында нығыш булырға кәрәк, бер ҡолайһын икән, ҡабат-ҡабат аяҡҡа баҫырға кәрәк.

**Айрат:** Аҙыҡ-түлек ауылдарҙа етештерелә, ә етештереү предприятиелары ҡалаларҙа урынлашҡан. Шуға ла етештереү предприятиеларын ауылдарға күсереүҙе әүҙемләштереү кәрәк. Ул саҡта йәштәр ҙә ауылдарға ҡайтыр, ауылдар үҫер, тарҡалмаҫ, мәктәптәр ҙә ябылмаҫ ине.

**➔ Бөгөн кредит заманында йәшәйбеҙ. Буласаҡ иҡтисадсы булараҡ, кредит мөнәсәбәттәренә ҡарашығыҙ нисек?**

**Илида:** Нимәләр алыр өсөн аҡсаны йылдар буйына йыйыуға ҡарағанда, кредит алыу яҡшы ине. Был осраҡта һатып алған әйбер менән шунда уҡ ҡуллана башлайһың. Ә шулай ҙа уның менән артыҡ мауыҡмаҫҡа кәрәк. Ни тиһәң дә, ауыр йөк булып ята бит иңеңә кредит түләүе. Уны күтәрә алаһыңмы, юҡмы - шуны ҡат-ҡат үлсәү фарыз.

**Әлфиә:** Кредитты дөрөҫ ҡулланыу ғына түгел, уның процентларын дөрөҫ һанап сығара белеү ҙә кәрәк - был беҙ бая ғы алдан һөйләшкән иҡтисади тәрбиә алыуҙың бер ыңғай яғы. Былтыр лицейға иҡтисадсылар килеп, аҡсаны нисек ҡулланырға, кредит үҙенсәлектәре тураһында һөйләнеләр. Хәҙер беҙ ҙә һанай һәм кредиттың файҙалымы, түгелме икәнен аныҡлай беләбеҙ.

**Айрат:** Кредитты алғас, түләй ҙә белергә кәрәк. "Инереңдән алда сығырыңды уйла" тигән әйтемдәгесә килеп сыға инде бында. Шулай ҙа үҙеңә ышанып алғас, аҡсаһын табырға тура килә. Үҙеңә күрә, мотивация кеүек була инде был.

**➔ Лицейҙың тағы бер үҙенсәлеге - егеттәр менән ҡыҙҙарҙың айырым уҡыуы. Уҡыусылар өсөн бының ыңғай яғы нимәлә?**

**Әлфиә:** Минең өсөн был яҡшы, көсөндө уҡыуға күберәк һалаһың. Мәктәп йылдарында малайҙар менән ҡыҙҙар араһында дуҫлашып йөрөү, мөхәббәт кеүек тойғолар уяна бит инде, ә айырым уҡығас, иғтибар бүлгеләнмәй.

**Гөлшат:** Айырым уҡыһаҡ та, атаҡтарыбыҙ ҙа айырым булһа ла, үҙ-ара ярышып йәшәйбеҙ. Мәҫәлән, кемдең "бишле" билдәһе күберәк, тип ярышабыҙ. Үҙ-ара дуҫбыҙ, төрлө сараларға бергәләп әҙерләнәбеҙ.

**Айрат:** Айырым уҡыуҙың ыңғай яғы ла, кире яғы ла бар. Ыңғай яғы шунда: уҡыуы еңелерәк. Ҡыҙҙар менән бергә уҡыһаң, уларға иғтибар итә башлайһың, уларға оҡшарға тырышаһың. Ҡыҙҙар тормоштоң йәме инде ул. Ә малайҙар ҡырыҫыраҡ. Шулай ҙа уҡыуға яҡшы тәьҫир иткәс, айырым уҡыуҙың бәләкәй генә кире яҡтарына артыҡ иғтибар бирмәйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Иҡтисад теорияһын өйрәнеү өсөн артыҡ һәләт кәрәкмәй. Әммә яҡшы иҡтисадсы ниндәйҙер кимәлдә математик та, тарихсы ла, фәйләсүф тә, дәүләт эшмәкәре лә булырға тейеш", - тигән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәйек тә, әле IX-XI кластарҙа ғына белем алыуҙарына ҡарамаҫтан, өлкәндәрсә уйлана белгән әңгәмәсеәләребеҙгә яҡшы белгес булыуҙарын, улар белем алған уҡыу йортона тағы ошондай шәп уҡыусылар теләйек. Нимә генә тимә, белем усағының данын уның уҡыусылары арттыра, шулай булмаһа, Республика иҡтисад лицей-интернаты бөгөн Рәсәйҙең иң яҡшы мәктәптәре рәтендә тормаҫ ине, моғайын.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

✓ Ырыу юлы боронғо саҡта аралашыу, алыш-биреш маҡсатын үтәгән булһа, Рәсәй империяһының экспансияһы башланғас, ихтилал ойоштороу, ғәскәр күсереү, һәр төрлө сығыштарға ярҙамға барыу кеүек ғәмәлдәрҙә ҡулланыла.



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ШӘРЕҠТӘН - ҒӘРЕБКӘСӘ,

## йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы



### Ырыу юлы

Ырыу юлы - төбәгебеҙ тарихы, төбәгебеҙ атамаһы. Ырыу юлының башланғысы һәр Көнсығыш Табын ырыуының йәшәгән еренән башланһа ла, нигеҙҙә, ул Урал армыттары араһында бергә барып ҡушыла. Ырыу юлы - бик боронғо юл. Уның йәшен Шәреҡ юлы менән генә сағыштырып булалыр. Сөнки ул юл Табын, Ҡатай, Әйле, Иберле ырыуҙарының Уралдың көнбайышындағы Кесе Табын, Кәлсер, Ҡумырыҡ, Йомран һәм башҡа табындарҙан тыш, Ҡатай, Тамъян, Мең, Юрматы ырыуҙарынан Болғарға ла барған юлы иҫәпләнгән. Әйтергә кәрәк, Ырыу юлы беҙ йәшәгән төбәктән тик ике йүнәлештә була. Бер йүнәлеш - ғәреб (көнбайыш), икенсеһе - йәнүб, ҡибла (көньяҡ). Табындарҙан ҡиблаға - Тамъянға, Бөрйәнгә, Түңгәүер-Ҡыпсаҡ ырыуҙарына барған юлдар, нигеҙҙә, бөгөнгө беҙ йөрөгән юлдар. Йә көнсығыш Урал армыттары Көркәк - Өрпәк - Ҡырҡты - Ирәндек буйлап, йә Уралтау аша төшөп, Ҡыраҡа һәм Баштау араһы, Ағиҙел туғайҙары буйлап йөрөгәндәр.

Барын-табындарҙан көнбайыш башҡорт табындары еренә сығыу юлы Уй йылғаһын һәм Уйташ тауҙарын унда ҡалдырып, Йәнбикә яланы, боронғо баҡыр иретеү төбәге Кинйәкәй, Манғош, Өшөгән тауҙарының көнсығышы менән хәҙерге Әпсәләм, Тәтембәт аша Буранғолға йүнәлеп, Яйыҡ кисеүенә төшә. Икенсе айырмаһы ике Ирәндек уртаһы, Аратау алды Ҡуҙабил менән килгән юл да шул кисеүгә тоташа. Яйыҡты кисеп, һулаҡайға Серәкәй тауы алды менән Барал, Кәрәге, Бирсә йылғалары башы менән Уралтау аша Әүәләк итәгенә, Ағиҙел башына сыға. Әүәләк алды Ағиҙелдең һул яры менән хәҙерге Байнаҡал тирәһендә йыйылып булғандар. Сөнки тиләүҙәр, уртаға ултырған ҡара табындар ҙа шул тирәгәрә килгән. Әгәр шарт буйынса осрашыу билдәләнмәгән осраҡта, төп осрашыу урыны Баҡты армытындағы Таш ҡапҡа алдында була. Был осраҡта ҡара табындар, тиләүҙәр өсөн Ирәмәл, Әүәләк һырты уң ҡулда ҡалған. Юл хәҙерге Ҡолош ауылы тарлауығы аша Урал һыртын артылып, Һары бейәгә, унан Ағиҙелгә, хәҙерге Мәхмүт ауылы тирәһенән Әүнәр йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған тирәһенән үткән. Билдәле, ул осорҙарҙа Ҡолош та, Мәхмүт тә булмай. Тиләүҙәр Тирлән аша Ҡолмарҙаҡ һыртына ла сыҡҡан. Һәр шартлы туҡталыш, йә көткән урында Билдә таш тигән йә ҡаялыҡ, йә берәй үҫерҙә таш, ҡаясыҡ, йәҙйәшәр ҡарағас булып, шунда шартлы билдәләр ҡалдырып йөрөгәндәр.

Хафизов Алмас тигән ҡәрҙәшебеҙҙең әйтеүе буйынса, ул ер Таш ҡапҡа алдында, ә йәҙйәшәр ҡарағас Ҡолмарҙаҡ алдындағы бер яланда була. Был турала минә 1979 йыл тирәһендә Мәхмүт ауылы аҡһаҡалы Вәлиулла бабай ҙа һөйләгәйне. Ул ҡарағасты "Оморҙаҡ ҡарағасы" тип йөрөткәндәр. Байнаҡал ауылы тирәһендә йыйылғандары хәҙерге юл менән Әүәләк аша үтеп, Оло һәм Бәләкәй Ирәмәл аша төшкән. Һулға Бәкте (Баҡты) һыртының көнсығышынан барғанда, Таш ҡапҡа янында туҡталған. Таш ҡапҡа аша үтһәң, Йүрүҙән йылғаһына төртөләһең. Ул саҡта Йүрүҙәндең баш алған еренә урләргә кәрәк булған. Был осраҡта юл Бәкте, Ҡолмарҙаҡ армыты менән Башы аҡ-Машаҡ тауы араһынан дауам иткән. Таш ҡапҡа аша сыҡмағандар Ҡолмарҙаҡ буйлап Оморҙаҡ ҡарағасына килгән.

Артабан юл Оло һәм Бәләкәй Ямантауҙы унда ҡалдырып, Бәләкәй Инйәр үҙәне аша хәҙерге Айғыр тигән ерҙән Ҡараташ һыртын үтеп, Һалды тауына артылған. Тау Ҡатай, Урман Ҡатай тораҡтарына хәжәтләләргә, Башы аҡ-Машаҡ, Нары, Лағош тауҙарын үтеп, Елмәрҙәк армыты һыртын үтергә тура килгән. Ә Кесе Табын туғандарына барғандар, Һалды һыртын үткәс, Оло Инйәрҙе кисеп, Елмәрҙәк тауының билдәше аша Еҙем йылғаһының үҙәненә төшкән. Унда - Әүҙерҙәк, алда - Бужан ҡыры. Был ерҙәр Кесе Табын ырыуының ерҙәре була.

Ырыу юлы боронғо саҡта аралашыу, алыш-биреш маҡсатын үтәгән булһа, Рәсәй империяһының экспансияһы башланғас, ихтилал ойоштороу, ғәскәр күсереү, һәр төрлө сығыштарға ярҙамға барыу кеүек ғәмәлдәрҙә ҡулланыла. Йөктәр артмау менән ат арҡаһында ташыла. Бөпәнә абыҙ Төрөпбирҙин, Төлкөсура батыр Өфө, Табын ҡәлғәләре тирәһендәге яуҙарҙа булыуына нәҡ тә шул юлдар шаһит. Карателдәр ул юлды белмәгән. Әммә уларҙы көнсығыш менән көнбайыш башҡорттарының бәйләнеше аптырауға һала. Сөнки Өрәнге, Лөгөш, Шуйҙа, Юҡалы, Ҡатау, Эҫем (Сим) үҙәндәре аша Өфө юлына 1730 йылдарҙа ғына улар төплө хужа булып ала. Ырыу юлын белгәс тә, уға тәрлө ҡорғо ҡуйып маташалар. Тик уңышһыҙ. Һәр урыҫ ҡорғоһо ҡыйратылыуға дусар була. Ә аралашыу туҡтамай. Шуға ла ырыу юлына урыҫ властары "Воровская дорога" тигән исем таға. Беҙҙең тирәләге Поляковка, Вознесенка (Кинйәкәй), Кирәбе (Кәрәге) ауылдарындағы оло урыҫ кешеләре ул юлды һаман да "Воровская дорога" ти. Ә ул - Ырыу юлы. Был баҫҡынсы урыҫтың беҙҙе көмһетергә, мыҫҡыллырға маташыуының йәнә бер билдәһе.

### Һуғыш юлы

Рәсәй империяһы үҙ ерҙәрен киңәйтеү сәйәсәтен бөйөмға ашырыу өсөн көнбайышта, көньяҡ-көнбайышта, төньяҡ-көнбайышта ҙур һуғыштар алып бара. Быға миҫал булып, Төньяҡ һуғышы, Пруссия, Австрия, Ҡырым ханлығы, Төркиә менән һәм башҡа бик күп яуҙар тора. Беҙҙең Башҡортостан тарихсылары Рәсәйҙең һәр баҫҡынсы һуғышында башҡорт атлы алайҙарының ҡатнашыуы тураһында лаф ора. Ә кәрәкме һуң Башҡорт иленә Рәсәйҙең Австро-Венгрия менән һуғышы? Ғаиләһен ҡалдырып, ат арҡаһында Карпат, Альп артына һуғышып барып етеү, әлбиттә, ҙур батырлыҡ. Ә кәрәк булғанмы ул һуғыш башҡорт өсөн? Кемде һаҡлаған ул? Башҡортостандымы, Рәсәйҙеме? Бер ниндәй швед, венгр, төрөк, Наполеон менән Гитлерҙан башҡаһы, Рәсәйҙе баҫырға ниәтләнмәгән. Уға тарих шаһит. Бына шул бөтмәҫ баҫҡынлыҡ һуғыштарына йәлеп иткән Рәсәй тигән батшалыҡ башҡорттарҙы ла, казак итеп, сиктәрен дә һаҡлатҡан.

Тубыл, Исәт, Мейәс, Уй, Йүрүҙән, Әй, Эҫем (Сим) буйҙарында йәшәгән башҡорттарҙың, крепостной рекруттарҙың, һуңғараҡ казактарҙың да көнбайыш Себерҙән Урал армыттары аша үткән иң боронғо юлы - хәҙерге Транссибирь автомобиль юлы. Дөрөҫөрәге, Транссибирь юлы шул һуғыш юлы үткән ерҙәр аша һалынған. Силәбе - Өфө тимер юлы йүнәлеше тиһәк тә ярай. Быны аңлауы ауыр түгел. Ул саҡта Силәбе лә, Златоуст та, Мейәс тә юҡ кимәлендә. Тимер юлы ла төҙөлмәгән. Һорау тыуа. Ә ниндәй юл менән Урал аша килгән һуң Мосоловтар, Демидовтар һәм башҡа баҫҡаҡтар беҙҙең төбәккә? Уралдың ҡайһы армыттары, ҡара урмандары аша улар юл һалған? Улар башҡорттоң Урал аша йөрөгән юлынан килгән. Әммә Рәсәйгә ҡушылғандан һуң да беҙҙең төбәккә был оло юл менән 1735-1737 йылдарға тиклем, йәки 180 йыл буйы үтә алмағандар. Тере урыҫты ул йылдарға тиклем күргән кешеләр юҡ кимәлендә. Уларҙы тик Күсем хан, Ғәли хан, Ишем солтан менән Иберҙә, Урта Уралда, Өфө яғында булған яуҙарҙа ғына күреп белгәндәр. Аҙаҡ империя административ бүленештәр яһап, урыҡдарҙа үҙ хакимиәтен булдырғас ҡына ойошҡан рәүештә оло дәүләттең һуғыштарына алайҙар төҙөп китер булғандар. Тубыл, Исәт, Мейесле йылғалары буйҙарынан көнбайышҡа үткән һуғыш юлының иң ҙурыһы шул. Был юл Көнбайыш Себер, Урал буйын Рәсәйҙең урта төбәктәре менән тоташтырған.

Беҙҙең төбәк һуғышсылары ҡайҙан киткән Өфөгә, артабан яу ҡырына, Мәскәү тарафтарына? Йәки һуғыш бөткәс тере ҡалғандары ҡайһы юл менән кире илдәренә ҡайтҡан? Вагондарға тейәлеп килеп төшөргә әле тимер юлы юҡ. Әпен-төпән генә булған тимер юлы, Косотурға - Ҡыятүргә-Алтынтамаҡҡа - Золотоустьеға тик 1890 йыл саҡ-саҡ килеп етә. Староста, старшиналар, йөҙләк баштары егеттәрҙе йыйып, әллә кире көнсығышҡа, 100-120 саҡырымдағы Троицк ҡалаһына, өйәҙ үҙәгенә алып киткәнме? Унан 600-680 саҡырым көньяҡҡа, Ырымбур ҡалаһынамы? Унан ғына йә Өфөгә, йә Һамарға киттеләрме? 700-800 саҡырым ураү юл һуғышҡа саҡырылған кеше өсөн еңелме? Етмәһә, ҡорал да, кейем дә, ат та үҙендеке? Рәсәй бит башҡортҡа ҡорал бирмәгән. Башҡорт ҡоралды үҙе һуҡҡан. Башҡортҡа ҡуҙсыҡҡандар (кузнецтар) тотмаҫҡа тигән ҡәтғи указдар сыҡһа ла, һуғыш сыҡҡас, күҙ йомғандыр властар.

Спартак ИЛЬЯСОВ.

(Дауамы. Башы 5-6-сы һандарҙа).

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Бынан тыш, башҡорттарҙың айыуға тағы бер нисә һунар ысулы була. Уларҙың ҡайһы берҙәре йыртҡысты тотоуҙан бигерәк, умарталарҙы һаҡлау маҡсатында ҡуйыла. Башҡорттарҙа солоҡто айыуҙан һаҡлау өсөн ағас ҡыуышы эргәһенә оҙон бауға йыуан ағас түмәр, тумран йәки таш аҫып ҡуйыу ҙа билдәле. Солоҡло ағас тирәләй ергә осло имән ҡаҙыҡтар ҙа ҡағып сыҡҡандар. Айыу ағасҡа менгәндә был осло ҡаҙыҡтарҙы урап үтә, ә инде төшкән ваҡытта тап шул ҡаҙыҡтарға ҡолай һәм, ғәҙәттә, шунда уҡ йән бирә.

Шулай уҡ башҡорттарҙа XVIII быуат һуңында, XIX быуатта тикшеренеүселәр яҙып ҡалдырған айыуға һунарҙың тағы бер ҡыҙыҡлы ысулы күҙәтелә. Уны П.С. Паллас былай тип һүрәтләй: "Ҡайһы берәүҙәр оҙон ағасҡа йыуан арҡандар менән таҡта бәйләп ҡуя. Ул сүбәк менән ныҡлап нығытыла. Айыуға унда ултырып бал ашау уңайлы күренә һәм ул, тәү сиратта, таҡта менән ботаҡ бергә бәйләнгән сүбәкте өҙөүҙе тейешле таба. Быны эшләү менән таҡта эленгән ботаҡ ағастан айырылып, ботаҡҡа бәйләнгән арҡанда бәүелә башлаясаҡ. Әгәр айыу шунда уҡ ҡоламаһа, уны барыбер ике хәүеф һағалаясаҡ: йә бейеклектән ҡолап төшөү, йә тыныс ҡына ултырыу. Беренсе осраҡ өсөн ағас аҫтында осло ҡаҙыҡтар ҡағылған, икенсе осраҡта инде айыуҙы уктан йәки икенсе ҡоралдан атып үлтергәндәр" **(һүрәт)**.



XIX быуаттың икенсе яртыһынан башҡорттар араһында тимер тәрилкә (тарелочный) ҡапҡандар киң таралыу ала. Улар хайуандың, йөнлектең төрөнә ҡарап, төрлө ҙурлыҡта һәм төрлө ҡеүәттә була.

Яланлы көньяҡ Башҡортостанда баҙарҙарҙа тимер тәрилкә ҡапҡандар менән бер рәттән, йомран тотоу өсөн айырым тоҙаҡтар һатыла. Улар тимерҙән эшләнә һәм диаметры 7-8 сантиметр булған торбаны хәтерләтә. Эске яҡтан йыуан тимерсыбыҡтан алты, остары эскә ҡаратып бөгөлгән ырғаҡ нығытыла. Бындай тоҙаҡтарҙы йомран өңөнөң ауыҙына урынлаштыралар. Торбаға ингән йомран ырғаҡтарға эләгеп, унан сыға алмаған.

Ау ярҙамында бары тик ҡуяндарҙы аулағандар. Был ысул төрлө районда билдәле булһа ла, уны һирәк ҡулланғандар.

Йәнлектәрҙе, хайуандарҙы башҡорттар уҡтан йәки икенсе ҡоралдан атып та алғандар. XIX быуатҡа тиклем йәйә һәм уҡ башҡорттарҙың иң киң таралған һунар ҡоралы булып тора. Йәйә ике төрлө була: ябай ян һәм ҡатмарлы әҙернә. Ябай ян ҡайын йәки ҡараманан эшләнә, ҡатмарлыһы ике ярты өлөштө: ҡайын һәм шыршы ағасынан, тыштан ҡайын туҙы йәбештереп яһала. Кереш киндер бауынан йәки тарамыштарҙан эшләнә. Башҡорт йәйәләре ҙур булмай (1,5 метр оҙонлоҡта) һәм бик ныҡ бөгөлмәй. Һунар уҡтары төрлө тәрҙә була. Улар араһында ябай ағастан һәм осло яғы бер аҙ киңәйтеп һәм яҫыланып эшләнгәндәре, уҡ башаҡтары йыуанайтып эшләнгәндәре бар. Улар тупаҡай тип атала һәм ҡайһы бер ваҡытта уларға һөйәк атлама (обойма) ултыртыла.

✓ *Рәсәйҙә ошондай берәмектәргә гранттар бирелә, быйылдан үҙебеҙҙә лә гранттар буласаҡ. Былтыр беҙ грант өсөн ҡаралған 26 миллион һум аҡсаны төрлө ойошмаларға бүлдек. Грантҡа ике йыл уңышлы эшләгән ойошма дәғүә итә ала.*

# ТЕРРИТОРИАЛЬ үҙ яҙмышыбыҙҙы

**Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы хаҡында беҙ нимә беләбеҙ? 1995 йылдың 28 августында "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидараны ойоштороуҙың дөйөм принциптары" тигән 154-се Федераль Закон ҡабул ителеүен, 2003 йылдың 6 октябрендә уға үҙгәрештәр индерелеүен дә кемебеҙ белә икән? Ғөмүмән, территориаль йәмәғәт үҙидаралығы халыҡҡа уның көнкүрешен, социаль хәлен яҡшыртыу йәһәтенән ниндәй мөмкинлектәр бирәсәк? Муниципаль биләмә эсендә йәшәгән кеше, ауыл, урам үҙаллы була аламы, уларҙың үҙаллылығының ниндәй сиктәре бар?**
**Хәҙерге ваҡытта Рәсәй Федерацияһында барлығы ошондай 15888 ойошма теркәлеү үткән һәм уларҙың иң күбе Волгоград, Архангель, Тверь өлкәләрендә, Краснодар крайында, Марий Эл республикаһында. Беҙҙең республикала иһә, барлығы 533 территориаль йәмәғәт үҙидаралығы иҫәпләнеп, шуларҙың өсәүһе генә БР Юстиция министрлығында теркәлеү үтеп, юридик хоҡуҡҡа эйә булған. Улар: Ишембай ҡалаһы янындағы "Смаҡай", Сибай ҡалаһы янындағы Төйәләҫ ауылы һәм Белорет ҡалаһындағы территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары. Урынлы һорау тыуа: колхоздар һәм совхоздар юҡҡа сыҡҡандан һуң мең проблемалары менән йөҙмә-йөҙ ҡалған ауыл хеҙмәтсәндәре ни өсөн үҙ яҙмыштарын үҙ ҡулына алырға мөмкинлек биргән законды файҙаланмай һуң? Улар ошо закон хаҡында бөтөнләй белмәйме, әллә был тоткарлыҡ махсус рәүештә эшләнәме? Әйтәйек, республиканы ойоштороусы башҡорт милләтенә был закон нимә бирәсәк? Ошо хаҡтағы фекер ҡоронда Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты, Урындағы үҙидара һәм ижтимағи берекмәләр буйынса комитет рәйесе Рөстәм КҮЗБӘКОВ, БР Муниципаль берләшмәләр ассоциацияһы етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Рөстәм ИСХАКОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румиль АҘНАБАЕВ, ҡоролтайҙың иҡтисад, эшҡыуарлыҡ һәм ер сәйәсәте буйынса комиссияһы рәйесе Иршат АҪЫЛҒУЖИН, Ишембай ҡалаһының "Смаҡай" территориаль йәмәғәт үҙидаралығы рәйесе Әнүәр ШӘҢГӘРӘЕВ һәм уның улы философия фәндәре кандидаты Наил ШӘҢГӘРӘЕВ ҡатнаша.**

**Рөстәм КҮЗБӘКОВ:** Был законға баштан уҡ иғтибар итеүсе булманы тиерлек. Ни өсөн тигәндә, халыҡтың үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алыуы хакимиәттәргә оппозиция кеүек тә тойолғандыр. Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡ (артабан - ТЙҮ) формаһы эшләп китһен өсөн тәүшарт - урындарҙа тыуған ере, ауылы өсөн янып торған энтузиастарҙың булыуы. Улар булмаһа, өҫтән административ баҫым көсө менән быны эшләтеп булмаясаҡ. Әгәр ҙә улар өҫтән ҡушып ойошторған хәлдә, ауыл халҡы элеккесә "Алма беш, ауыҙыма өҙөлөп төш" тип көтөп тик ятасаҡ. Үҙидараның был формаһын йәшәйешкә бәйле проблемаларҙың күп булған урындарында ҡулланыу маҡсатҡа ярашлы. Беҙҙең халыҡта элек-электән ырыу, община менән йәшәү менталитеты формалашҡан. Шуға күрә, совет власы ваҡытында ойошторолған колхоз-совхоздар башҡорттоң шул менталитетына бик тә тап килде. Донъялар үҙгәреп, колхоз-совхоздар тарҡалғас, башҡорт ауылдарында хужалыҡ эштәрен алып барыу ҙа туҡталып ҡалды. Кемдер эсә башланы, кемдер ҡалаға сығып китте, бик аҙҙары ғына үҙ эшен ойошторҙо, йәғни халыҡтың күпселеге бер ниндәй ҙә эш менән шөғөлләнмәй, аптыранып ҡалды. Бына ошо урында ТЙҮ ойоштороу талап ителә лә инде. Был форма башҡорттар өсөн, уларҙың менталитеты өсөн бик ҡулай. Әйтәйек, индивидуалист холоҡлораҡ милләттәр колхоз-совхоздар тарҡалғас, шәхси эшҡыуарлыҡҡа тиҙ генә өйрәнеп китте. Ә башҡортта алыпһатарлыҡҡа, эшҡыуарлыҡҡа бик үк тотона һалып бармайҙар бит инде.

ТЙҮ ойоштороу күп яҡтан ҡулайлы. Шул уҡ ауылдарҙағы әхлаҡ, иман мәсьәләләрен яйға һалыуға, халыҡтың оптимизмын тергеҙеүгә лә булышлыҡ итәсәк. Мәҫәлән, ауылдарҙа суицид осраҡтары көсәйеүе беҙҙе бик ныҡ борсой. Статистика буйынса, республикала йылына 100 мең кешегә 40-60 кеше үҙ-үҙенә ҡул һалып, донъя менән хушлаша. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы критерийҙары буйынса, был күрһәткес 20-нән ашһа, ғәҙәттән тыш тип һанала. 2003-2005 йылдарҙа Әбйәлил районында ул күрһәткес 130-ға етә торғайны. Әлеге ваҡытта Баймаҡ, Ҡыйғы райондарында суицид осраҡтары иң күбе иҫәпләнә. Ейәнсура, Ишембай, Күгәрсен, Хәйбулла, Учалы райондарында ла был һан юғары. Был райондарҙа балалар ҙа күп тыуа, әммә суицид йылдам артыуҙы тотҡарлай. Суицидтың 90 проценты ирҙәр өлөшөнә, 80 проценты пенсия йәшенә тиклемге йәштәгеләргә тура килә. Һуңғы йылдарҙа Әбйәлил районында ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар хәрәкәте барлыҡҡа килеп, ауылдарҙа халыҡ ойоша башлағас, үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар кәмене. Был район ауылдарында лидерҙар күп. Бына улар ойоштора алыр ине был территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарын. Ишембай районының Смаҡай ауылы халҡын да бит тормоштарындағы ауырлыҡтар ошондай үҙидаралыҡ төҙөргә мәжбүр иткән.

Закондарға килгәндә, улар ҡабул ителгән һәм бында бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ юҡ. Былтыр беҙ коммерция булмаған социаль йүнәлештәге ойошмаларға ярҙам итеү буйынса тағы бер закон ҡабул иттек. Беҙ был исемлеккә ТЙҮ-ҙарҙы ла индерҙек. Законда ундай типтағы ойошмаларға финанс, мәғлүмәт, ойоштороу ярҙамы күҙ уңында тотола.

**Румиль АҘНАБАЕВ:** Был эште ойоштороуҙың уңышы урындарҙа халыҡты үҙенең артынан эйәртеп алып китерлек юлбашсыларҙан торасаҡ. Хәҙерге ваҡытта ауылдарҙа старосталарҙы һайлайҙар. Әгәр ҙә беҙ староста вазифаһы менән ошо йәмәғәт үҙидаралыҡ етәксеһе вазифаһын берләштерә алһаҡ, эшебеҙ еңелләшер ине. Старосталар һайлауҙы был эштең тәүге баҫҡысы тип атарға ла булалыр, моғайын?

**Рөстәм КҮЗБӘКОВ:** ТЙҮ-ҙең юридик хоҡуҡҡа эйә булмаған формаһы ла бар. Әммә уның юридик хоҡуҡҡа эйә булыуының да әһәмиәте бар. Былтырҙан башлап Рәсәйҙә ошондай берәмектәргә гранттар бирелә, быйылдан үҙебеҙҙә лә гранттар буласаҡ. Уларҙы алыр өсөн ойошманың юридик теркәлеүе талап ителә. Былтыр беҙ грант өсөн ҡаралған 26 миллион һум аҡсаны төрлө ойошмаларға бүлдек. Грантҡа ике йыл уңышлы эшләгән ойошма дәғүә итә ала.

Мин Бөтә Рәсәй ТЙҮ ойошмаларының Волгоградта уҙған 2-се съезына барҙым. Шунда 30 мең халҡы булған бер бәләкәй генә ҡалаға алып барҙылар. Ошо ҡаланың ситендә Молдованан күсеп килгән 26 йәшлек ҡыҙ йәштәрҙе үҙенең янына туплап, үҙиадарылыҡ ойошмаһы төҙөгәндәр. Улар үҙҙәренең көсө менән сүпсарҙы таҙартып, балсыҡ, ҡырсынташ килтереп спорт майҙаны, парк эшләгән. Төҙөлөш вагончигы һатып алып, уны штаб иткәндәр. Ҡала йәштәргә музыка ҡоралдары һатып алып биргән. Хәҙер йәштәр араһында енәйәтселек осраҡтары бөтөнләй юҡ. Ойошма бер миллион грантҡа эйә булған. Шул аҡсаға бағаналар ултыртып, төнгө лампалар ҡуйып сыҡҡандар. Йәштәр был микрорайонда бөтә власты үҙ ҡулына алған.

**Рөстәм ИСХАКОВ:** Халыҡ үҙенең хоҡуҡтарын белмәй. Ошондай закон тураһындағы мәғлүмәтте халыҡҡа еткермәү урындағы хакимиәттәрҙең ҙур хатаһы. ТЙҮ-ҙы барлыҡҡа килтереүҙең ике юлы бар. Беренсеһе - урындағы органдарҙа теркәлгән, йәғни юридик хоҡуғы булмаған формаһы, икенсеһе - Юстиция министрлығында теркәлгән юридик хоҡуҡҡа эйә формаһы. "Смаҡай" кеүек юридик хоҡуҡлы ойошма әле республикабыҙҙа өсәү генә, ә был исемлеккә инеп тә, министрлыҡта теркәлеү үтмәгәндәре 800-ҙән ашыу. Әгәр ҙә ойошма теркәлеү үтһә, ул дәүләт органдарына барлыҡ отчеттарын биреп барырға бурыслы. Әгәр ҙә отчет бирелмәһә, штраф санкциялары ҡарала. Теркәлеү үткән ойошманың бына шундай ауырлығы бар. Урындарҙа йөрөгәндә күптәр ошо ҡағыҙ эшен мәшәҡәт итеп күреүҙәре, шул арҡала ойошма төҙөргә бик ашҡынып тормауҙарын белдерә. Беҙ Мәскәүгә барғанда һәр ваҡыт был мәсьәләне ябайлаштырыуға йүнәлтелгән закон зарурлығын әйтә йөрөйбөҙ. Халыҡты ойоштороу, күңелен күтәреү, сәләмәт йәшәү рәүешенә ылыҡтырыу, ер-һыуын һаҡлауға йәлеп итеү буйынса ошонан да ҡулай сара юҡ бөгөн.

Әгәр ҙә был законды үтәү хакимиәт башлыҡтарына ҡушылһа, улар бар урында ла ТЙҮ-ларҙы ойошторол ҡуясаҡ. Әммә ундай ойошмаларҙың беҙгә кәрәге бармы? Исем өсөн генә, өҫтән ҡушылғанға ғына ойошторолған эштең файҙаһы ла булмаясаҡ, оҙаҡҡа ла сыҙамаясаҡ. Беҙ быға са ауыл старосталары ғына билдәләп, халыҡтың өлгөргәнен көттөк. Бөгөн иһә, старосталыҡтан ТЙҮ-гә күсергә ваҡыт етте. Шуға ла һәр ауылда инициативалы кешеләр табылһа, ойошманы ойоштороп, теркәтергә ярҙам итергә беҙ әҙер.

Төркиәлә бындай ойошмаларҙы кешенең ғорурлыҡ тойғоһо эшләтә. Ҙур булмаған бер төрөк ауылында староста (уларса - мохтар) һайлауҙарына шаһит булдыҡ. Уларҙа ауылды үҫтереүгә кем иң күп аҡса бирә, шул мохтар булып һайлана икән. Төрөк аҡсаһы менән нисәлер миллион лир аҡса биреп, бер йәш егет еңеп сыҡты. Беҙ унан ни өсөн был ойошмаға шунсама аҡса һалырға йөрьәт итеүе хаҡында һорашҡайныҡ, ул: "Һуң, минең исемемә был абруй килтерәсәк бит. Улдарым, ейәндәрем минең менән ғорурланып йәшәйәсәк. Был абруй фамилиябыҙға ғорурлыҡ килтерәсәк", - ти.

Краснодар өлкәһендә эшләүсе ойошмаларҙа йәшәүселәр менән аралашырға тура килде. Улар ҙа үҙҙәренең ауылында тормош гөрләп тороуы хаҡында ғорурланып һөйләне. Ҡайҙа ТЙҮ бар, шунда йәшәү еңелерәк һәм күңеллерәк. Ни өсөн беҙҙә ауыл халҡы колхоз-совхоздарҙы һаҡлап ҡалырға ынтылманы? Сөнки улар үҙидаралыҡтан мәхрүм ителгәйне. Ситтәр килеп колхоздарҙың техникаһын 15-20-шәр мең һумға алып киткәндә лә өндәшеүсе булманы хатта. Әгәр ҙә халыҡ минең ерем, минең техникам, тип эшләһә, быға юл ҡуйылмаҫ ине.

Ауылда бер, ике һәм унан да күберәк ошондай территориаль йәмәғәт үҙидаралығы ойошторорға мөмкин. Улар араһында үҙ-ара ярыш булдырырға кәрәк. Төркиәлә һәр ауылдың сайты бар. Был эш уларҙа дәүләт кимәлендә башҡарыла.

**Рөстәм КҮЗБӘКОВ:** Бер райондың бер нисә ауылында ошондай ойошма булһа, уларҙы берләштергән ассоциация төҙөү мөмкинлеге лә асыла. Ауыл, ҡала Советына депутаттар һайлағанда был ойошмалар үҙҙәренең кандидатураһын сығарырға, һайлау алды кампанияһында ҡатнашырға мөмкин. Мишкә районындағы мариҙар йәшәгән бер ауылда ашханалары санитар нормаларға тап килмәүе сәбәпле бер мәктәпте ябырға йыйынғандар. Ауыл халҡы йыйылып, диләнкә алып, ҡыҫҡа ғына арала ашхана төҙөп, мәктәпте яптырмай һаҡлап алып ҡалған. Улар кемдеңдер килеп эшләп биргәнен көтөп ултырмай, юлдарҙы ла үҙҙәре һала.

**Иршат АҪЫЛҒУЖИН:** Бик мөһим мәсьәлә, әммә был эштәр халыҡтың үҙенең инициативаһы менән, йәмәғәтселек кимәлендә башҡарылмаһа, бер нимә лә килеп сыҡмаясаҡ. Халыҡтың үҙенең ойошоуы зарур бында. Сөнки был эште өҫтән ойоштороп, етәкселәр үҙҙәренә ҡулайлы, әммә халыҡ араһында абруйы булмаған кешене етәксе итеп тәғәйенләй башлаһа, эш һүнеп ҡалыуы бар. Унан һуң, башта уҡ әллә ни мауыҡмайынса, һәр бер районда икешәр-өсөшәр ойошма төҙөп, башҡаларға өлгө итеп эшләтеп күрһәтергә ине.

**Әнүәр ШӘҢГӘРӘЕВ:** Беҙҙең ауылдарҙа күпселектә башҡорт халҡы мал аҫрап көн күрә. Мин йәштән үк тыуған ауылым Смаҡай яҙмышы менән борсолоп йәшәнем. Ҡырҡ йыл уҡытыусы булып эшләнем. Хаҡлы ялға сыҡҡас, староста итеп һайлап ҡуйҙылар, аҙаҡ ошо ТЙҮ-ны барлыҡҡа килтерҙек. Ауылыбыҙҙа клуб булмағас, тәүге ойоштороу

*ТЙҮ ойоштороу күп яҡтан ҡулайлы. Шул уҡ ауылдарҙағы әхлаҡ, иман мәсьәләләрен яйға һалыуға, халыҡтың оптимизмын тергеҙеүгә лә булышлыҡ итәсәк. Мәҫәлән, ауылдарҙа суицид осраҡтары көсәйеүе беҙҙе бик ныҡ борсой. Статистика буйынса, республикала йылына 100 мең кешегә 40-60 кеше үҙ-үҙенә ҡул һалып, донъя менән хушлаша. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы критерийҙары буйынса, был күрһәткес 20-нән ашһа, ғәҙәттән тыш тип һанала. 2003-2005 йылдарҙа Әбйәлил районында ул күрһәткес 130-ға етә торғайны. Әлеге ваҡытта Баймаҡ, Ҡыйғы райондарында суицид осраҡтары иң күбе иҫәпләнә.*

*✓ Әгәр ҙә беҙ барыһын да үҙебеҙҙең ҡулға алмаһаҡ, Смаҡай ҡаланың сүп-сар түккән урынына әйләнә ине. Бының һымаҡ ойошмаларҙы бар урында ла эшләргә кәрәк. Төп маҡсат - ерҙәрҙе һаҡлап ҡалыу һәм уны халыҡ мәнфәғәтенә файҙаланыу.*



йыйылышын тау башындағы зыярат янында үткәрҙек. 500-ләп кеше килде. Уға тиклем һуғыш ветерандары өсөн обелискты ла шул зыярат янына ҡуйғайныҡ, 1992 йылдан башлап зыярат янына халыҡты йыйып, мәрхүмдәр рухына аят уҡыта башлағайныҡ. Йыйылышҡа Ишембай ҡалаһы һәм районы етәкселеген саҡырҙыҡ. Смаҡай ауылында һуғышҡа тиклем колхоз, һуғыштан һуң артель булған. Шунан һуң 1952 йылдан башлап беҙҙең ерҙәрҙе сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү кампанияһы шауҡымында тирә-яғыбыҙҙағы ауылдарға бүлеп биреп бөтөргәндәр. Беҙҙең ауыл халҡы ерһеҙлекте үҙ елкәһендә татып йәшәне. Шуға күрә ошондай ойошма төҙөү мөмкинлеге барлыҡҡа килеүен халыҡ шатланып ҡабул итте. Әйткәнемсә, беҙҙең ауылда ер мәсьәләһе шул ҡәҙәре киҫкен

тип янып йәшәгән кешеләр булғанда бар нәмәне эшләп була. Ойошманы төҙөү, уны теркәү - бер нәмә, ә бына эшен һүндермәй алып барыу өсөн халыҡтың тырышлығы талап ителә. Берәр кеше мәрхүм булһа, уны һуңғы юлға оҙатыуҙы ойоштораბыҙ. Бар кешегә лә тигеҙ ҡарайбыҙ, кеше айырмайбыҙ. Ҡала етәкселәре беҙҙең эшмәкәрлеккә шат, сөнки күп эштәрҙе беҙ үҙебеҙ башҡарабыҙ, иң мөһиме, ҡала инфрасруктураһын тәшкил иткән ауылда тәртип һәм таҙалыҡ һаҡлайбыҙ. Ҡыҫҡаһы, етәкселәрҙең беҙҙең ауыл өсөн башы ауыртмай. Һәр бер ауыл кешеһе, беҙҙең йәшәгән еребеҙ, тип күкрәк һуғып йөрөй. Әгәр ҙә Байғуҙаның көтөүе беҙҙең ергә сыҡһа, шундуҡ мәғлүмәт миңә килеп етә. Мин шылтыратып ебәреүем була, тегеләр шундуҡ малын беҙҙең ерҙән алып китә һала. Мин

файҙаланыу. Әлеге ваҡытта бер ауыл хакимиәте лә халыҡтың ерен межаларға теләмәй. Миңә, депутат булараҡ, был эште атҡарыу еңелерәк булды. Беҙ әле ике тапҡыр ауылыбыҙ еренең тарихи сиктәрен аныҡланыҡ. Аҡсаны беҙ ауыл халҡынан сход ҡарары нигеҙендә йыябыҙ. Йыйыусылар аҡса биргән кешегә квитанция тапшыра. Бынан тыш, беҙҙә зыярат фонды бар. Банкта үҙебеҙҙең счетыбыҙ бар. Ауыл хакимиәтендә ниндәй документация алып барылһа, беҙ ҙә шул уҡ эште алып барабыҙ. Мәптәптә үҙебеҙҙең офисыбыҙ бар.

Беҙгә ҡаланың яҡын булыуы уңайлы. Мал тотоусылар көндәлек һауымын ҡалаға илтеп һата. Һәр бер һөт, ит, башҡа продукция һатыусыларҙың ҡалала үҙ клиенттары бар.

Беҙҙең ойошма составында ҡатын-ҡыҙҙар советы, аҡһаҡалдар

мал көтөп тора. Ҡыҫҡаһы, Смаҡай ауылы кешеһе аҙ булһа ла аҡса эшләй ала. Минеңсә, төпкөлдә йәшәүселәргә был йәһәттән ҡатмарлыраҡ буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта Ишембайҙан шундай уҡ алыҫлыҡта ятҡан Байғужа ауылында быңдай ойошма юҡ һәм унда йәшәү кимәле лә түбәнерәк, эскегә һалышыусылар ҙа күберәк. ТЙҮ ойоштороу уларҙағы был проблемаларҙы еңергә һис шикһеҙ булышлыҡ итәсәк.

**Румиль АҘНАБАЕВ:** Ә бына документация, отчет эштәрен алып барған кешегә нисек эш хаҡы түләйһегеҙ?

**Әнүәр ШӘҢГӘРӘЕВ:** Беҙ нулевой баланс булған осраҡта ла квартал һайын отчет биреп барырға бурыслыбыҙ. Барлыҡ ошо документация эштәрен үҙем алып барам, был эштә миңә элек һалым органдарында эшләгән тәжрибәле ауылдаштарым ярҙ-

дырыу зарур. Әгәр ҙә иң тәүҙә аҡса табып, шунан һуң ТЙҮ ойошторорға тотонһаҡ, ат егелмәгән арбаға йөк тейәгән һымаҡ килеп сығасаҡ.

ТЙҮ коммерция булмаған ойошмалар булып иҫәпләнә. Әммә ошо ойошмалар эсендә коммерция менән дә шөғөлләнеү законға ҡаршы килмәй. Был осраҡта эшҡыуарлыҡтан килгән аҡсаны ойошманың иҫәбенә лә күсереп, төрлө маҡсатта файҙаланып була. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында ла ошо эш менән шөғөлләнгән секторҙы, комиссияны булдырыу кәрәктер. Сөнки бөтә урында ла был эш бармаясаҡ, ойошмаларға барып ярҙам итергә кәрәк.

Беҙгә әле Өфө янында төҙөлгән Шамонино ауылынан килделәр. Бөгөн унда мең ярым кеше йәшәй. Улар үҙҙәрендә ауыл хакимиәте төҙөргә рөхсәт һорай. Ни өсөн тигәндә, был ауыл өйҙәренең күбеһенә һыу үтеп бөтмәгән, юл төҙөү эше лә аҙағына еткерелмәгән, сүп-сарҙы түгеү мәсьәләһе хәл ителмәгән. Үҙҙәренең проблемаларын власть алдында рәсми формала ҡуйыр өсөн беҙ уларға ТЙҮ төҙөргә кәңәш иттек.

**Румиль АҘНАБАЕВ:** Әле беҙҙең һәр бер ауылда ер мәсьәләһе хәл



# Йәмәғәт үҙидаралығы –

## үҙ ҡулыбыҙға алыу юлы түгелме?

торҙо. Был мәсьәләне яйға һалдыҡ, ерҙәребеҙҙе күршеләрҙән кире юллап ҡайтарҙыҡ. Әле беҙҙең 258 гектар сабынлығыбыҙ бар. Бөгөн үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ күрәбеҙ. Бергәләп пай ерҙәренә документтар әҙерләйбеҙ, экологик өмәләр үткәрәбеҙ. Ике зыяратыбыҙҙы ла кәртәләп алдыҡ. Ҡайһы ваҡыт өмәләргә шул тиклем кеше күп сыға, уларға ниндәй эш ҡушырға белмәйенсә, икенсе юлы килерһең, тип өйҙәренә ҡайтарып ебәрәбеҙ. Ауыл халҡы үҙ-үҙен һәм бер-береһен контролдә торорға өйрәнде. Малды сиратлап көтәбеҙ. Үҙебеҙҙең янғын һүндереү командабыҙ бар. Төҙөкләндереү буйынса төрлө конкурстар үткәрәбеҙ, еңеүселәргә призлар тапшырабыҙ. Йыл һайын август аҙағында, яңы уҡыу йылы башланыр алдынан балалар байрамы үткәрәбеҙ. 1 октябрҙә мәктәптең ашханаһында ауылыбыҙҙың өлкән кешеләрен тәбрикләйбеҙ. Йыл һайын Ҡорбан ғәйетен дә үткәрергә онотмайбыҙ. Быйыл тәүге тапҡыр "Әсәләр көнө"н үткәрҙек. Ауылыбыҙға күсеп килеүсе урыҫтар ҙа бар. Улар өсөн быйыл тәүге тапҡыр Ғайса бәйғәмбәрҙең тыуған көнөн үткәрҙек.

Беҙҙең "Смаҡай" ТЙҮ советы 17 кешенән тора. Советҡа ингән һәр кем ауыл тормошоноң ниндәйҙер бер өлкәһен етәкләй. Кемдер экологик мәсьәләне хәл итә, кемдер зыяраттар өсөн яуаплы, кемдер бесәнлектәрҙе бүлеп бирә, ә кемдер көтөүлектәр менән эш итә һ.б. Йыл һайын ерҙе арендаға алған өсөн 21 мең һум түләп барабыҙ. Ошолай, ауылым,

ауылыбыҙҙың үҙидаралыҡҡа күсеүенән башлап аҫабалыҡтың ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булыуын үҙ тәжрибәмдән сығып аңлайым. Сөнки ауылдаштарымдың рухы күтәрелде, башты ғорур сөйөп йөрөйҙәр.

**Румиль АҘНАБАЕВ:** Эш башҡарғас, уның килеме лә, эш хаҡы ла булырға тейеш. Ә бына һеҙгә бушҡа эшләп йөрөү нимә бирә һуң?

**Әнүәр ШӘҢГӘРӘЕВ:** Мин үҙемдең Смаҡайымды ятраҡанға, халҡымды яратҡанға бушҡа эшләйем. Аҡса менән бар нәмәне

ҡоро бар. Әле беҙҙең ойошма составында ауыл ҡоролтайы ла ойошторорға иҫәп тотабыҙ. Беҙҙең ойошманың көсө халыҡтың берҙәм булыуында. Алдыбыҙҙа ниндәй генә ауырлыҡтар тыумаһын, беҙ һәр ваҡыт еңеп сығабыҙ, артҡа сигенмәйбеҙ.

**Наил ШӘҢГӘРӘЕВ:** Иң мөһим мәсьәлә - ул финанс мәсьәләһе. Әммә икенсе мөһим мәсьәлә - профессионаллек. Әгәр ҙә кеше ниндәй генә эште башҡарған хәлдә лә быңың менән профессиональ кимәлдә шөғөлләнмәһә, бер нәмә лә килеп сыҡмай.

амлаша. Был эш өсөн бер кем дә бер кемгә лә бер тин дә түләмәй. Беҙ идея өсөн, эш өсөн тырышабыҙ.

**Иршат АҪЫЛҒУЖИН:** 90-сы йылдарҙа мин үзбәктәрҙең үҙидаралыҡ нигеҙендә төҙөгән мәхәлләһен өйрәнеп ҡараным. Уларҙа мәхәллә ни тиклем уңышлы эшләһә, халыҡтың көнкүреше шул тиклем яҡшыра бара. Халыҡ быңың әһәмиәтен күрә һәм был форманы һаҡларға тырыша. Мәхәллә һәр ғаиләнең проблемаларына үтеп инергә һәм ярҙам итергә тырыша. Туйҙарҙы ла, йыназаларҙы ла ул ойоштора. Революцияға тиклем башҡорт йәмғиәтендә эске төҙөлөш булған. Йәмғиәт һәр ғаиләнең тор-

ителмәгән. Пай ерҙәре межаланмаған, көтөүлек, сабын ерҙәре рәсмиләштерелмәгән. Зыярат кәртәләү ҙә хәҙер ауылда оло мәшәҡәткә әүерелде. Ауыл хакимиәттәре был эште ойошторор ҡарай ҙа, кешеләрҙе туплай алмай. Ҡыҫҡаһы, бөгөнгө ауылдың алдында бихисап проблемалар тора. Иң мөһим мәсьәлә - ер. Бөгөн һәр ауылға "Ауылыбыҙҙың ере - беҙҙеке, унда башҡа берәүҙең дә инергә хоҡуғы юҡ!" тигән документ кәрәк. Шул эштәрҙе башлап ебәреү өсөн дә беҙгә быңдай үҙидаралыҡ органы кәрәк.

*1952 йылдан башлап беҙҙең ерҙәрҙе сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү кампанияһы шауҡымында тирә-яғыбыҙҙағы ауылдарға бүлеп биреп бөтөргәндәр. Беҙҙең ауыл халҡы ерһеҙлекте үҙ елкәһендә татып йәшәне. Шуға күрә ошондай ойошма төҙөү мөмкинлеге барлыҡҡа килеүен халыҡ шатланып ҡабул итте. Әйткәнемсә, беҙҙең ауылда ер мәсьәләһе шул ҡәҙәре киҫкен торҙо. Был мәсьәләне яйға һалдыҡ, ерҙәребеҙҙе күршеләрҙән кире юллап ҡайтарҙыҡ. Әле беҙҙең 258 гектар сабынлығыбыҙ бар. Бөгөн үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ күрәбеҙ. Бергәләп пай ерҙәренә документтар әҙерләйбеҙ, экологик өмәләр үткәрәбеҙ. Ике зыяратыбыҙҙы ла кәртәләп алдыҡ.*

лә хәл итеп булмай, мин халыҡ менән бергә йәшәгәнемә, уларға ярҙам итә алыуыма шатмын. Бына инде алтынсы тапҡыр ышаныс белдереп, ҡала Советына депутат итеп һайлап ҡуйҙылар. Алты меңдән ашыу һайлаусым бар. Депутат стажым 30 йыл. Әгәр ҙә беҙ барыһын да үҙебеҙҙең ҡулға алмаһаҡ, Смаҡай ҡаланың сүп-сар түккән урынына әйләнә ине. Быңың һымаҡ ойошмаларҙы бар урында ла эшләргә кәрәк. Төп маҡсат - ерҙәрҙе һаҡлап ҡалыу һәм уны халыҡ мәнфәғәтенә

Шул уҡ слесарь йә водитель булып эшләүсе кешене эшенән айырып, хоккей буйынса Рәсәй йыйылма командаһында уйнатып булмаған кеүек, был эш тә үҙенең оҫтаһын талап итәлер тип уйлайым. Әгәр ҙә бөгөн "Смаҡай" территориаль йәмәғәт үҙидаралығы уңышлы эшләй икән, быңың сәбәбе унда пенсионерҙарҙың эшмәкәрлек итеүе. Ишембай ҡалаһы сиктәрендәге был ойошманың өҫтөнлөгө нимәлә һуң? Был ауылда йәшәүселәрҙең күбеһе ҡалала эшләй йә үҙаллы

мошон күҙәтеп торған, булышлыҡ иткән. Бынан тыш һәр ауылда элек мөгәзәй тигән урындар булған. Мөгәзәй ул саҡта ниндәй функция башҡарған һуң? Ул ауылдың страховой фондын тәшкил иткән. Ауылдың һәр ғаиләһе мөгәзәй складына иген һалған. Был игенде ҡоролоҡ булған осраҡта файҙаланғандар йә булмаһа ҡарт-ҡороно, етем балаларҙы ҡарау өсөн тотонғандар.

**Рөстәм КҮЗБӘКОВ:** Минеңсә, беҙгә иң тәүҙә аҡса хәстәрләргә түгел, иң башта ойошманы бул-

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гәзитебеҙҙең 2011 йылдағы 43-сө һанында юғарылағы фекер ҡоронда ҡатнашыусы Иршат Аҫылғужин "Беҙҙекеләр эшләргә теләмәй, ә ситтәр йәшәй һәм эш урындарын яулай..." тигән әңгәмәһендә ер пайы хаҡында шундай фекер әйткәйне: "Рәсәй Дәүләт Думаһы биргән законды файҙаланып, аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы киренән ҡайтарыу мөмкинлеге барлығын күрергә теләмәйбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, Ер кодексы, икенсе төрлө әйткәндә,"Аҫаба башҡортлоғобоҙҙо кире ҡайтарыу" законы бит ул..."**

**Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, был һүҙҙәр халыҡ тарафынан саҡырыу, оран булып ҡабул ителергә тейеш ине лә. Үкенескә күрә, ундай күренеш булманы. Хәҙер шундай уҡ әһәмиәткә эйә икенсе бер закон - Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы! Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, әле ҡабул ителгән закондар беҙгә үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алырға мөмкинлек бирә, йәмәғәт!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

***✓ Хужалар ҡапҡанан күренеү менән, Ҡансығай ни эшләргә белмәй: ҡыуанысынан сыйнай, өрә, ҡойроғон болғап сәләмләй, үҙен иркәләргә янына сүгәләгән Шәфҡәтле малайҙың ҡулдарын ялай, һағыныуын белдереп, уға һырпалана.***




Ҡансығай үҙенең көсөк сағы үткән ауылға яҡынлашты. Анау, бер-береһенә тоташып, ҡыҫҡа ғына теҙмә тәшкил иткән тауҙарҙы артылһаң, уларҙың көн тыуыш итәгендә күктәге Ҡош юлы йүнәлешенә ҡарап һуҙылған ауыл күренәсәк. Ул ҙур түгел - Ҡансығай донъяға пәйҙә булған ауылдан әллә нисә мәртәбәгә бәләкәйерәк. Һәр хәлдә, эттең хәтерендә шулай ҡалған.

Ул яҡты донъяға яңғыҙы ғына килмәгәненә һалҡындан ҡалтырана-ҡалтырана инәһенең имсәген эҙләп, унда-бында төртәләнгән саҡта уҡ төшөнгәйне. Аҙаҡ, күҙҙәре тамам асылып, тирәйүнде сырамыта башлағас, үҙе кеүек тәнтерәкләп, сыйылдайсыйылдай имсәккә ынтылыусыларҙың бер-нисәү икәнен күрҙе.

Ҡайһы саҡта бер-береһе менән болаша-талаша имгән инә һөтө көсөктәр өсөн йәшәү сығанағы ла, тәкәтһеҙ һыуыҡтан ҡурсаланыу сараһы ла ине: иҫ киткес татлы, йылы шыйыҡса бөтә тәнгә тарала һәм һин дерелдәүҙән туҡтайһың. Ә инде инәй өҫтөндә ялбыр ҡойроғо менән ҡаплаһа, бөтөнләй йылынаһың да рәхәт серемгә талаһың.

Һуңынан көндәр әкренләп йылыға тартты. Әлбиттә, төндәрен йәнә һалҡын төшә, ләкин ул күҙгә күренеп утыҡҡан һәм талай теремекләнгән көсөктәр өсөн әллә ни ҡурҡыныс түгел. Улар көндөҙҙәрен алмаҡтан-һолмаҡ инәләренең имсәген имәләр, уның араһында иҫке һарайҙың ярым ҡараңғы мөйөшөнә түшәлгән һалам өҫтөндә мәж килеп уйнайҙар, бер-береһе менән ойпалашып шаяралар. Инә бағауылы аҫтында уҙған ғәмһеҙ һәм күңелле көндәр!..

Тик әлеге вайымһыҙ дәүер бигерәк ҡыҫҡа булды шул. Көндәр камил йылынғас, быға тиклем ара-тирә һарайға инеп, көсөктәрҙең инәһенә һөйәк-һаяҡ, ашһыу ҡалдыҡтары ырғытып сыҡҡан Ҡараңғы сырайлы хужа Ҡансығайҙың арлан туғандарын берәм-берәм тотоп алып, икенсе кешеләргә таратып бөттө. Башта инәләре, тотолған көсөгөнөң сыйылдауына түҙмәй, тештәрен ыржайтып тороп баҫҡайны, хужа ныҡ итеп уның томшоғона типте. Меҫкен эткә сайылдап, шыңшый-шыңшый бер мөйөшкә барып һыйыныуҙан башҡа сара ҡалманы. Бынан һуң ул, сираттағы көсөктө алырға ингән хужаға ҡаршылыҡ күрһәтеп маташмайынса, ярҙам һорап, сай-сой килгән балаһын илауға оҡшаш мөсһөҙ шыңшыу ауазы менән оҙата торҙо.

Бер көндө сират инәһе менән икәү генә тороп ҡалған Ҡансығайға ла килеп етте. Тик был юлы хужа йән көскә тыпырсынып сыйнаған көсөктө, нишләптер, тоҡ эсенә һалды ла, уның ауыҙын бәйләп, арбаға ырғытты. Ат ҡуҙғалып китте. Тоҡ эсендә тулап, өҙләкһеҙ сыйылдаған көсөктөң ҡолағына ат тояҡтары тауышы, тәгәрмәстәр келтерләгән, арба дыһырлаған ауаздар салынды. Ә хәтергә иң ныҡ уйылып ҡалғаны - инәһенең үҙәк өҙгөс итеп шыңшыуы. Был - көсөктөң инә тауышын һуңғы ишетеүе ине.

Байтаҡ барғас, Ҡараңғы сырайлы хужа уны юл ситенә бырақтырып китте. Көсөктөң тәүге теләге - ат артынан эйәреү, нисек кенә булһа ла, уны инәһе менән бәйләп тороусы хужа артынан ҡалмау ине. Әгәр шулай иткәндә, ул үҙен алып киткән арба артынан эйәреп, инәһе эргәһенә ҡайтасаҡ! Ләкин көсөк былтырҙан ҡалған шырт ҡауланды йырып юлға килеп сыҡҡанда, арба күҙҙән юғалғайны. Ҡараңғы сырайлы хужа тураһында һуңғы иҫтәлек - юл бөгөлө аръяғында алыҫҡая барыусы тәгәрмәстәр тауышы һәм баҫылырға өлгөрмәгән саҡ-саҡ һиҙелерлек туҙан болото.

Шулай ҙа көсөк йыраҡлаша барған тауыш артынан бер килке үҙенсә йән-фарман сабып ҡараны. Әммә әҙерәк барғас, хужаны ҡыуып етеүҙең мөмкин түгеллеген аңлап, юл уртаһында арт аяҡтарына ултырҙы. Беренсенән, арыны, икенсенән, уны ғүмеренең инәле дәүере менән бәйләүсе һуңғы еп өҙөлдө - арба тауышы бөтөнләй ишетелмәҫ булды. Көсөк көҙҙән ҡалған өйкөм-өйкөм ҡылғандар араһынан күтәрелеп килгән ҡуйы ҡурпылы ҡола яланда япа-яңғыҙ тороп ҡалды.

Яңғыҙ тигәс тә, бөтөнләй уҡ түгел икән - ҡояш балҡып торған сыуаҡ күктә, ергә бер яҡынайып, бер алыҫайып, ҡоштар һайраша, юлды йә тегеләй, йә былай киҫеп үтеп эреле-ваҡлы ниндәйҙер бөжәктәр ҡайнаша. Шул саҡта ҡапыл уның баш осонда һауаны телеп ҡанат елпегән тауыш, артынса: "Ҡарҡ, ҡарҡ!" тигән иләмһеҙ ауаз яңғыраны. Унан өрккән көсөк ситкә тайшанды һәм юл ситендәге ҡуйы ҡаулан араһына инеп боҫто.

Ул, ҡыбырларға ла ҡурҡып, йәшеренгән ерендә байтаҡ ятты, тик баяғы ҡоштоң ҡотһоҙ тауышы башҡаса ишетелмәне. Хәүеф үтте шикелле, инде сыҡһаң да булалыр. Ана, яҡты донъя ниндәй ғәжәп һәм мауыҡтырғыс: ергә бер яҡынайып, бер алыҫайып баяғы ҡоштар һаман һайрай, эреле-ваҡлы бөжәктәр ундабында йүгерешә. Туҡта, алда бер ҡыуаҡлыҡ күренә түгелме? Шунда барырға кәрәк, ағас араһында ышығыраҡ һәм хәүефһеҙерәк булырға тейеш.

Көсөк ҡыуаҡлыҡҡа барып еттем генә тигәндә, унан бер үр ҡуяны атылып сыҡты ла, битләүендә һерәйеп торған ҡаялар күренгән тауға ҡарай сапты. Көтөлмәгән хәлдән тертләгән Ҡансығай, үҙе лә һиҙмәҫтән ырылдау тауышы сығарып, туп кеүек өҫкә һикерҙе. Әммә аяҡтары кире ергә тейер-теймәҫтән баштағы ҡурҡыу тойғоһон ғәжәпләнеү алмаштырҙы: унан әллә нисә мәртәбәгә өлкәнерәк кейек үҙе ҡурҡып ҡасты түгелме? Ҡана, тикшереп ҡарайыҡ әле! Һәм көсөк, тауға яртылаш күтәрелгәс, туҡтап: "Был ниндәй йән эйәһе булды әле?" - тигәндәй, артына боролоп ҡарап ултырған ҡуянға сәңкелдәп өрөп ҡуйҙы: "Үәү, үәү!.." Быны ишеткән ҡуян, тауыш хужаһының эт балаһы икәнен абайлап, бер нисә һикереүҙә тауҙы артылды ла күҙҙән юғалды. Әһә, беҙ яңғыҙ, ләкин ике дәһшәтле ҡурҡытыу ҡоралыбыҙ бар: береһе - ырылдау, икенсеһе - өрөү. Улар барҙа бирешмәҫкә була икән.

Үҙ-үҙенә ышаныс тойғоһо бермә-бер артҡан көсөк еҫкәнә-еҫкәнә, һаҡ ҡына баҫып, ҡыуаҡлыҡты тикшереп сыҡты, сөнки тыумыштан һалынған эске аң уны иҫкәртеп торғандай ине: ер йөҙөндәге һәр бер аҙымында хәүеф һағалай! Ысынлап та, инәһенән айырылған ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә нисә хәүеф кисерергә тура килде уға. Бәхеткә күрә, ҡыуаҡлыҡ эсендә башҡа хафаланырлыҡ нәмә юҡ ине. Түңәрәк яһап үҫкән ағаслыҡ әллә ни ҙур түгел, уртаһында кескәй инеше бар. Унан урғып сыҡҡан йылғасыҡ һөҙәк тау итәгенән түбәнгә аға. Көсөк, теле менән сәп-сөп ялаҡлап, һыу эсеп алды. Шишмә һыуы инә һөтө түгел, шулай ҙа, асыҡҡанда ул да ярай.

Күп йөрөп ғәҙәтләнмәгән көсөк талсыҡҡайны, шуға күрә, һыу эсеп туйғас, бер ҡыуаҡ төбөндәге мүк өҫтөнә хәл йыйырға ятты. Барыһына ла күнегергә була, тик бына асығыуға нисек түҙергә? Хужа уны, инәһенән айырып, ниңә бында ташлап китте икән? Ҡансығайҙың бит имгеһе, йәшәгеһе килә!.. Юҡ, былай ятыу эш түгел, берәй сара күрмәй булмай.

Көсөк ҡыуаҡлыҡ эсен тағы бер ҡат байҡап сыҡты. Был юлы уның маҡсаты - ашарға яраҡлы берәй нәмә табыу ине. Тик ни хәтле генә тырышып еҫкәһә лә тәғәм итерлек шәй осраманы. Шулай уҡ ошонда ятып астан харап булырға тура килер микән? Был уйҙан шомланған көсөк йәлләмес итеп шыңшып ҡуйҙы. Ләкин шыңшыуҙан ни фәтүә - уны бында кем ишетһен дә, кем ҡыҙғанһын?!

Шул саҡ көсөктөң һиҙгер танауына ниндәйҙер еҫ килеп һуғылды. Шик юҡ - берәй ризыҡтан тарала был. Еҫенең ҡырҡыулығына ҡарағанда, боҙолғанға оҡшай. Һәр хәлдә, тикшереп ҡарау зыян итмәҫ. Баяғы еҫ уны ҡыуаҡлыҡтан ситтәрәк ятҡан бер ҡош һөлдәһенә алып килде. Бисараның башы юҡ, эсе умырып алынған, тирә-яғы тулы йөн. Күрәһең, бөгәрләнеп ҡатҡан тәпәйҙәре менән ҡанаттары ғына ятып ҡалған был ҡош берәй йыртҡыс ауыҙына эләккән. Ярай, бары менән байрам, бөгөн ризыҡҡа яҙғаны шулдыр. Ошондайыраҡ уйҙарҙан дәртләнгән көсөк табышының тәпәйҙәрен сәйнәргә кереште. Уларҙың тышындағы тиреләре кибеп, тарамышҡа әйләнгән, шулай ҙа, сәйнәгәндә, ниндәйҙер тәм сыға, муртыҡ ҡына һөйәктәрен дә, теш менән онтап, йоторға була. Көсөк бөгөнгө һыйҙы ҡоштоң тупсыу һөйәктәрен мөнйөү, ҡанатындағы эрерәк ҡауырһындарҙың баштарын сәйнәү менән тамамлап ҡуйҙы. Унан һуң, ҙур эш башҡарғандай, ҡәнәғәт төҫтә, эре генә атлап, яңы төйәгенә - ҡыуаҡлыҡ эсенә инеп китте.

Көсөк төндө бик тынысһыҙ үткәрҙе - инәһе менән һаташып сыҡты. Имеш, улар һис айырылмаған, донъялағы иң ҡәҙерле йән эйәһе эргәлә генә ята. Көсөк инәһенең шым ғына шыңшып, ҡойроғон болғап, үҙ янына саҡырғанын ап-асыҡ күрә, хатта һөт еҫен тоя. Ул йоҡо аралаш имсәккә ынтыла, әммә мороно ҡаты нәмәгә төртөлөүҙән уянып, айнып китә. Ысынбарлыҡ иҫенә төшкәс, әсе хәҡиҡәткә әрнепме, кемгәлер рәнйепме, сыйылдап ҡуя ла, йәнә тынғыһыҙ серемгә тала.

* * *

Ҡансығай бынан күп йылдар элек үҙе төн уҙғарған түңәрәк ҡыуаҡлыҡҡа килеп етте. Бында барыһы ла әүәлгесә, уртаһындағы инеше лә шул килеш. Бары тик ағастары бер аҙ бейегәйгән, ә ҡайһы берҙәре ҡороп ауған. Ул саҡта яҙ булғанлыҡтан, тирә-яғы ыуыҙ үлән ине. Әле ҡара көҙ, шуға күрә, ағастар япрағын ҡойған, үләндәр ҡыуарған. Мал-тыуар тапауҙан таҡырланған тау битендә өйкөм-өйкөм ҡылғандар ғына тороп ҡалған. Ул мәлдә Ҡансығай үҙе лә ҡарға менән ҡуяндан өркkән аңра көсөк ине, ә хәҙер күпте күргән, башынан ниҙәр генә кисермәгән ҡарт эт.

Теге ваҡытта ул төйәк иткән ҡыуаҡлыҡ янына мал көтөүе килеп сыҡмаһа, көсөктөң хәле мөшкөл ине. Рәхмәт яҙмышҡа: ул көтөүҙән бер башмаҡты айырып алып, ҡүләгәлә үлән бейегерәк булып ҡалҡынған ҡыуаҡлыҡ яғына әйҙәне. Аяҡ тауышын ишеткән көсөк ағаслыҡ ситенә сыҡты ла, биләмәһен ҡурсаларға була сәңкелдәп өрөп ебәрҙе, аҙағынан, янауының етди икәнен аңғартырға теләп, ырылдап ҡуйҙы. Йәнәһе, шаярма, беҙҙә бер түгел, ике ҡорал!

Башмаҡ, ҡурҡыуҙан бигерәк, ҡыҙыҡһынғанға күрә, туҡтап, "быныһы ниндәй мөғжизә" тигән кеүек, сәңкелдәге сыҡҡан көсөккә теклəп торған арала, ун ике-ун өс йәштәр самаһындағы малай ҡыуаҡлыҡ эргәһенә йүгереп килде.

- Атай, атай! - тип ҡысҡырҙы ул. - Бында бер көсөк йөрөй!

- Ишетәм, - тине атаһы. - Яҡын барма, улым, өрәктер ул. Сарпыуы һуғылыр.

- Өрәк? Ул нимә була һуң?

- Бапаҡ тигәнде икенсе төрлө шулай атайҙар. Был ағаслыҡтың исеме элек-электән "Эйәле ҡыуаҡ". Уның эйәһе кешеләргә төрлө ҡиәфәттә күренә, ти торғайнылар.

Үҫмер ярайһы ныҡыш булып сыҡты:

- Әкиәт! - тип үҙһүҙләнде ул. - Кем һөйләй уны?

- Беҙ бәләкәй саҡта ололар әйтә торғайны.

- Кит, атай! Иҫкелек ҡалдығы бит ул. Беҙҙе мәктәптә шулай тип уҡыталар. И-и, ҡалай бәләкәй, үҙе өрәгәс кенә. Бында нисек килеп сыҡты икән, бахырҡай?

Малай, шулай һөйләнә-һөйләнә, ҡаршылашып маташҡан көсөктө тотоп, ҡулына күтәрҙе, әллә ҡурҡыуҙан, әллә өшөүҙән дер-дер ҡалтыранған кескәй йән эйәһенең башынан, арҡаһынан һыйпаны. Бер аҙҙан улар янына оло көтөүсе килде.

- Кәнтәй икән, - тине ул. - Ҡаҙаҡ әйтмешләй, ҡансыҡ. Шуға ла хужалары аҙаштырып киткәндер, моғайын.

- Бына, исеме лә табылды - Ҡансығай! - тип ҡыуанды малай. - Мин уны өйгә алып ҡайтам. Үҙебеҙҙең эт юғалғас, ҡайҙан көсөк табырға тип йөрөй инем...

Шулай итеп, рәхимһеҙ рәүештә тормош дарьяһына ырғытылған көсөк бер юлы хужалы ла, исемле лә булды. Башта уның биләмәһе яңы хужаларының ихатаһы менән сикләнә ине, һуңынан, үҫә килә кәүҙәгә ҙурая төшкәс, урамға ла сыҡҡылап йөрөй башланы. Хатта ара-тирә Шәфҡәтле малай күҙгә күренеп өлкәнәйгән Ҡансығайҙы үҙе менән көтөүгә лә эйәртеп алып барғыланы.

Өй хужаһы үҙенең улы менән ауыл малын көтә ине. Улар Ҡансығайҙы эйәртеп, ҡырға алып сыҡҡан көндәр көсөк өсөн тотош байрамға әүерелә торғайны. Көтөүҙә күңелле: төрлө ҡыр йәнлектәре ҡалдырып киткән эҙҙәрҙе еҫкәп, уларҙың юлын ҡыуаһың. Унан тыш, Шәфҡәтле малайҙың һөсләтеүе буйынса, аяҡ аҫтындағы үлән менән мөрхәтһенмәйенсә, колхоз баҫыуындағы игенгә төшөргә ҡырсынған ҡайһы бер бәйелһеҙ һыйырҙарҙы ҡайырышаһың. Ә туйған мал көн эҫеһендә саңдауға ятҡас, танһығың ҡанғансы сысҡан, йомран ояларын ҡаҙаһың. Ҡыҫҡаһы, хөрриәт!

Үкенескә күрә, ундай байрамдар һирәгерәк тәтей. Күпселек осраҡта хужалар, Ҡансығайҙы үҙҙәре менән алмайынса, бәйләп китәләр ине. Бындай көндәрҙә көсөк көтөүселәрҙе шыңшыйшыңшый оҙатып ҡала, уларҙың ҡайтҡанын зарығып көтә. Ул бигерәк тә Шәфҡәтле малайға ныҡ эйәләшкәйне. Ауыл малы көтөүҙән ҡайтып, хужалар ҡапҡанан күренеү менән, Ҡансығай ни эшләргә белмәй: ҡыуанысынан сыйнай, өрә, ҡойроғон болғап сәләмләй, үҙен иркәләргә янына сүгәләгән Шәфҡәтле малайҙың ҡулдарын ялай, һағыныуын белдереп, уға һырпалана.

Йәй уртаһының ғәжәп сыуаҡ, матур бер иртәһендә һәүетемсә йәшәп ятҡан ауылда ығы-зығы ҡупты. Бер нисә өй алдындағы парлап егелгән аттар эргәһендә халыҡ ҡайнаша - олоһо ла, кесеһе лә шунда. Кешеләрҙең зыу килеүенән тирә-яҡ яңғырап тора, ҡысҡырып һөйләшкән тауыштарға юҡ-юҡта илау өндәре килеп ҡушыла. Ҡансығайҙың аңлауы буйынса, кемдәрҙелер ҡайҙалыр оҙаталар. Әһә, китеүселәрҙең барыһы ла ир-ат икән, ана, улар оҙатыусылар менән ҡосаҡлашып хушлашҡандан һуң, арбаларға ултыраша башланы. Шәфҡәтле малайҙың атаһы ла шулар араһ-

ында, тимәк, ул да китә. Кемдер гармун уйнап ебәрҙе, юлға сығыусыларҙың күмәкләшеп йырлаған һағышлы көйө аҫтында аттар бер-бер артлы ҡуҙғалып киттеләр. Күпселеген ҡатын-ҡыҙ менән бала-саға тәшкил иткән төркөм, арбалағыларҙы ауыл осона ҡәҙәр оҙатып ҡалыр өсөн, ылауҙар артынан эйәрҙе. Бына, аттар юртыуға күсте, улар артынан иламһыраған тауыш менән ҡысҡырған һаубуллашыу ауаздары яңғыраны. Ҡул болғай-болғай алыҫлаша барған аталарынан айырылғыһы килмәгән бер нисә бала ылауҙар артынан йүгерҙе. Улар араһында Шәфҡәтле малай ҙа бар ине.

Был яманһыу тамаша Ҡансығайға үҙен инәһенән айырған хәйерһеҙ көндө хәтерләтте. Бына, Ҡараңғы сырайлы хужа уны елкәһенән эләктереп ала ла, тоҡ эсенә ырғыта. Инәһе йән әрнеткес итеп шыңшый. Оҙатыусылар араһындағы бер ҡатындың сеңләп илаған тауышы теге ваҡытта Ҡансығайҙың инәһе шыңшыған ауазға оҡшаған. Тик уны бит инәһенән Ҡараңғы сырайлы хужа айырҙы, ә кешеләрҙе бер-береһен ташлап китергә нимә мәжбүр итә?

Ир-егеттәр ылау-ылау булып ҡайҙалыр китеп олаҡҡандан һуң, Шәфҡәтле малай көтөүҙе бер үҙе генә көттө. Ҡансығайҙың ҡыуанысына ҡаршы, йәш хужа элекке кеүек уны бәйләп китмәй, көн һайын үҙе менән алып йөрөй башланы. Инде көтөү тәртиптәрен тамам үҙләштергән көсөк уға бар хәленсә ярҙам итергә тырышты. Кәүҙәгә буйтым өлкәнәйгән Ҡансығай, хужаһының һөсләтеүен дә көтөп тормайынса, ҡайһы бер холоҡһоҙ һыйырҙарҙы игенгә төшөрмәй абалай, бик тә баш бирергә теләмәһәләр, хатта уларҙың ҡойроҡтарына барып йәбешә.

Ләкин мал көтөүҙең ысын хитлығы көҙ еткәс башланды. Үләне утланып бөткән көтөүлектә мал тормай, төрлө яҡҡа таралышып, баштары һуҡҡан яҡҡа ҡасыу яғын ҡарай. Һай-һайтлап сыбыртҡы шартлатыуынды, абалап өрөүендә бар тип тә белмәгән көтөүҙе өйөрөп алыуы үҙе бер михнәт. Үлән эҙләп темеҫкенгән мал-тыуарға аяҙ көндә ҡайһылай ҙа баш булырға мөмкин, ә бына оҙайлы ямғырҙар башланһа, эш бөтөнләй харап. Ундай саҡта бигерәк тә һарыҡтар ыҙалата: бер өйөргә тупланып, битләп яуған ямғырға арттарын ҡуйып, баштарын эйеп ала ла, китә лә китә. Уларҙы ҡайырып та, туҡтатып та булмай. Һарыҡтар артынан һыйырҙар ҡуҙғала. Быңдай мәлдә манма һыу булып көтөү артынан эйәреп йөрөргә генә ҡала.

Көҙҙөң үҙенсә йәмле, салт аяҙ көндәре лә булғылай. Болот әҫәре күренмәгән күк йөҙөнән һүрәнләнә төшкән ҡояштың тандыр нурҙары һибелә. Ғәжәп тын һәм йылы һауа йәйҙе хәтерләтә, әммә ҡыуарған үләндәр менән ағастарҙан бер-бер артлы ҡойолған япраҡтар быныӊ көҙ миҙгеле икәнен аңғарта. Ҡош тауыштарының ишетелмәүе лә, көн нурында ялт-йолт итеп осҡан үрмәксе ауҙары ла шуны иҫбатлай.

Ошондай көндәрҙең береһендә Шәфҡәтле малайҙың ергә ҡапланып түгелеп илағанын Ҡансығай яҡшы хәтерләй. Иртәнсәктән болоҡһоу күренгән йәш хужа башта һыр бирмәй йөрөнө. Бер аҙҙан көтөүҙе игене урып алынған баҫыуҙағы ҡамыл төбөнә төшөрҙө лә тау итәгендәге бүтәгә өҫтөнә ултырҙы. Уның төҫө ниңәлер бойоҡ, ҡарашы уйсан ине. Һуңынан Шәфҡәтле малай, бишмәт кеҫәһенән икегә бөкләнгән ҡағыҙ сығарып, уға текләп ултырҙы, ултырҙы ла, йөҙтүбән ятып һыңҡылдап иларға тотондо. Юҡ-юҡта сеңләүгә тартым инрәү менән аралашып киткән һыҡтау байтаҡ дауам итте. Был эс бошорғос ауаздар Ҡансығайға теге хәйерһеҙ көндө хәтерләтте - ул да тоҡ эсендә ошоға оҡшаш өндәр сығарып шыңшып барғайны. Көсөктөң һиҙгер күңеле яңылышырға тейеш түгел: быңдай зарлы тауыш төҙәтеп булмаҫлыҡ фажиғәгә тарыған заттың ғына күкрәгенән сыға.

**(Дауамы бар).**

*МАТУР ХӘТИРӘ*

# ТАПҠЫР ЯУАП



**Сәғит Агиш көнөн нәшриәттән башлар ине. Эш урындарыбыҙға ултырып та өлгөрмәйбеҙ, Сәғит ағайыбыҙ редакцияға "тып" итеп килеп тә инә. Өҫтөндәге пальтоһын, яҙ, көҙ айҙары булһа, плащын сисеп, ҡулындағы таяғын берәй буш өҫтәлгә ташлай ҙа, йә өйөндә, йә урамда булған берәй хәл-ваҡиғаны һөйләй-һөйләй бүлмәлә әҙерәк йөрөп ала. Шул арала "кемде мөхәррирләп" ултырыуҙы һорашып та ҡуя.**

Бер саҡ: "Йә, кемдең йөнөн йолҡаһың?" - тип һорағас, мин шағирҙың исемен, уның һайланма шиғыр-поэмаларын әҙерләүем хаҡында әйттем. "О-о-о! - тине Сәғит ағай, - уны сығарырға кәрәк, кәк же, ул поэзияның закондарын ныҡ өйрәнгән кеше. Шуның буйынса ғына яҙа... - Бер аҙ уйланып ултырғас, өҫтәп ҡуйҙы: - Әҙәбиәттә шулар күбәйеп бара әле..." Ошо көнгәсә, был авторҙың әйберҙәре баҫылып сыҡҡан, уҡыған һайын, Сәғит Агиштың һүҙҙәрен иҫкә төшөрәм: һүҙ араһында ғына әйтелгән ниндәй ғәҙел баһа, дөрөҫ тәнҡит булған!

Яҙыусы менән булған тағы бер хәл иҫкә төшә. Шулай, ғәҙәтенсә, иртә менән килеп, бер ҡәләмдәштең өҫтәленә пальтоһын, таяғын һалды ла, нәмәлер баҫтырырға тип, машинисткалар бүлмәһенә йүнәлде. Сәғит ағайҙың сығып китеүенән файҙаланып, ҡәләмдәшебеҙ этләшергә булды: Сәғит Агиштың пальтоһының эске кеҫәһенә Мао-Цзэдундың башҡортса матур итеп сығарылған шиғырҙар йыйынтығын тығып ҡуйҙы. Бер аҙҙан Сәғит ағай беҙҙең бүлмәгә яңынан килеп, пальтоһын кейеп, таяғын алып, һөйләнә-һөйләнә сығып китте. Ҡуйынындағы китапты (күләме бәләкәй ине) һиҙмәне, ахырыһы. Теге бергә эшләгән иптәш Мао-Цзэдун китабын Сәғит ағай ҡуйынына юҡтан ғына тыҡманы, әлбиттә: ул саҡта Ҡытай халыҡ республикаһы менән СССР-ҙың нык боҙолошҡан, хатта дошманлашҡан сағы ине.

Бер нисә көн үтеүгә редакцияға тағы ла Сәғит Агиш килеп инде. "Бына обкомдан, Миҙхәт Шакировтың үҙенән киләм әле, - тип хәбәр һалды был. Беҙҙең ҡолаҡтар ҡарп итеп ҡалды: Өлкә Комитеттың беренсе секретары янында булған бит! - Саҡыртҡас, унда барып инеүем булды, - тип һүҙен дауам итте Сәғит ағайыбыҙ, - ике яҡтан ике милиционер эләктереп тә алды. Береһе ҡуйынымдан Мао-Цзэдундың китабын тартып сығарҙы. Шакировтың үҙенә үк алып киттеләр. Ул: "Нишләп һин, Сәғит ағай, тыйылған әҙәбиәт уҡып йөрөйһөң, ул китапты уҡырға ярамағанлығын белмәйһеңме, ҡайҙан алдың, кем бирҙе уны?" - тип һорай. Аптыраным, бер ни әйтә алманым... - Шунан Сәғит ағай әлеге китапты уның пальто кеҫәһенә тыҡҡан иптәшкә бик яҡын килеп, эйелеп: - Һин белмәйһеңме, быны кем эшләне икән?" - тип әйтеп ҡуйҙы. Ҡәләмдәшкә, башын эйеп, ҡыҙарынып ултырыуҙан башҡаса сара ҡалманы.

Әлбиттә, Сәғит Агиш һөйләгәнсә, Өлкә Комитетҡа саҡыртыу, яҙыусыны тентеү хәлдәре ғәмәлдә булмаған. Был урынһыҙ шаярыуға бик тапҡыр табылған шул уҡ шаярыу аша әсе көлөү, уҫал һәм тапҡыр яуап ине.

Атаҡлы яҙыусы, талантлы сатирик Сәғит Агиштың быңдай мәргәнлеге, аҡыллы шаянлығы тормошта әҙ булманы. Ул ҡалдырған әҫәрҙәр тураһында һөйләп тораһы ла түгел.

**Риф МИФТАХОВ.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ МЕНӘН ДӘ...

## ҡурай аша аралашырға ине

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**(Башы 1-се биттә).**

Санкт-Петербург ҡалаһында барлыҡҡа килеп, хәҙер инде бөтә донъяға билдәле остаздарыбыҙ - "Терем-квартет" ансамбле егеттәре ул концертта беҙгә үҙҙәре менән бер композиция уйнарға тәҡдим итте һәм беҙ билдәле квартет менән бергә Астор Пьяцолланың "Либертанго"һын башҡарҙыҡ. Ә "Ҡурайсы" төркөмөбөҙ менән мәшһүр "Сыңрау торна"ны уйнаныҡ. Тиҫтәнән ашыу коллектив сығышы араһында шулай итеп ҡурай моңон да яңғырата алдыҡ. Форумда ҡатнашыусылар беҙҙең сығышты бик оҡшатты. Концерт бөткәс, Валентина Матвиенко үҙе беҙҙең эргәбеҙгә килеп, милли инструментыбыҙ менән ҡыҙыҡһынды. "Ошо көпшәнән шул тиклем моң ағыламы?" тип, ҡурайҙы тотоп, әйләндереп-әйләндереп ҡараны һәм беҙҙең сығышыбыҙҙы айырыуса ҙур иғтибар менән тыңлауы тураһында әйтте.

Эйе, сит яҡтарҙа беҙҙең күп һанлы сығыштарыбыҙҙан сығып фекер йөрөткәндә, ҡурайға ҡарата Рәсәй элитаһында ла ҡыҙыҡһыныу арта бара. Шул уҡ ваҡытта борсоуға һалған ҡайһы бер мәсьәләләр ҙә бар. Беҙгә күп тапҡырҙар республикабыҙ ауылдарында сығыш яһарға тура килә. Бөгөнгө көндә ҡурайҙы ҙур сәхнәләрҙә танный ҙар, юғары даирәләрҙә уның менән ҡыҙыҡһыналар, әммә үҙебеҙҙең арала, ғаиләләр, туғандар, ауылдар кимәлендә ҡурай ниңәлер үҙ позицияһын бирә башланы. Йәғни, сәхнәгә күтәрелһә лә, халҡыбыҙ араһында һирәк уйнала башланы ҡурай. Милли музыка ҡоралыбыҙ сәхнә инструменты ғына булып тойола башланы миңә. Шуға күрә беҙ, "Ҡурайсы" төркөмө, күсереп йөрөтмәле сәхнә, төрлө кәрәкле музыкаль ҡоролмалар һатып алып, республикабыҙ ауылдарында бушлай концерттар ойоштороорға тигән ниәттә йөрөйбөҙ. Былтыр йәй айҙарында беҙ егеттәр менән ҡайһы бер башҡорт ауылдарында ҡурай моңо кисәләре ойоштороҡ та инде. Был эште быйыл да, артабанғы йылдарҙа ла дауам итергә теләгебеҙ ҙур. Маҡсатыбыҙ - ҡурайыбыҙға, моңобоҙға, туған телебеҙгә ихтирам, һөйөү тойғоһо тәрбиәләү. Халҡыбыҙ менән, бөгөнгө йәштәребеҙ менән ҡурай концерттары форматында аралашҡыбыҙ килә. Аҡыллы, матур, итәғәтле ҡыҙҙарыбыҙҙың сит егеттәр ҡармағына эләгеүенә, ә типһә тимер өҙөрҙәй егеттәребеҙҙең еңел-елпе холоҡло сит ҡыҙҙар ауынан ысҡына алмауына ла юл ҡуймаҫҡа кәрәклеге тураһында йәштәргә аңлатҡыбыҙ килә. Күңел тыныслығы, йән һиллеге табыу юлы булған иман барлығы хаҡында ла уларҙың хәтеренә төшөргө килә.

Беҙҙең мәшһүр уҡытыусыбыҙ Әҙһәм Динислам улы Исҡужиндың (ауыр тупрағы еңел булһын): "Балаларым, ҡурай уйнағыҙ. Һеҙҙең кемегеҙҙер президент, берегеҙ юрист, кемдер иҡтисадсы булыр. Кем булһағыҙ ҙа, бер ҡулығыҙҙа ҡурай булһа, тормошоғоҙ һәр ваҡыт матур барасаҡ", - тип әйткәне хәтеремдә. Ул беҙҙә халҡыбыҙға ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләргә тырышты. Кеше үҙ халҡына ихтирамлы булһа, икенсе халыҡтарға ла ихтирам менән ҡарауы тураһында инде үҙемдең тәжрибәмдән сығып та әйтә алам. Егеттәр, ағайҙар, ҡустылар, ҡурай уйнайыҡ, ҡурай уйнаған кеше бер ваҡытта ла яңылыш ҡына ла үҙ халҡына хыянат итмәйәсәк. Сөнки ҡурай моңо аша һеңгән башҡорт рухы уның күңелен яҙыҡ уйҙарҙан да һаҡлай.

**✓ Мылтыҡты ишеккә тоҫҡап, "Йә, инһәң ин! " тип ҡысҡырып ебәрҙем. Ул ғәләмәт инмәне лә, башҡа бимазалап та йөрөмәне. Йоҡо осто, тән буйы мылтыҡты ҡулдан ысҡындырмай, ултырып сыҡтым.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАҒЫҘ СӘЙНӘҮ...

## хәтерҙе нығыта

■ Оксфорд университеты белгестәре итле ризыҡтарҙан баш тартыу йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары хәүефен 32 процентҡа түбәнәйтә, тип раҫлай. Ғалимдар 11 йыл буйына Англия һәм Шотландияла йәшәүсе 44 мең ярым кешене тикшергән, уларҙың 15 меңдән ашыуы вегетариан булған. Ошо ваҡыт эсендә 169 ҡатнашыусы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән үлгән, тағы ла меңдән ашыуы ошо ауырыу менән табиптарға мөрәжәғәт иткән. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, улар барыһы ла ит, балыҡты йыш ашаған. "Беҙ быныӊ менән итле ризыҡтар ашауҙан бөтөнләй тыйылырға ҡушмайбыҙ, бары тик туҡланыуҙың сәләмәтлек торошона йоғонто барлығын ғына иҫегеҙгә төшөрәбеҙ". Шулай ҙа, табиптар фекеренсә, ит ашамау һөҙөмтәһендә артериаль ҡан баҫымы һәм ҡандағы холестерин кимәле төшә, шулай уҡ тән массаһы нормаға килә, ә был факторҙар йөрәк сәләмәтлеге менән бәйле.

■ Һуңғы осорҙа сәләмәт йәшәү рәүешен өҫтөн ҡуйыусылар һаны артҡан. Әммә психологтар сәләмәт туҡланыу менән бәйле булған орторексия сиренең артыуын да билдәләй. Баҡтиһәң, ҡамыр ашары, май, сүпрәле аҙыҡтар, кофеиндан тулыһынса баш тартыу кешене бәхетһеҙ яһай икән. Психологтар әйтеүенсә, туйғансы ашамау һәр ваҡыт депрессияға алып килә, хроник сирҙәр киҫкенләшә.

■ Японияның Милли радиологик фәндәр институты белгестәре раҫлауынса, һағыҙ сәйнәү уйлау процесын әүҙемләштерә, реакцияның тиҙлеген күтәрә. "Медицина мәғлүмәттәре селтәре" хәбәр итеүенсә, ғалимдар үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, һағыҙ сәйнәргә яратыусыларҙа был сифаттар 10 процентҡа юғарыраҡ булып сыҡҡан. Әммә улар һандар һәм хәрефтәр бағанаһын насарыраҡ хәтерҙә ҡалдырған. Йәғни, һағыҙ сәйнәү ҡыҫҡа ваҡытлы хәтерҙе насарайта, ә оҙайлыһын әүҙемләштерә, тип аныҡлай ғалимдар.

■ Билдәле Америка кардиологы Уильям Дэвис әйтеүенсә, бөгөнгө икмәк ризыҡтары кеше организмына бер ниндәй ҙә файҙа килтермәй. Аҡыл ҡеүәһенең түбәнәйеүе тап икмәк ризыҡтарын күп ҡулланыу менән бәйле булыуы ихтимал, ти ғалим. Сөнки бойҙайҙың заманса сорттарында генетик яҡтан үҙгәртелгән аҡһым бар, ул даими арыусанлыҡ һәм артыҡ ауырлыҡ сәбәпсеһе булып тора.

■ Ғалимдар фекеренсә, анар (гранат) емеше йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай. Яңыраҡ ғалимдар уның тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған: ул ДНК ҡартайыу процесын аҡрынайта. Тикшеренеүҙәр 60 кешенән торған төркөмдә үтә. Улар ай дауамында анар экстракты капсулаларын ҡабул итә. Һөҙөмтәлә, баш мейеһе, мускулдар, бауыр, бөйөр эшмәкәрлеге, тире ҡартайыуы менән маркерҙың ярайһы уҡ түбәнәйеүе асыҡланған. Белгестәр был күҙәнәктәрҙә ДНК-ның әселәнеүе көмәгеү менән аңлата. Бынан тыш, А, С, Е, витаминдары, тимер һәм ирекле радикалдар эшен нейтралләштереүсе антиоксиданттарға бай.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ДОНЪЯҺЫ

# АЛПАМЫШАЛАР ЭҘЕ...

## Бөрйәндә лә һаҡлана



### Боронғо цивилизациялар тарихы

Ер йөҙөндә ҡасандыр алға киткән цивилизация булғанына инанған ғалим- академиктар, ғөмүмән, кешеләр күп. Әммә рәсми тарих фәне әлегә уны танымай. Таныған осраҡта, кешелек тарихын яңынан яҙырға тура киләсәк. Атлантҭар цивилизацияһын иҫбатлаған матди сығанаҡтар етерлек. Ливандағы боронғо Баальбек ҡалаһындағы Юпитер храмы, уның нигеҙендәге ауырлыҡтары 800-1000 тоннаға еткән монолит таш блоктар. Был блоктарҙы хәҙерге заман техникаһы менән дә ҡубырлатып булмай. 1990 йылдар башында океан төбөндә табылған Бермуд өсмөйөшө уртаһындағы билдәһеҙ материалдан төҙөлгән гигант пирамидалар. Был ике пирамида Хеопс пирамидаһынан өс тапҡырға ҙурыраҡ. Ҡайһы бер таш блоктарының ауырлығы 200 тоннаға еткән, миллионлап тигеҙ итеп ҡырылған таштарҙан төҙөлгән Египет пирамидалары. Ул ҡоролмаларҙы баҡыр, бронза ҡырғыстар менән ҡоралланған ҡол, крәҫтиәндәр төҙөй алмағанлығы иҫбатланған һәм көн кеүек асыҡ. Тибетта изге Ҡайлас тауы тирәһендәге мөхәббәт пирамидалар комплексы һ.б.

Гиганттар расаһы йәшәгән, ә ни өсөн һөйәктәре табылмай, бер музейҙа ла юҡ, тигән урынлы һорау тыуа. Үткән быуаттар хроникаһында, матбуғатында планетаның төрлө ҡитғаларында гигант кеше һөйәктәре табылыуы тураһында мәғлүмәттәр етерлек. Ни сәбәп менәндер, был ҡиммәтле табылдыҡтар һаҡланмаған.

1930 йылдар эсендә НКВД ойошторған йәшерен экспедициялар Кавказда, шулай уҡ СССР-ҙың башҡа төбәктәрендә гигант кеше ҡәберҙәрен таҙартлар. Яңы социалистик йәмғиәттә, яңы раса кешеләрен булдырыу өҫтөндә фәнни-тикшеренеү эштәре өсөн кәрәк булғандыр был, тигән фараз да бар. Икенсенән, атланттар расаһын рәсми рәүештә таныу, марксизм-ленинизмдың нигеҙенә әйләнгән Дарвиндың эволюция теорияһын шик аҫтына ҡуйыр ине.

Гиперборея, Атлантида, Лимурия, Шамбала - был атамаларҙы ишетмәгән кеше һирәктер. Үрҙә һөйләшелгән серле алпамышаларҙың ошо юҡҡа сыҡҡан цивилизацияларҙың мөғжизә менән иҫән ҡалған, ҡырағайлашҡан нәҫелдәре икәненә шик юҡ.

Борон-борондан батша, хәлиф, император, диктаторҙар был цивилизацияларҙан ҡалған йәшерен белемде эҙләп таба алмаған. Тапҡан осраҡта, ул белем-хазина кешелек йәмғиәте үҫешендә радикаль үҙгәрештәр индереп, глобаль проблемаларҙы сисергә ярҙам итер ине, тип ышаныу килә.

### Рәсәйҙә лә өйрәнмәйҙәр

Үкенескә ҡаршы, Апамыша, ҡар кешеләре феноменын Рәсәйҙә әлегә етди өйрәнгән фән тармағы юҡ. 1958 йылдың ғинуарында СССР Фәндәр академияһының тарих һәм философия фәндәре докторы Б. Поршнев инициативаһы менән ҡар кешеһен өйрәнеү буйынса комиссия төҙелә. Шул уҡ йылда Фәндәр академияһы ҡар кешеһен табыу маҡсатында Памир тауҙарына фән эшмәкәрҙәренән торған экспедиция ойоштора. Баштан уҡ ғалимдарҙа экспедицияның маршрутын билдәләү һәм ойоштороу эштәре буйынса фекер айырымлыҡтары тыуа. Поршнев экспедицияла ҡатнашыуҙан баш тарта. Экспедиция көтөлгән һөҙөмтә килтермәй. Фәндәр академияһында ҡар кешеһен өйрәнеү онотолоп ҡала.

Цивилизация ҡаҙаныштары тарафынан иркәләтелгән ерҙә үрҙә телгә алынған ҡәрҙәштәребеҙҙең барлығына ла ышаныуы ҡыйын, әлбиттә. Ә инде уларҙың йәшәү рәүешен белмәгәнлектән, һәр кемдә урынлы һорау тыуырға мөмкин: ҡаты Урал ҡышын, нимә менән туҡланып ҡайҙа үткәрәләр? Ни өсөн ҡарҙа эҙҙәре күренмәй? Нишләп быға тиклем береһе лә тотолмаған?

Ҡыш көнө улар күсенеү территорияларын сикләп, кеше йөрөмәгән төбәктә бикләнеүҙәре ихтимал. Ҡайҙа йәшәүҙәренә килгәндә, Урал тауҙары ҡыуыштарға бай. Мәмерйә эсендә йәйен дә, ҡышын да даими +4 градус самаһы температура, туңып үлергә мөмкинлек юҡ. Аҙыҡ мәсьәләһенә килгәндә, күп тереклектәр ҡышҡа аҙыҡ запасы туплай, ҡар кешеһенең дә аҙыҡ туплауы ихтимал. "Аргументы и факты" гәзите Африкала һалҡын төшкән саҡта ҡайһы бер йәнлектәр, һөйрәлеүселәр кеүек, тән температураһы түбәнәйеп, йоҡо хәләндә ҡалыуға һәләтле пигмей ҡәбиләһе хаҡында яҙғайны. Шуныһы ҡыҙыҡ: был ҡәбиләнең тотеме миллион йылдар элек үлеп юҡҡа сыҡҡан тиранозавр һыны. Донъя мөғжизәләргә бай. Тәбиғәт алпамыша, ҡар кешеләренә лә был һәләтте биреүе ихтимал. Ә был саҡта аҙыҡ мәсьәләһе юҡҡа сыға.

Һиндостанда, Ҡытайҙа, Непалда мәмерйәләрҙә сомати, йәғни, үҙаллы консервация йәки оҙайлы медитация хәлендә меңдәрсә, бәлки, миллион йылдарға ҡатып ҡалған тере алып-атланттарҙың, шулай уҡ беҙҙең цивилизацияның ябай кешеләренең ултырыуы билдәле. Бындай йәшерен сомати мәмерйәләр Себерҙә лә бар, тип иҫәпләйҙәр. Себер яҡын ғына, тимәк, Уралда ла булыуы мөмкин. Юлда машина менән көс һынашып йөрөгән атланттың да ваҡытлыса сомати хәленән сығып йөрөүе ихтимал. Быныһы инде икенсе һөйләшеү.

Ни өсөн быға тиклем тотолмай йәшәп килеүҙәренә ҡағылышлы, А. Македонскийҙың һинд аҡыл эйәләре менән әңгәмәһе иҫкә төшә.

- Ер йөҙөндә иң хәйләкәр хайуан нимә?

- Быға тиклем кеше ҡулына эләкмәгәне, - тип яуап бирә аҡһаҡалдар.

Был хәйләкәр йән эйәһе интеллект яғынан башҡа кейектән юғары булған ҡар кешеһе булыуы мөмкин. Тибет монахтары, йети кешеһе мейеһенең эшмәкәрлеген дә туҡтатыуға һәләтле, тип иҫәпләй.

Бынан егерме йыл элек бер һунарсы егет урманда, бәләкәй мунсалай ғына һунарсы өйөндә йоҡларға ҡалыуын һөйләгәйне. "Йоҡларға ятҡас та тыштан стена аша кемдеңдер көслө тәьҫир иткәнен тойҙом. Аяҡ-ҡулдар ҡатып ҡалды, ҡыбырлатып булмай, аң томалана башланы. Кемдер бик ҙур көс менән ишеккә килтереп һуҡты. Өй һелкенеп ҡуйҙы. Шунда ғына тертләп, ҡыбырлап киттем. Мылтыҡты ишеккә тоҫҡап, "Йә, инһәң ин! " тип ҡысҡырып ебәрҙем. Ул ғәләмәт инмәне лә, башҡа бимазалап та йөрөмәне. Йоҡо осто, тән буйы мылтыҡты ҡулдан ысҡындырмай, ултырып сыҡтым. Был ғифриттың "урман эйәһе" - алпамыша ла булыуы мөмкин.

Криптозоологтар күҙәтеүҙәр һөҙөмтәһендә ҡар кешеһенең ҡурҡыныс тыуған саҡта күҙҙән юғалыу һәләтенә эйә икәнлеген аса. Тибетта, Памирҙа ҡар кешеләрен эҙәрлекләгәндә улар көтмәгәндә күҙҙән юғала, юҡҡа сыға. Профессор Б. Поршнев иҫәпләүенсә, ҡар кешеһе юғалмай, ә суггестия хәләнә керә, йәғни башҡаларҙың аңына йоғонто яһау һөҙөмтәһендә күренмәй. Әйткәндәй, күҙгә күренмәү һәләтенә доға ярҙамында ҡайһы бер көслө дин әһелдәре лә эйә.

Ҡар кешеләренең ҡайҙан килеп сығыуҙарына килгәндә, улар неандерталецтар булыуы ихтимал. Ҡасандыр ҡырағайлашҡан кеше - маугли төркөмө булыуы ла мөмкин. Кемдәр булыуына ҡарамаҫтан, уларҙың бөтөнләйгә юҡҡа сығыу ҡурҡынысы аҫтында икәнлектәре асыҡ. Шунлыҡтан, был феноменды өйрәнеү үтә ныҡ һаҡлыҡ, түҙемлек һәм энтузиазм талап итә.

**Заһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**

**(Аҙағы. Башы 5-6-сы һандарҙа).**

ҠЫҘЫЫЫ-ЫҠ!

# МАРСҠА ОСОУСЫ...

## кире ҡайтмаясаҡ

Голландияның Mars One ойошмаһы 2023 йылда Марс планетаһындағы колонияһына нигеҙ һалырға итә. Ошо проектты тормошҡа ашырыу өсөн ойошма уҙ ирке менән Марсҡа китергә әҙер кешеләрҙе әҙерлек үтергә саҡыра.

Кандидаттарға ҡаты талап ҡуйылмаған. Марста йәшәүсе тәүге кешеләр исемлегенә инеү өсөн армияла хеҙмәт итеү, самолет менән идара итә белеү йәки ниндәйҙер ғилми дәрәжәгә эйә булыу кәрәкмәй. Шул уҡ ваҡытта кандидаттар аҡыллы, психик яҡтан тотороҡло, яҡшы физик формала булырға тейеш. Шулай уҡ һайлап алыусылар кандидаттарҙың рух күтәренкелегенә, маҡсатлы булыуына, төрлө шарттарға яраҡлаша белеүенә, яныңдағы кешеләргә ышаныс менән ҡарай алыуына һәм ижадҡа ынтылыусанлығына ла иғтибар итәсәк. Кандидаттар һайлап алыу 2013 йылдың тәүге яртыһында башланасаҡ, тип көтөлә. Проектта 18 йәше тулған һәр кем ҡатнашырға хоҡуҡлы. Һайлап алыу барышында проектҡа әләгеүселәр ғүмеренең артабанғы һигеҙ йылын икенсе планетала йәшәү өсөн профессиональ әҙерләнеүгә йүнәлтәсәк.

Марсҡа осасаҡ һәм ҡыҙыл планетаға тәү баҫасаҡ кешене телевизор ҡараусылар һайлаясаҡ, тип көтөлә. Әйткәндәй, Марсҡа осҡан тәүге дүрт кеше өсөн кире ергә ҡайтыу мөмкинлеге булмаясаҡ һәм улар ҡыҙыл планетала ғүмеренең ахырына тиклем ҡаласаҡ.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

# ХӘРЕФ-ӨНДӘР АТАМАҺЫ ҺӘМ...

## һандар хикмәте

20 һаны хәрефенең исеме "каф" башҡортса кәфкә - "к"-гә тура килә. Алфавитта ун беренсе хәреф, шулай итеп, был яҡтан да (10+1=2) "бэт" - өй, йортто белдерә булып сыға. Каф хәрефе "ус" (ладонь) тигәнде аңлата. Ус, тән ағзаһы булараҡ, мөһим мәғәнәле, сөнки ус аша нурлы, башҡорттарҙа әйтеп йөрөтөлгәнсә, ҡотло көс, энергия бирелә. Хәҙерге заманда был энергияны күберәк Ци тип атап йөрөтәләр. Пневма, Онд, Одиль, Нивр - был энергияның боронғо атамалары. Иисус - Ғайса бәйғәмбәр ошо энергия ярҙамында ҡул менән һылап, ҡул һалып кешеләрҙе дауалаған. Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә был көскә эйә булған, беҙҙең әүлиә, имселәребеҙ, суфый хәҙрәттәребеҙ ҙә ошо энергия менән эш иткән.

Эзотерик яҡтан "каф", "к" хәрефе "көс" тигәнде аңлата. Астрологик яҡтан Арыҫлан йондоҙлоғо менән бәйле. Ошо Арыҫлан исеме менән бәйле үҙебеҙҙең ғаилә тарихына саҡ ҡына туҡталып китәм. Олатайым Мостаҡ мулла (белеме өсөн мулла тип йөрөткәндәр) ямғыр саҡырып яуҙырырға, кәрәкһә, уны туҡтатырға һәләтле булған. Был осраҡта ул ҡыу ат (йылҡы) башын ҡулланған, был йоланы башҡарыр өсөн магнит ташы ла булған. Ямғырҙар яумай башлаһа, ул ҡыу ат башын һыуға (йылғаның ул ере бәләкәс кенә ҡаҙан, ҡойоно хәтерләтә ине) һалып ҡуя торған булған. Ниндәй доғалар уҡығанын бәрәү ҙә белмәй. Ямғыр оҙаҡҡа китә торған булһа, йылғанан ҡыу башты барып алған, ямғыр шунда уҡ туҡтай торған булған. Бына ошо йола башҡарылған йылғаның исеме Арыҫлан йылға, беҙ уның һыуын эсеп үҫтек. Күрәһең, йылғаның һыу структураһы йола башҡарыуға ярҙам итеүсе көскә эйә. Әммә бындай көскә барлыҡ йылғалар ҙа эйә түгел. Улар араһында дарыулыһы ла, ағыулыһы ла бар. Ауылдағы Ҡоҙаш йылғаһы (Ишембай районы, Кинйәбулат ауылы) шундай яман көскә эйә булып, ул йылғанан кискә ҡарай, бигерәк тә эңер ваҡытында һыу алыу, йыуыныу тыйыла ине, сөнки тәүлектең ваҡытына ҡарап, һыуҙың структураһы үҙгәрә. Өләсәйем ошо баҡса арттарынан ағып ятҡан йылғала киске ваҡытта йыуынып, дөм-һуҡыр булып ҡалған. Тәбиғәттә лә, кешеләр араһындағы кеүек, изгелек тә, яуызлыҡ та бар. Быларҙың барыһын да яҙыуым ер-һыу атамалары аша уларҙың көс-сихәттәренә лә иғтибарлы булайыҡ, изгеләренең ҡөҙрәтле көсөн һаҡлайыҡ, тип әйтеүем һәм Арыҫлан йондоҙлоғо бәйләнешенә иғтибарҙы йүнәлтеүем генә. 20 һанының, йәғни "каф" хәрефенең тағы бер мәғәнәһе бар - "мәжбүр итеү". Ошонан сығып ҡарағанда, беҙ теләйбеҙме, юҡмы, яңы үҙгәрештәргә буйһонорға, яңы донъя ағышына бирелергә, яңы үрҙәр баҫҡыысына баҫырға мәжбүр буласаҡбыҙ.

Баҫҡыс үре ниндәй бейеклекте һайлаясағын яңы тыуған 2013 йылдың һанынан ҡарап үтәйек. Тыуған йылдың дөйөм һаны 2+0+1+3=6. Алты һаны ла йоп, тағы ла ҡатын-ҡыҙ принцибы, етмәһә, матурлыҡ һәм гармонияны кәүҙәләндереүсе Венера планетаһының һаны булып иҫәпләнә. Әйткәндәй, "башҡорт" атамаһының "баш" тигән өлөшөнөң суммаһы ла шулай уҡ алты. Был һандың хәрефе "у" (уау), Урал исемендәге беренсе хәреф. Был хәреф-өн кеше тәбиғәте менән бәйлелеге яғынан ишетеү (слух) һәләтен билдәләй (ау, әү). Хәрефтең график яҙылышы боронғо алфавитта шар һымаҡ итеп эшләнгән ишек тотҡаһын, йә эшләпәле ҡаҙаҡты, бәләкәс кенә элгесте хәтерләтә. Борон ҡаҙаҡ менән яҙмышты юрағандар, был юрамыш ваҡытында ҡаҙаҡтың эшләпәһенә төшкән яҡтылыҡ сағылышына иғтибар иткәндәр. Хәреф тағы ла янында Йыһан-Күктәр әйләнеп торған Тимер ҡаҙыҡты ла символлаштыра. Ошонан сығып, ул тәүлектең сәғәткә бүленеүе менән дә бәйле: 24=2+4=6 (2 һаны "өй", 4 һаны "ишек"). "Уау" хәрефе эзотерик яҡтан "азатлыҡ" тигән мәғәнәне бирә. Хәрефтең ишек тотҡаһы менән бәйлелеге юҡҡа түгелдер, сөнки тотҡа ярҙамында ишек асыла. Һандың исеме "шеш". Был һүҙҙең башҡорт халыҡ әкиәттәрендә ҡаҙыҡ башындағы шеш булып йыш осрағанын хәтергә төшөрөп ҡуяйыҡ. Бала саҡта алты ярымды атайым шеш ярым тип әйтһә, беҙ көлә торғайныҡ, йәнәһе, шесть тип әйтә алмай. "Шесть" һүҙе эсендә лә ҡаҙыҡ менән бәйлелек сағыла. Атайымдың һандың боронғо атамаһын ҡулланып әйткәнен ҡайҙан беләйек инде замана балалары.

**Гөлфирә ҠОТЛОМӨХӘМӘТОВА.**
**(Дауамы. Башы 3-6-сы**
**һандарҙа).**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Тәндең үҙгәрә башлауы

Икенсе тормош менән йәшәй башлауымдың тәүге айҙарында тән тиресәһендә үҙгәрештәр күрмәнем. Яҙып киткәнемсә, ағзаларым яңы туҡланыу режимына күсеү сәбәпле, ҙур ҡыйынлыҡтар һәм ыҙалар кисерҙе. Ауырлығым даими кәмей башланы. Өс йылдан һуң 75 килограмға ҡалдым. 1994 йылда ҡабат кендегемдең төбөн күрҙем. Уны һуңғы тапҡыр ҡарағаныма сирек быуат үткәйне. 2000 йылда мин 71 килограмм инем. Ауырлығым кәмегән һайын йөҙ тиремдәге май ҡатламының йоҡара барғанын шәйләнем. Ул матрасты хәтерләтеүҙән туҡтаны. Күҙәнәктәр бәләкәсәйҙе, бит тиреһе мөмкин булған тиклем шымарҙы. Иртән йыуынғанда бит тиреһе менән баш һөйәге араһындағы үле ҡатламдың яйлап юғала барғанын тойоп аптыраным. Бигерәк тә был йөҙҙөң маңлай өлөшөндә нык һиҙелә ине. Икенсе эйәгем, аҙ калориялы туҡланыуға сыҙамайынса, ҡабат нормаға ҡайтты.

Яйлап, әммә һис тайпылышһыҙ эсемдә тупланған май запасы ла шиңде. Ҡайышымда кәмеү яғына тәүҙә бер, һуңынан икенсе тишек тишергә тура килде. Шунда серле бер ваҡиға булды. Ятраҡан ҡайыштарымдың береһендә үҙенән-үҙе ике тишек барлыҡҡа килде. Әммә улар менән бөгөн дә файҙаланмайым. Бының өсөн яҡынса тағы ла биш килограмды ташларға кәрәк. Уның зарурлығын аңлайым, ләкин аппетитымды еңә алмайым. Әммә ҡорһағымдағы үле, кәкре-салыш нәмә бөтөнләй тиерлек юҡҡа сыҡты. Ғүмеремдә беренсе тапҡыр кендек менән умыртҡа һөйәге араһында урынлашҡан барлыҡ ағзаларымды ла тоя алам. Хәҙер ауырыуҙарҙың ҡайҙа үҫешкәнен һиҙемләйем: тән хужаһына организмында үле булып тойолған урындарҙа. Күҙаллауымса, ул урындарҙа нервылар юҡ, шуға күрә мейе унда барған процестарҙы күҙәтеү мөмкинлегенә эйә түгел. Шуға ла миндә тап тәндең ошо участкалары яман шеш ауырыуҙары йәшәгән мөхит булып тора ла инде, тигән фекер нығышмал урын алды.

Ауыҙ ҡыуышлығымда ла мөғжизәле ваҡиғалар күҙәтелде. Насар еҫле һәм ауыҙыма саҡ һыйған ҙур аҡ телем күҙ алдында "ирене". Бөгөн мин оло ҡыуаныс менән үҙемдең яңы, ҡабаттан тыуған телем менән идара итәм. Ул бәләкәй генә, ҡыҙыл-алһыу һәм шул тиклем тыңлаусан! Элек ҡуйы һәм тәмһеҙ булған төкөрөк икенсе төрлөгә әйләнде. Ул тейешле биҙҙәрҙән еңел сыға һәм татлы тәмгә эйә. Иртәнге йүгереү ваҡытында бөтөнләй икенсе төкөрөк бүленә. Ул аҙ ғына һәм аңҡауҙан тамған ише. Миңә ул төкөрөк түгел, ә ниндәйҙер икенсе, илаһи шыйыҡлыҡ кеүек тойола. Ауыҙ ҡыуышлығындағы шундай үҙгәрештәр хаҡына булһа ла мин ит ашауҙы ҡабат-ҡабат ташларға әҙермен.

Шулай уҡ яңы тормош рәүешенә иң ҡарышҡаны тештәрем булды. Аҡыл тештәре тирәһендә 30 йәшемдә ҙур булмаған төйөрҙәр барлыҡҡа килде һәм улар даими елһене. Ҡайһы берҙә тештәрем урт туҡымаларын сәйнәп, насар мөғәмәләһе өсөн хужанан шулай үс алырға теләнеләр шикелле. Һуңынан инде тештәрем һыҙлай башланы. Үҙгәртеп ҡороуҙарҙың ауыр йылдарында ике тешемде һурҙырырға тура килде. Бигерәк тә яңағымдың уң яғындағы аҙау тешемдең яртыһына еткән ҡатламы үҙәккә үтте. Ул әллә ни ҡалын да түгел, ләкин эске яҡтан тештең аҫҡы өлөшөн тулыһынса тиерлек ҡаплап тора ине. Ул йәшәүгә ҡамасауламаны, ләкин телем гелән уны яларға тырышты. Һөҙөмтәлә телемдең осо тире ҡатламынан ситкә сығып, тешкә ҡағылып, гелән ауыртыу тойғоһо кисерә ине. Бары тик 12 йылдан һуң ғына был ҡатлам тулыһынса эҙһеҙ генә юҡҡа сыҡты.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

62. Боронғо латин мәҡәлен иҫегеҙҙә тотоғоҙ: "Мене сана ин корпоре сано" (Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух). Бер ваҡытта ла мейе менән тығыҙ бәйләнештә булған тән торошона һанламай ҡарамағыҙ. Ул - һеҙҙең ҡорамығыҙ. Тәнегеҙҙе иң яҡшы яғыулыҡ менән туҡландырығыҙ, көндәлек күнекмәләр йөкмәтегеҙ һәм иң ҙур байлығығыҙ күреп хәстәрләгеҙ - ул ысынлап та иң ҙур байлығығыҙ.

63. Көслө рухлы булығыҙ, ул саҡта һеҙҙең аңығыҙҙың тыныслығына бер нәмә лә йоғонто яһай алмаясаҡ. Бер ваҡыт бер бокссы үҙен бәхетһеҙ итеп тоя башлаған. Сәбәбен һорағас, ул үҙенә кире уйҙар уйларға рөхсәт итеүен белдергән. Теләктәрегеҙҙе ентекле уйлап үлсәгеҙ һәм иғтибарығыҙҙы туплағыҙ. Камиллыҡ тәжрибә аша килә. Һеҙгә ысынлап та үҙегеҙгә бер генә кире уй уйларға ла рөхсәт итергә ярамай.

64. Йоҡлар алдынан өс сәғәт алда ашағыҙ, һуңға ҡалмағыҙ. Был аҙыҡты тигеҙ эшкәртеү мөмкинлеген бирер, тыныс йоҡо тәьмин итер. Йоҡоғоҙ тәрән, яңыртыусы булһын, тиһәгеҙ, ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләүҙе һәм бер сәғәт көсөргәнештән арыныуҙы ҡағиҙә итеп алығыҙ. Бер ваҡытта ла карауатҡа эшегеҙҙе алмағыҙ, һеҙҙе ҡуҙғытырлыҡ уйҙар уйламағыҙ. Үҙегеҙҙе бала кеүек йомшаҡ, тынысландырыусы "бишек" уйҙары менән йоҡлатығыҙ.

65. Абруйығыҙ тураһында хәстәрлек күрегеҙ. Әгәр унда бер генә тап та юҡ икән, был һеҙгә юғары бейеклеккә күтәрелергә ярҙам итер. Әммә уны бер тапҡыр ғына бысратһағыҙ ҙа, ҡабат тергеҙеү өсөн бик күп көс китәсәк. Һәр аҙымығыҙҙы баҫыр алдынан ошо хаҡта уйлағыҙ. Әсәйегеҙгә ғорурлыҡ менән һөйләй алмай торған бер генә нәмә лә эшләмәгеҙ. Күңел асҡанда, айыҡ аҡылығыҙҙы юғалтмағыҙ.

66. Эшмәкәрлектәрен үҙегеҙгә модель итеп алырлыҡ һәм үҫешегеҙгә йүнәлеш биреүсе остаздар табығыҙ. Тормошта яһау ихтимал булған барлыҡ хаталар эшләнгән инде, ни өсөн үҙең хаталанмаҫҡа була, кеше хатаһынан һабаҡ алмаҫҡа? Батыр, башҡаларға иғтибарлы, юғары интеллектлы берәйһен табығыҙ. Остазығыҙ күҙ уңында һеҙҙең иң юғары ҡыҙыҡһыныуҙарығыҙҙы ғына тоторға һәм тап ярҙам кәрәккән аспекттарҙа ғына йүнәлеш бирергә тейеш. Һәр ҡайһыбыҙға маҡтау, яҡшы баһа кәрәк, һәм иң бушамаған етәксе лә үҙенә ихтирамлы ҡараған һәм кәңәштәрен баһалаған кешегә ярҙам итергә һәр саҡ ваҡыт табасаҡ.

67. Үҙегеҙҙең көсһөҙ сифаттарығыҙҙың исемлеген төҙөгөҙ. Ысынлап та үҙ-үҙенә ышанған һәм белемле кеше үҙенең көсһөҙ яғын таный һәм уларҙы методик рәүештә юҡ итеү программаһын төҙөргә һәләтле. Барыһы ла уларҙы ҙур оҫталыҡ менән йәшереп йөрөй алмай бит. Икенсе яҡтан, үҙегеҙҙең көслө яҡтарығыҙҙы төрлөсә үҫтерегеҙ һәм уларҙы нығытығыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 18 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.15 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Ты не один". Сериал (16+)
16.20 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Страсти по Чапаю". Историческая драма. 5-я и 6-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (18+)
01.10 Ночные новости
01.30 "Тихий дом"
02.00, 03.05 "Мадагаскар". Док. фильм (12+)
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит своиз извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 26-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Катерина". Часть 1 (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Жена офицера". Сериал (12+)
23.20 "Безопасность.ру". Док. фильм (12+)
00.15 "Девчата" (16+)
00.55 "Вести+"
01.20 "Арн - тамплиер". Приключения (16+)
04.05 "Чак-4" (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.15 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.25 " Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
11.00 "Эдера". Нәфис фильм. 21 серия (12+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар" Хәлимә Ғәббәсова (6+)
16.00 "Эдера". Нәфис фильм 21 серия (повтор) (12+)
21.00 "Кис ултырып". "Өс егет" (12+)

### БСТ
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит своиз извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
**14.00 "Новости недели" (на русск. яз.) (16+)**
**14.30, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**14.45 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+)**
**15.15 "Царь горы" (6+)**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Бауырхак"**
**16.00 "Шатлык йыры"**
**16.15 "Учим башкирский язык"**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**17.15 "Орнамент"**
**17.45 "Эхо медных колокольчиков". Ангам Атнабаев**
**18.55 Чемпионат России по волейболу. "Урал" (Уфа) - "Локомотив" (Харьков)**
**21.00 "Профили. Авторский цикл Гульназ Галимуллиной" (12+)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.15 "Позывной "Барс"**
**23.00 "Еду я в деревню"**
**23.30 Художественный фильм (16+)**

## 19 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Контрольная закупка"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Ты не один". Сериал (16+)
16.20 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Страсти по Чапаю", 7-я и 8-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Карточный домик". Сериал (16+)
01.20 "Задиры" (16+)
02.30, , 03.05 "Маленькие женщины" (12+)
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 27-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Катерина". Часть 2. Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Жена офицера". Сериал (12+)
23.20 "Специальный корреспондент" (16+)
00.25 "Свидетели (12+)
02.25 "Кошмар на улице Вязов: ужас возвращается" (16+)
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.15 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.25 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
11.00 "Эдера". Нәфис фильм. 22 серия (12+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Яҙмыштарҙа йәйғор төҫө". Венер Семенов (6+)
16.00 "Эдера". Нәфис фильм 22 серия (повтор) (12+)
21.00 "Кис ултырып". Дилә Булгакова һүҙҙәренә йырҙар (6+)

### БСТ
**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 16.45 Документальный фильм (16+)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы" (6+)**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 16.30,17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Отдел культуры" (12+)**
**12.15 "Создай свое дело" (12+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.15 "Салям+" (12+)**
**14.45 "Тамле" (на башк. яз.)**
**15.15 "Книга сказок" (6+)**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Йырлы кэрэз"**
**16.15 "Учим башкирский язык"**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Уткэн гумер" (12+)**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сенгелдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.15 Художественный фильм (16+)**

## 20 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Ты не один". Сериал (16+)
16.20 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Страсти по Чапаю", 9-я и 10-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Карточный домик" (16+)
01.20 "Гримм" (16+)
02.15, 03.05 "Миссис Даутфайр" (12+)
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 28-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Катерина". Часть 3 (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Жена офицера" (12+)
23.20 "Пропавшая субмарина. Трагедия К-129" (12+)
00.15 "Пришельцы. История военной тайны" (12+)
01.15 "Вести+"
01.40 "Пятиборец" (16+)
03.40 "Чак-4" (16+)
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.15 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.25 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
11.00 "Эдера". Нәфис фильм. 23 серия (12+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар" Мәүлетбай Ғәйнетдинов (6+)
16.00 "Эдера". Нәфис фильм 23 серия (повтор) (12+)
21.00 "Кис ултырып". Зилә һәм Хәсән Усмановтар (6+)

### БСТ
**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 16.45 "Документальный фильм" (16+)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Киномарафон "Народное кино" представляет…" (16+)**
**12.00 "Мир настоящих мужчин" (16+)**
**12.15 "Создай свое дело"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Кондалек" (6+)**
**15.15 "Цирк в 13 метров"**
**15.45 "Семэр"**
**16.00 "Городок АЮЯ"**
**16.15 "Учим башкирский язык"**
**17.45 "Алтын тирмэ"**
**18.45, 19.45, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "Историческая среда"**
**23.15 Художественный фильм (16+)**

## 21 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.15 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Ты не один". Сериал (16+)
16.20 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Страсти по Чапаю", 11-я и 12-я, закл. серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Карточный домик" (16+)
01.20 "Интересное кино" в Берлине"
02.00, 03.05 "Фрида"
03.00 Новости"
04.20 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 29-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Катерина. Возвращение любви", 1-я и 2-я серии (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Жена офицера". Сериал
23.20 "Поединок" (12+)
00.55 "Вести+"
01.20 "Честный детектив"
01.55 "Чья это жизнь в конце концов?" Драма (16+)
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.15 " Ҡәмит". Юмор (6+)
08.25 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
11.00 "Эдера". Нәфис фильм. 24 серия (12+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.

14.00 "Яҙмыштарҙа йәйғор төҫө". Сабира Иҙиәтуллина (6+)
16.00 "Эдера". Нәфис фильм 24 серия (повтор) (12+)
21.00 "Кис ултырып". Рәил Өмөтбаев (6+)

### БСТ
**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00 "Глубокие корни". Н. Максютова" (6+)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30,17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Урал батыр". Республиканский конкурс исполнителей эпоса "Урал батыр"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Кондалек" (6+)**
**15.15 "Галямат донъя"**
**15.45 "Шэп арба"**
**16.00 "Йырлы кэрэз"**
**16.15 "Учим башкирский язык"**
**16.45, 17.45 "Телецентр" (12+)**
**18.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. 1/8 плей-офф. В перерывах: Новости**
**22.00 "Специальный выпуск"**
**23.00 "Диспут-клуб "Пятый угол" (16+)**
**23.45 "Февраль. Буран" (12+)**

## 22 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Ты не один", 29-я серия (16+)
16.20 "Ералаш"
17.00 "Жди меня" (16+)
18.00 Вечерние новости
18.50 "Человек и закон" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Две звезды"
23.05 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Призрак". Триллер (16+)
02.20 "Группа "Doors" (16+)
03.55 "Вальс Баширом" (16+)
05.30 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.55 "Мусульмане"
09.05 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести ПФО"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Тайны института благородных девиц", 30-я серия
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести ПФО"
17.50 "Катерина. Возвращение любви" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Юрмала" (12+)
23.20 "Александра". Мелодрама (12+)
01.25 "Первый после бога". Биографическая драма (12+)
03.40 "Мои счастливые звезды" (16+)
05.35 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.15 " Ҡәмит". Юмор (6+)
08.25 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
11.00 "Эдера". Нәфис фильм. 25 серия (12+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар" Ғизетдин Ғәйнетдинов (6+)
16.00 "Эдера". Нәфис фильм 25 серия (повтор) (12+)
19.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Миңзәлә Хәйруллина (6+)

### БСТ
**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 16.45 Документальный фильм (16+)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Галямат донъя"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 16.30,17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**12.15 "Создай свое дело"**
**12.30, 13.30,14.30,18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Автограф"**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.45 "Сулпылар"**
**16.00 "Байтус" (6+)**
**16.15 "Учим башкирский язык"**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Йома"**
**18.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. 1/8 плей-офф. В перерывах: Новости**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.15 "Дарман" (12+)**
**00.00 "Четыре вермени любви" (12+)**

## 23 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Особо важное задание"
07.30 "Армейский магазин" (16+)
08.00 "Судьба человека"
10.00 Новости
10.10 "Женский журнал"
10.20 "Небесный тихоход"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Офицеры"
14.10 "На войне как на войне"
16.00 Новости (с субтитрами)
16.15 "Брестская крепость". Военная драма (16+)
18.55 Праздничный концерт к Дню защитника Отечества
21.00 "Время"
21.20 "Белый тигр". Военная драма (16+)
23.20 "Пять невест". Романтическая комедия (12+)
01.20 "Карлос", 3-я серия (18+)
03.35 "Ниндзя из Беверли-Хиллз" (12+)
05.15 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
06.15 "Жду и надеюсь". Военная драма
09.00 "Белое солнце пустыни". Приключенческий фильм
10.45 "Волшебник". Мелодрама (12+)
12.25 "Берега". Комедийная мелодрама (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Берега". Продолжение (12+)
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Утомленные солнцем-2. Предстояние". Военная драма (12+)
00.30 "Мы из будущего". Фантастический боевик (12+)
03.05 "Горячая десятка" (12+)
04.10 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.15 " Ҡәмит". Юмор (6+)
08.25 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
11.00 "Хәниф Кәрим". Фильм (6+)
11.25 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар" Илдар Ғүмәров (6+)
21.00 "Кис ултырып". Гөлсөм Бикбулатова (6+)

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Защитникам Отечества". Концерт (12+)**
**08.00 "Мальчишки"**
**08.15 "Атай моно". Концерт**
**08.45 "Портрет"**
**09.15 "Фильм детям"**
**10.45 "История башкирского войска" (12+)**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "История башкирского войска" (12+)**
**14.00 Чемпионат России по мотогонкам на льду**
**16.30 "Дарю песню"**
**18.45 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Еду я в деревню**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Следопыт"**
**21.15 "Позывной "Барс" (12+)**
**22.00 "Смелая музыка" (16+)**
**23.00 Художественный фильм (16+)**

## 24 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Особо важное задание"
07.50 "Медвежонок Винни и его друзья"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым" (12+)
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.10 "Солдат Иван Бровкин"
15.00 "Иван Бровкин на целине"
16.50 "Леонид Харитонов. Падение звезды"
17.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
18.50 "Клуб Веселых и Находчивых" (12+)
21.00 "Воскресное "Время"
22.00"Мульт личности"
22.30 "Yesterday live" (16+)
23.30 "Познер" (16+)
00.30 "Развод Надера и Симин". Драма (16+)
02.50 "Мэрилин Монро. Невостребованный багаж" (12+)
04.00 Документальный фильм

### РОССИЯ 1
05.20 "В зоне особого внимания". Приключения
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Городок. Дайджест"
11.45 "Выйти замуж за генерала". Мелодрама (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Выйти замуж за генерала". Продолжение (12+)
16.00 "Смеяться разрешается"
18.10 "Фактор А"
20.00 "Вести недели"
21.30 "Утомленные солнцем-2. Цитадель". Военная драма (12+)
00.45 "Мы из будущего-2". Фантастический боевик (12+)
02.55 "Хостел". Остросюжетный фильм (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.15 " Ҡәмит". Юмор (6+)
08.25 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
11.00 "Күңел ынйылары. Фәйзи Ғәскәров". Фильм (6+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.

14.00 "Замандаштар". Айрат Ғайсин(6+)
19.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Әлфиә Юлсурина (6+)

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Уткан гумер. 1960-е годы" (12+)**
**10.00 "Баурсак"**
**10.15 "Семер"**
**10.30 "Сладкая сказка"**
**11.30 "Гора новостей"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.)**
**13.00 "Тэмле" (на башк. яз.) (12+)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 Чемпионат России по мотогонкам на льду**
**16.30 "Дорога к храму"**
**17.00 "Дарю песню**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.00 "Кондалек" (6+)**
**19.30 "Замандаштар" (6+)**
**19.45 "Сэнгелдек"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Итоги спорта" (16+)**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели" (на русск. яз.)**
**22.00"Вечер.com" (12+)**
**22.45 "Хылыукай-2012". Финал**
**00.15 "В минуты отдыха" (12+)**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҺАЛДАТ БУЛДЫ УЛЫҢ...




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

ИҒТИБАР!

# БӘЙГЕГӘ КИЛЕГЕҘ,

## "Юлдаш йыры - 2013"кә!

**Кешегә ғүмер итеү өсөн һыу-һауанан, уттан-ерҙән ҡала иң кәрәкле шарттарҙың береһе - моң. Йыр-моң кешене илһамландыра, күңелгә ҡанат ҡуя, дәрт уята. Ул тәбиғәттең иң ғәжәйеп мөғжизәләренең береһе һәм беҙ күҙ алдына ла килтермәгән ҡөҙрәткә эйә.**

Шуға ла йырҙан айырылмаған, күңелдәгеһен йыр аша еткергән замандаштарыбыҙ бихисап. Әммә уларҙың күптәре тормошон ҙур сәхнә менән бәйләргә ашыҡмай, бары үҙе өсөн генә йырлауын дауам итә. Тап ошондай моң эйәләрен танытыу маҡсатында "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Юлдаш" мәғлүмәт һәм йыр-моң каналы өсөнсө йыл рәттән "Юлдаш йыры - 2013" асыҡ республика конкурсы үткәрә килә. Быйыл да "Юлдаш йыры" бәйгеһе халыҡ һәм эстрада йырҙарын оҫта башҡарыусыларҙы билдәләйәсәк. Маҡсаты - үҙешмәкәр йырсыларҙың башҡарыу кимәлен күтәреү, уларҙың оҫталығын камиллаштырыу, композиторҙар һәм йыр авторҙарының ижади мөмкинлектәрен үҫтереү.

Конкурста Башҡортостан Республикаһынан, шулай уҡ Рәсәй төбәктәренән, сит илдәрҙән башҡорт һәм татар телдәрендә йырлаған, 16 йәштән 60 йәшкә тиклемге башҡарыусылар, шулай уҡ ҡатнашыусылар башҡарыуында үҙ яҙмаларын тәҡдим иткән йыр авторҙары ла ҡатнаша ала. Бәйге өс этапта үтә: тәүге тур - 2013 йылдың 1 февраленән 30 апрелгә тиклем, икенсе тур - 1 июлдән 31 авгусҡа, өсөнсө тур сентябрь, октябрь айҙарында үтә. Бәйләнеш өсөн телефондар: (347) 251-74-88, 273-40-87, 295-98-79

Беренсе турҙа радио тыңлаусылар СМС-хәбәрҙәр, шылтыратыуҙар, хаттар менән икенсе турға үтеүсе кандидаттарҙы билдәләй. Икенсе турҙа рәсми жюри ябыҡ ултырышта был турға тәҡдим ителгән яҙмаларҙы тыңлай, ә өсөнсө турҙа һығымталар яһала һәм еңеүселәр ҡатнашлығында Гала-концерт тәҡдим ителә. Өсөнсө турҙа еңеүселәр лауреат һәм дипломант исемен ала. Бынан тыш, Гала-концерт Башҡортостан телевидениеһында күрһәтелә, уның яҙмаһы диск формаһында донъя күрәсәк.

**Сәриә РАМАҘАНОВА.**

**6-сы һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Велосипед. Магнитогорск. Шамаил. Букет. Халтура. Монах. Һаралйын. Тымау. Бишбармаҡ. Сайыр. Ҡаһарман. Ыҙа. Таяҡ. Шик. "Һиҙиәтов". Штурмовик. Умиак. Ултырғыс. Дәрес. Аҡыл. Һыуһар. Ауылдаш. Анализ. Билмән. Мустанг. Нимб. "Һабантуй". Инәкә. "Өләсәй". Рәссам. Дәһшәт. Ейән.

**Вертикаль буйынса:** Ылаш. "Хушлашыу". Рауил. Кампус. Тирет. Аран. Авив. Мышы. Батҡаҡ. Кикел. Ленинград. Ванна. Шөбһә. Лакмус. Олон. "Өмөт". Баян. Ғазраил. Әрке. Парикмахер. Афәт. Турһыҡ. Һорау. Йәйрән. "Ауди". Лиризм. Ҙурат. Арагви. Ышаныс. Әнһар. Март. Ғариза. Норвег. Саронг.

**5-се һандағы сканворд еңеүсеһе Баймаҡ ҡалаһынан Шарапова Әлифәне редакцияла бүләк көтә.**

АФАРИН!



## Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 февраль "Әйтер һүҙем ҡалды..."** Әнғәм Атнабаевтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған әҙәби-драматик кисә

**17 февраль "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н.Ғәйетбай), комедия

**19 февраль "Нәркәс"** (И.Йомағолов). Башҡортостандың халыҡ артисы Зәйни Иғдәүләтовтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арнала

**20 февраль "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим), трагедия

**21 февраль "Артур+Нэнси"** (Ә. Дилмөхәмәтова), мәңгелек мөхәббәт йыры

**22 февраль "Февраль. Буран...Шағир иленә сәйәхәт".**

**23 февраль "Күңел моңдары"** музыкаль тамаша

## Милли йәштәр театры

**16 февраль "Нух кәмәһе"** (У.Хуб), бөтә ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00

**"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т.Миңнуллин), комедия. Башлана 18.00

**19 февраль "Йәләлетдин атай"** (М.Кәрим), уйланыу

## Башҡорт дәүләт филармонияһы

**16 февраль "Киләсәкте һөйләр ҡурайым"** - Ишморат Илбәковтың ижад кисәһе. Концертта Флүрә Килдейәрова, Азат Айытколов, Рәсүл Ҡарабулатов, Әлфиә Юлсурина, Миңзифа Исҡужина, Азат Биксурин, Зөлхизә Илбәкова, Башҡортостан Республикаһының Халыҡ ҡоралдары милли оркестры, "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле, Мәскәү һәм Ҡаҙағстандан килгән ҡунаҡтар ҡатнаша.

## Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры

**23 февралдә** Стәрлетамаҡ Рус театры сәхнәһендә Наил Ғәйетбаевтың **"Һатам! Иремде һатам!"** пьесаһы буйынса сәхнәләштерелгән спектакль тәҡдим итә. Ролдәрҙе, театрҙың йөҙөк ҡашы булған Гилүс Минһажов, Светлана Фәйзуллина, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Илһам һәм Физәлиә Рәхимтовтар, Азамат Хәлилов һәм йәш таланттар башҡара.

ИҒЛАН!

**Продается дом в Благоварском районе с.Санны т.8-927-303-76-61**

*Күпме бейек булһа ла, сигенмәһәң - тауға менерһең, күпме ауыр булһа ла, сигенмәһәң - эште еңерһең.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!

# РӘМИ ҺҮҘЕН...

## йөрәгенә индерҙе йәш быуын

**Хәҙерге быуын йәштәренә ошо йәһәттән дә көнләшерлек ул: улар рәхәтләнеп Рәми шиғырҙарын һөйләй, тыңлай, йөрәктәрен, күңелдәрен Рәми рухы менән тоҡандыра ала. Беҙҙең быуынға ундай ук иркенлек һәм ирек тәтемәне тәтеүгә, әммә беҙгә Рәми ағайҙы күреп белеү, уның "Туған тел" шиғырын шым ғына, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа ғына һөйләп, ятлап йөрөп, "тыйылған емеште тәмләү" бәхете тейҙе.**



Ул саҡта университетҡа уҡырға килгән һәр башҡорт студенты оло курс студенттары ауыҙынан Рәми ағайҙың ошо мәшһүр шиғырын ишетеп, уны ятлап ала торғайны. Ә беҙ был эстафетаны артабан үҙебеҙҙән һуң килгән студенттарға тапшыра инек. Ниңә шул тиклем ҡурҡтылар икән ул саҡта Рәми һүҙенән, тиһегеҙме? Күптән түгелге тарихта халыҡты үҙ теленән, үҙ тамырҙарынан айырырға маташыуҙың бер өлгөһө булғандыр инде бындай рухтағы һүҙҙе тыйыу-йәшереүҙәр: Рәми ағай әйткәндәрҙе күңеленә индергәндәр үҙ асылына битараф була алмай бит инде. Ә ул заманда битарафтарҙы "сәсеп үҫтерҙеләр" - шулай ҡулайлы ине.

Әйе, бөгөн рәхәтләнеп һөйләй балалар, йәштәр, ололар Рәми шиғырҙарын. Тимәк, битараф булмаған быуын килә беҙгә алмашҡа. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуған көнөндә, 12 февралдә, уның исемен йөрөткән 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында үткән сираттағы шиғриәт бәйрамында был хәҡиҡәтте тағы бер тапҡыр раҫланым үҙемә. Сәхнәлә сығыш яһаусыларҙың ихласлығы залда тамаша ҡылыусы балаларҙа ла ихласлыҡ, күҙҙәрендә осҡон тыуҙырҙы. Шуныһыҙ мөмкин дә түгел ине шул. Сығарылыш класс уҡыусылары: Йәмил Намаҙбаев һымаҡ итеп - "Бер ҡыл"ды, Айзирә Бикәнәсова һымаҡ итеп "Мең туғыҙ йөҙ утыҙ ете"не һөйләгәндәрен, Рәми ағайҙың һабыр, сабыр, утлы һәм ҡанатлы һынын Ғәлләм Бикташев һымаҡ һынландырғандарын күргән булманы да шикелле быға саҡлы. Талантлы, даланлы, иманлы балалар! Был уҡыусыларға ҡарата гимназияла байтаҡтан килгән йолаға бик урынлы атҡарҙылар - улар Рәми Ғарипов исемендәге премияға лайыҡ булды.

Был премияны өлкәндәрҙән М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрынан Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәт Үтәшевҡа ла бирҙеләр. Беләһегеҙ, Хөрмәт Ғаззали улы былтыр шулай уҡ Р. Ғарипов исемендәге премия лауреаты Зөһрә Буранҡаева сценарийы буйынса бөйөк шағирыбыҙға арналған "Февраль, буран..." тигән тамаша ҡуйғайны театрҙа. Тамаша шул тиклем оло хуплауға лайыҡ булғайны. Тик күпләп тамашасы йыя ала торған, тамашасы тарафынан көтөлгән был сәхнә әҫәренең театр репертуарына даими индерелмәүе генә аптырата. Рәми һүҙен теге саҡтағы тыйыуҙар шауҡымы һаман шулай үҙен һиҙҙереп-һиҙҙереп ҡуймы булмаһа?..

Нисек кенә булмаһын, бөгөнгө рухи ташҡынды туҡтатырмын тимә. Хәҙер балаларҙың теле "Туған тел" шиғыры менән асыла, мәктәптәрҙә Рәми уҡыуҙары, Рәми әҫәрҙәре буйынса иншалар конкурстары үткәрелә, Рәми һүҙе хатта интернет майҙанына сығып, унда барған шиғыр бәйгеһенә әллә күпме ҡатнашыусыларҙы йәлеп итә. Тимәк, ташҡын йырылды һәм уны быуып тотоп булмаясаҡ.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

ФЕКЕР ЕТКЕРӘМ

# САЛАУАТ ПРОСПЕКТЫНДАҒЫ...

## Салауат һәйкәле тураһында

**Өфөлә Салауат Юлаев проспектының башында Салауат Юлаевҡа арналған һәйкәл ҡуйыласағы мәғлүм. "Киске Өфө"лә буласаҡ һәйкәл эскизы һәм уға аңлатма ла бирелгәйне.**




Байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Әммә, Ғафури районынан Ғ. Шәйәхмәтов уҙамандан бушҡа, үҙ фекер-тәҡдимен белгертеп яҙғандар булманы ошоғаса. Был битарафлыҡмы? Ҡул һелтәп кенә ҡараумы? Ғөмүмән, күп мәсьәләләрҙә шым ҡалабыҙ. Был юлы ла ғалимдарҙың, яҙыусылар, сәйәси эшмәкәрҙәр, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһына, орденына лайыҡ булған кешеләрҙән фекерен ишетке килгәйне, ниңәлер, улар өндәшмәй ҡалды.

Әгәр һәйкәл ҡуйыла икән - ул милли батырыбыҙҙы онотмау, уның эшмәкәрлегенә баһа биреү, белмәгәндәрҙе уның шәхесе менән таныштырыу өсөн эшләнә бит инде. Шуға ла мин ул һәйкәлдең ошондай ҡороған, япраҡһыҙ ағас рәүешендәге бер һөлдә итеп эшләнеүе менән һис килешмәйем. Унда тере герой сағылмай. Ябай биҙәүес кенә. Әгәр һәйкәл анығ шәхескә арнала, донъяуи ҡарашын сағылдырырға ҡуйыла икән, шуны күрһәтергә кәрәк.

Мин рәссам түгел. Шулай ҙа, һәйкәлдә ғорур аты янындағы мөһабәт кәүҙәле ирҙе күргем килә. Ат юғары күтәргән башын һул яҡҡа борған. Аттан алдараҡ ир кеше баҫҡан. Һул ҡулы менән теҙген тота, йөҙө һул яҡҡа боролған - Өфөгә күперҙән ингән ҡунаҡтарҙы ҡаршылай, ә уң ҡулы "Рәхим итегеҙ!" тигәндәй, урам ыңғайына күтәрелгән. Уҡ-һаҙағы күренерлек итеп аттың һул яғында, эйәр ҡашағаһына эленгән.

Һәм, берүк, һәйкәл "каянан осмаһын". Ҡая башы - упҡынға китеү, мәңгелеккә юғалыу. Хәйер, ундай йөкмәткеле бер һәйкәлебеҙ бар инде.

Һәйкәл мәңгелек. Уның йөкмәткеһе, баһаһы бар. Һәм ул тик биҙәүес кенә булып ҡалмаһын.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭСЕҢ АУЫРТҺА...

## ауыҙың тый

Күпме бейек булһа ла, сигенмәһәң - тауға менерһең, күпме ауыр булһа ла, сигенмәһәң - эште еңерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ярлы ғаиләлә үҫкән егет бай, етеш ғаиләлә үҫкән, белем алған ҡыҙҙы ярата. Ҡыҙ ҙа уны ярата. Ләкин ҡыҙҙың ата-әсәһе уларҙың өйләнешеүенә риза булмай. Ҡыҙыҡай ата-әсә ризалығынан тыш та егет менән бергә булырға әҙер, әммә егет быға юл ҡуймай. Ул үҙенең был ҡыҙға лайыҡлы түгеллеген таный. "Мин сәйәхәткә китәм, - ти егет, -байыған, танылыу яулағас ҡына мин һиңә өйләнеп ҡайтасаҡмын һәм һиңә өйләнәсәкмен..." Ҡыҙыҡай илай башлай, ләкин тәүәккәл һәм ғорур егетте был ҡарарынан һүрелдерә алмай.**

**Ҡыҙ егетен күп йылдар көтә. Был ваҡыт эсендә егет ул ҡәҙәре үк байымаһа ла, кешеләргә бик күп изгелектәр ҡыла һәм киң танылыу яулай. Бына бер ваҡыт уның башына шундай уй килә: "Мин ниңә һөйгәнемдән ҡасам әле? Ул бит минең бәхетем, беҙ бит берберебеҙҙе ятатабыҙ. Әгәр ҙә ул мине ошо көйөнсә лә ярата икән, ниңә мин уны көтөргә мәжбүр итәм?" Егет яңынан ҡыҙ эргәһенә әйләнеп ҡайта һәм алдына теҙләнеп, уны көтөп күп йылдарын заяға үткәрергә мәжбүр иткән өсөн ғәфү үтенә. Улар бергә йәшәй башлай. Егет һөйгәне өсөн йәнен бирергә әҙер була, уның һәр күҙ ҡарашын тотоп, һәр теләген алдан белеп тора. Ҡыҙ оло ҡыуаныс кисерә кисереүгә, тик егеттең ҡылыҡтарында низер етмәгән кеүек тоя...**

**Бына бер ваҡыт егеттең бер танышына уның ярҙамы кәрәк була һәм ул алыҫ юлға сығырға тейеш була. "Һин сәфәргә сығаһыңмы?" тип һораһ ҡатыны. "Юҡ, - ти ире, - мин хәҙер һинең эргәңдән бер ҡайҙа ла китмәйәсәкмен. Мин үҙ бәхетемдән ҡасып, оҙаҡ йөрөнөм, ә хәҙер мин һинең эргәңдә генә булырға, бар иғтибарым, хәстәрлегемде һиңә генә бағышларға тейешлегемде аңланым. Миңә һинән башҡа бәрәү ҙә кәрәкмәй". Был һөйләшеүҙән һуң ҡатындың кәйефе төшә. "Беләһеңме, - ти ул иренә, - беҙ танышҡан ғына мәлдәге теге ғорур һәм тәүәккәл егетте иҫем китеп ярата инем. Мин һине күп йылдар көттөм һәм миңә бәрәү ҙә кәрәкмәй ине. Эйе, мин һинең - гел генә юғарыға ынтылған, һәр төрлө батырлыҡтарға әҙер булған, кешеләргә ярҙам иткән һәм барыһы ла яратҡан егеттең гел генә эргәмдә булыуын теләнем, һинең менән ғорурландым. Һинең минеке генә икәнеңде белә инем. Әле минең алдымда мохтаждарҙы үҙ ярҙамынан мәхрүм иткән икенсе кеше баҫып тора. Һин үҙгәрҙең. Был - һин түгел..." Был һүҙҙәрҙән һуң йәш ир уйлана һәм бер ҡарарға килеп, тағы ла алыҫ сәйәхәткә юллана. Ә ҡатыны уны көтөп өйҙә ҡала. Ҡатын-ҡыҙ көтәр өсөн, ир-егеттәр эҙләнеү, юлдар гиҙеү өсөн яратылған шул..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
15 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5650
Заказ 552